*✓ Һине үпкәләтерлек һүҙ әйттеләрме? Асыу белдерер алдынан уйлап ҡара әле: үпкәләүгә тиклем эйелергә кәрәкме? Үпкәләү бит ҡайҙалыр түбәндә ята торған тойғо һәм уны күтәреү өсөн мотлаҡ түбәнгә табан эйелергә кәрәк.*

*(Дмитрий Лихачев).*


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

30 АВГУСТ - 6 СЕНТЯБРЬ (УРАҒАЙ - ҺАРЫСАЙ) 2013 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№35 (557)



## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Ер аҫтынан...**



юлдар бар

5

**Аҡыллы йәмғиәтте...**



кем төҙөйәсәк һуң?

6

**Ғалимдарға мөрәжәғәт итәм...**



7

**Ҡурайҙың урыны...**



һәр саҡ түрҙә

11

14 ТВ-программа


## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## 8 сентябрҙә БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайға депутаттар һайлау өсөн тауыш бирәсәкбеҙ. Был хаҡта, шулай уҡ кемдәрҙе һайлаясағығыҙ тураһында беләһегеҙме?

***Марс КӘРИМОВ, хеҙмәт ветераны, Өфө ҡалаһы:*** Һайлауҙар булаһын белһам дә, кемдәрҙе һайлаясаҡбыҙ икәнен белмәйем. Кисә кис бер ҡатын, кемгә тауыш бирәсәкһегеҙ, тип фатир һайын һорау алып йөрөп сыҡты. Мин уға ла, белмәйем, тип яуап бирҙем. Ә нимә тип әйтәйем һуң? Ҡоро вәғәҙәләргә күпме ышанырға була? Әйткәндәй, яңыраҡ ҡына Үҙәк телевидениенан РФ Дәүләт Думаһының бер депутаты сығышын тыңларға тура килде. Ул республика парламентына үҙ партияһы вәкилен тығыу өсөн ниндәй генә сүрәткә инмәне! Әйтерһең дә, ул бөйөк Ҡотҡарыусы. Элегерәк уның ауыҙынан Башҡортостан, уның халҡы тураһында кире фекерҙәр яңғырағанын да ишеткеләнек. Хәҙер инде ул "бай Башҡортостан"ды ауыҙ һыуын ҡоротоп маҡтай, тау-тау вәғәҙәләр бирә. Улар өсөн тауыш бирһәк, был фирҡә, йәнәһе лә, көн тәртибенә республиканы Мәскәүҙең һалым ҡоллоғонан азат итеү мәсьәләһен ҡуясаҡ икән... Күрәләтә быңдай ике йөҙлөлөккә нисек ышанмаҡ кәрәк? Нисәмә йыл буйы Дәүләт Думаһында ултырып, әлегеләй "ғәҙелһеҙлек"те ниңә ул әле генә "күреп ҡалған"?

Әлбиттә, һайлауҙар алдынан "Яңырыу өсөн" тигән саҡырыуҙар барлыҡҡа килеүе күңелгә ятышлы, әммә ысынбарлыҡта бөтәһе лә иҫкесә бит. Айырыуса шундай тиҙлек менән үҙгәреүсе хаҡтар сәйәсәтен миҫалға алһаң, сәстәр үрә торорлоҡ! Торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәр өсөн хаҡтарҙың ҡабарыуы туҡтарға ла уйламай әле. Башҡортостаныбыҙ, эйе, бай ил, ләкин ул таланып бөтөү өҫтөндә икәнен күрәме, аңлаймы икән буласаҡ депутаттар? Республика ере, урман, һыуҙары, ер аҫты байлыҡтары - бөтәһе лә уның үҙ милке булараҡ теркәлергә, ә уның менән файҙаланыусылар Башҡортостан халҡына тейешле һалымды түләргә бурыслы бит. Бына ошо мәсьәләне көн тәртибенә ҡуйырға, ысынлап та , ваҡыт етте, ә уны ошо ерҙә тыуып үҫкән Башҡортостан патриоттары ғына атҡара алыр ине. Мине бигерәк тә аҫаба халыҡтың телен һаҡлау, уны мәктәптә уҡытыу мәсьәләһе борсой. Башҡортостан Республикаһы Конституцияһы, "БР халыҡтары телдәрен һаҡлау, өйрәнеү һәм үҫтереү" тип аталған Дәүләт программаһы, "БР халыҡтары телдәре тураһында" Закон ғәмәлдә булыуға ҡарамаҫтан, мәктәптәрҙә башҡорт теле дәрестәрен бөтөрөү, башҡорт теле уҡытыусыларын ҡыҫҡартыу, милли компонентты "теләк буйынса" уҡытырға тип, дәүләт мәсьәләһен директор ҡарамағына торғоҙоп ҡалдырыу миңә һис кенә лә оҡшамай. БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙың буласаҡ депутаттары бына ошондай мәсьәләләрҙе көн тәртибенә ҡуйырлыҡ, ғәҙел ҡарарҙар һәм закондар сығарып, уларҙы еренә еткереп үтәрлек эшлекле шәхестәр булһын ине. Ундайҙар өсөн мин шатланып тауыш бирер инем.

**(Дауамы 2-се биттә).**

## ШАҒИР ҺҮҘЕ




# КИЛЕН

*Башҡортостаным, илем,*
*Яҙалмай бер ҙә билен.*
*Гүйә, мыжыҡ ҡәйнәһенә*
*Хеҙмәт итеүсе килен.*

*Баш күтәрмәй хеҙмәт итеү -*
*Киленгә яҙған яҙмыш.*
*Инәйемдең үткәненән*
*Ул яҙмыш миңә таныш.*

*Беләм, әүәл был йоланың*
*Ҡануны булған ҡаты;*
*Ауыҙ асып һүҙ әйтергә*
*Булмаған уның хаҡы.*

*Ауыҙ асып һүҙ әйталмай*
*Аҙмы йәшәнең, илем.*
*Шып-шым ғына йөрөй торғас,*
*Юғала яҙҙы телең.*

*Үҙ йортоңда берәй ҡасан*
*Булырһың микән хужа?*
*Эстән генә һыҙа-һыҙа*
*Бөтә ғүмерең уҙа.*

*Үткәнеңдә байҡаным да,*
*Башҡортостаным, илем.*
*Һинең дә бит бар булмышың*
*Бер килен кеүек, тинем.*

✓ ***Әгәр йүнле кешенең исем-шәрифен күрәһегеҙ икән, ниндәй партия ағзаһы булыуына ҡарамаҫтан, уның өсөн тауыш бирергә саҡырам. Йүнле кеше булһын - бөгөн уларға бик ҙур ҡытлыҡ икәнен үҙегеҙ күреп тораһығыҙ.***



БАШ ЙОРТТА



# ЮЛДАРЫБЫҘ ЯЛТЫРАП ЯТА,
## йорттарыбыҙ - гөл-сәскәлә

**Баш ҡалабыҙҙың Сипайлово биҫтәһендәге юлдар торошо тураһында бик күп яҙылды, телетапшырыуҙарҙа ла йыш күрһәтелде. Ә инде был хаҡта һайлаусыларҙың депутаттарға 20 йыл буйына туҡыуынан теләһә ниндәй асфальт та тишелеп сығырға әҙер ине, буғай...**

Гәрсә ҡала власы алмашынып, етәкселеккә Ирек Ялалов килгәнсәгә тиклем бер ниндәй тәнҡит тә, депутаттар ҙа юлдарҙың төҙөкләнеүенә ярҙам итмәне. Яҙмышыбыҙға буйһоноп, соҡор-саҡыр юлдарҙан тубыҡтан һыу һәм бысраҡ кисеп, Мазай ҡуяндарылай, ырғый-һикерә эшкә йөрөүебеҙҙе дауам иттек. Таксистар булһынмы, "Ашығыс ярҙам" машинаһымы - беҙҙең Яр буйы (Набережная) урамына үтеп инә алмайынса, әллә ҡайҙан урап, дамба буйлап килеп төшөргә мәжбүр булалар ине. Ә инде ситтән кеше-меше йәки ҡунаҡ-фәлән көтөргә тура килһә, ошондай ҡот осҡос юлдар өсөн үҙебеҙ ғәйепле һымаҡ, оялышыбыҙҙан ни ҡылырға белмәй инек.

Һәм бына, әйтеүемсә, яңы етәксебеҙ эште ең һыҙғанып баш ҡалабыҙ юлдарын тәртипкә һалыуҙан башланы. Ышанаһығыҙмы-юҡмы, тип-тигеҙ асфальт юл беҙҙең иң төпкөл Яр буйы урамына ла килеп етте хатта! Ә бит мәңге килмәҫ кеүек ине... Ҡыуанысыбыҙҙың сиге юҡ. Ә машиналы халыҡтың нисек һөйөнгәнен күрһәгеҙ! Күҙгә кеүек ялтырап ятҡан тап- таҡыр, иркен юлдан елдереп кенә йөрөйҙәр хәҙер. Ике яҡлап йәйәүлеләр өсөн тротуар ҙа эшләнеләр.

Ошо юл буйлап Гагарин урамына табан атлағанда һул ҡулда яңы төҙөлгән һәм йәйғор төҫтәр менән зауыҡлы итеп биҙәкләнгән яңы балалар баҡсаһы ла эшләй башланы. Уның балалар өсөн уйын майҙансыҡтары әкиәт донъяһын хәтерләтеп, бөтә тирә-яҡҡа нур сәсеп тора. Ғөмүмән, Сипайлово урыны менән танығыһыҙ матур үҙгәрештәр кисерә, төҙөкләндерелә, төҙөлә...

Әлеге шул беҙҙең урамдың йорттар яны майҙансыҡтары ла гөл-сәскәгә күмелеп ултырҙы йәй буйы. Иртә яҙҙан ҡайҙандыр ҡап-ҡара тупраҡ килтереп ауҙарып, клумбалар эшләп, сәскәләр, ҡыуаҡ һәм ағас үҫентеләре ултыртып сыҡҡайнылар. Улар күҙ яуын алып, гөрләп үҫеп китте. Быларҙың бөтәһе өсөн дә баш ҡалабыҙ башлығына, үҙ эштәрен тиҙ һәм сифатлы итеп башҡарған юл төҙөүселәргә рәхмәтлебеҙ!

**Фирүзә ИШБАЕВА,**
**хеҙмәт ветераны.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## *8 сентябрҙә БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайға депутаттар һайлау өсөн тауыш бирәсәкбеҙ. Был хаҡта, шулай уҡ кемдәрҙе һайлаясағығыҙ тураһында беләһегеҙме?*

**(Башы 1-се биттә).**

***Кадир МӘҒӘФҮРОВ, иҡтисад фәндәре докторы, профессор:*** Үҙ һайлау округының буйынса депутатлыҡҡа кандидаттар, уларҙың һайлау алды программалары менән таныш булыу кәрәк, әлбиттә. Ләкин һүҙ ҡәҙере юҡҡа сыҡҡан, сәйәсмәндәрҙең һүҙ биреүе алдаҡҡа тиңләшкән был заманда кандидаттарҙың һыу буйы платформаларын уҡыуға ваҡыт та йәл булып китә, күрәһең, күҙ ышанһа ла, күңел ышанмай хәҙер уларға. Унан һуң, иҡтисад белгесе булараҡ, бәғзе берәүҙәренең еңел генә "яҡшы тормош, тотороҡло хаҡтар, күберәк пенсия" вәғәҙә итеүе көлкө лә тойолоп китә: нисә йыл буйы емертелгән системаны улар нисек 4-5 йыл эсендә үҙгәртергә һүҙ бирә ала?

Ә шулай ҙа 8 сентябрҙә һайлау участкаһына килеп, бюллетендәрҙе ҡулға алғас, ҡабаланмай ғына уны уҡып, ҡарап сығырға кәңәш итәм: йүнле берәй кеше бармы исемлектә? Әгәр ишетеп белгән булһа ла йүнле кешенең исем-шәрифен күрәһегеҙ икән, ниндәй партия ағзаһы булыуына ҡарамаҫтан, уның өсөн тауыш бирергә саҡырам. Йүнле кеше булһын - бөгөн уларға бик ҙур ҡытлыҡ икәнен үҙегеҙ күреп тораһығыҙ. Ҡайһы бер фирҡә вәкилдәренең халҡыбыҙҙың данлы улдары - героик шәхестәребеҙгә ҡарата һуңғы йылдарҙағы ҡәтғи реакцион идеологияһы бер ниндәй сиктәргә лә һыймай икәнлекте онотмайыҡ. Яңы ойошҡан йәш партияларҙы иһә эштәренә ҡарап һынайһы бар әле. Барыбер һайлауға барырға, кемдәлер һайларға кәрәк, юғиһә үҙәк матбуғатта, Рәсәй Дәүләт Думаһы барлығына һылтанып, төбәк парламентының ни кәрәге бар, тигәнерәк провокацион фекерҙәр "сәселә" башланы. Абай булайыҡ, аң булайыҡ: вәғәҙәһенә ҡарап түгел, ошоғаса башҡарған ғәмәлдәренә ҡарап тауыш бирәйек буласаҡ депутаттарға.

***Тимерйән РӘЖӘПОВ, Хәрби хәрәкәттәр ветерандарының Башҡортостан союзы рәйесе:*** Мин был һорауға үҙебеҙҙең ветерандар мәнфәғәтенән сығып та, Башҡортостан Республикаһы патриоты булараҡ та яуап бирәм: ваҡытында Тыуған ил намыҫын, уның хәүефһеҙлеген һаҡлап һуғышҡан ветерандарға, инвалидтарға кешелекле мөнәсәбәт күрһәтеп, уларға дәүләт яҡлауы һәм ярҙамы булдырыу буйынса аныҡ эштәр башҡарған кандидаттар өсөн тауыш бирмәксемен. Үкенескә ҡаршы, күпселек кандидаттарҙың һайлау программаһында бындай пункт юҡ, шуға күрә БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары араһында үҙебеҙҙең Союздан да вәкилдәр күрге килә. Үҙ мәнфәғәтебеҙҙә генә лә түгел, әлбиттә. Хәрби хәрәкәттәр ветерандары кеүек, утлы ғәрәсәтте башынан үткәргәндәр халыҡ ихтыяжын күңеленә яҡынырaҡ ҡабул итәлер, тигән фекерҙәмен. Байлыҡ, элиталы фатир, ҡиммәтле машина алыу, сит ил курорттарында ял итеүҙе хыял итеп депутатлыҡҡа ынтылыусылар ҙа барҙыр, әлбиттә. Тауыш бирергә килер алдынан кандидаттарҙың тормош һәм хеҙмәт юлына күҙ һалып алырға онотмайыҡ. Ябай ғаиләлә үҫеп, киләсәгенә үҙ көсө, намыҫлы хеҙмәте менән юл ярғандарға өҫтөнлөк бирәйек, тимәксемен.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА**
**яҙып алды.**

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**Гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһының тағы бер миҙгеле етте. Ул баҫмабыҙҙың киң мәғлүмәт саралары баҙарындағы урынын, тотороҡлолоғон билдәләүсе, шулай уҡ уҡыусыларыбыҙҙың тоғролоғон, ихтирамын, хатта аңлылыҡ, рухлылыҡ кимәлен дә күрһәтеүсе мәл, тип баһалана.**

● Шулай итеп, 2014 йылдың беренсе яртыһына 50665 индекслы **"Киске Өфө"** гәзитенә **384 һум 36 тингә**, 50673 индекслыһына (предприятие һәм ойошмалар өсөн) **414 һум 36 тингә** яҙылырға була.

● Сентябрҙә гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәреүсе тәүге **2 уҡыусыбыҙ - "Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәре"**, **2 уҡыусыбыҙ -"400 башҡорт халыҡ йыры"**, **10 уҡыусыбыҙ - Ноғман Мусиндың "Алдар батыр"**, **10 уҡыусыбыҙ - Рауфан Мортазиндың "Космоэнергетика һәм сәләмәтлек"**, **10 уҡыусыбыҙ** 2014 йылға **"Башҡортса дини календарь"** китаптарына лайыҡ буласаҡ.

● **"Киске Өфө" - бүләгем"** акцияһы ла дауам итә. Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, атай-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.

● Ә кемдәрҙе бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә **тыуған көндәрен** хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

**Өфөлә йәшәүселәр өсөн гәзитебеҙгә яҙылыуҙың тағы шундай юлдары бар:** йәшәгән йортоғоҙ эргәһендәге **"Өфө-матбуғат"** киоскыһында 6 айға **330 һумға** яҙыла алаһығыҙ - почта йәшниге юҡ, тип һылтанырға ла кәрәкмәй, аҙнаһына бер тапҡыр шәмбе көндө ошо киоскынан ғына сығаһығыҙ ҙа алаһығыҙ.

● Коллективығыҙ менән яҙылһағыҙ (кәмендә 10 дана), редакция гәзитте эшләгән урынығыҙға үҙе килтереп бирә - шулай уҡ уңайлы ла, арзанға ла тура килә: ярты йылға - **246 һум.**

● Яҡын йәшәгәндәр редакциябыҙҙа яҙылып, гәзитте аҙна һайын үҙе килеп алып йөрөй ала: ярты йылға - **246 һум.**

● **Иҫкәртеү.** Почталарҙа, киоскыларҙа гәзиткә яҙҙырыуҙан баш тарталар икән, йә яҙҙырған булып та, өйҙәрегеҙгә гәзитте алып килмәйҙәр икән, зинһар, редакцияға шылтыратып хәбәр итегеҙ.

● Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**. Беҙҙең электрон почта: i**nfo@kiskeufa.ru.** Беҙҙең блог: **blog. kiskeufa.ru.**

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостанда иҡтисади үҫеш темптары кәмене, был бюджеттың килем өлөшөнә кире йоғонто яһаны. Бындай шарттарҙа республикаға тәрәндән уйланған бюджет сәйәсәте кәрәк, ә министрлыҡ һәм ведомстволар эшмәкәрлегенең төп критерийы бюджет ресурстары менән идара итеү һөҙөмтәлелеге булырға тейеш. Был хаҡта БР Хөкүмәте ултырышында Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов әйтте. Ултырыш 2013 йылдың тәүге ярты йыллығында төбәкте социаль-иҡтисади йәһәттән үҫтереү һөҙөмтәләренә, алдағы өс йылға күҙаллауҙарға һәм республикалағы бюджет һәм һалым сәйәсәтенең төп йүнәлештәренә арналды.

✓Башҡортостанда "Йөрәктән - йөрәккә" хәйриә марафоны үтә. Марафон танылған кардиохирург Лео Бокерия башланғысы менән үткәрелгән "Бала йөрәгенә ҡағыл" бөтә Рәсәй акцияһының дауамы булып тора. 2013 йылдың 1 августына тыумыштан йөрәк ауырыуына дусар балаларға маҡсатлы адреслы ярҙам күрһәтеү хәйриә программаһы буйынса республиканың төрлө райондарынан 86 пациентҡа юғары квалификациялы медицина ярҙамы күрһәтелгән. Программаны тормошҡа ашырыуға 18 миллион һумдан ашыу аҡса йүнәлтелгән.

✓Башҡортостандың 2013 йылда бөтә Рәсәй табиптар конкурсында еңеү яулаған иң яҡшы медицина хеҙмәткәрҙәре Красногорск ҡалаһында үткән форумда тәбрикләнде. Премиялар менән 13-сө ҡала клиник дауаханаһы табибы Вера Комкова, Стәрлетамаҡтағы 1-се поликлиниканың участка терапевы Гөлнара Вәлиева, Өфө ашығыс медицина ярҙамы дауаханаһының урология бүлеге мөдире Рифҡәт Сәхипов билдәләнде.

✓Республикала тыуымдың кәмеүе хәүеф тыуҙыра: ағымдағы йылдың тәүге ярты йыллығында яңы тыуған сабыйҙар һаны 200 кешегә кәмегән. Үткән йыл менән сағыштырғанда, үлем осраҡтары 700-гә тиерлек артҡан. Ярты йыл эсендә республикала 28 125 кеше тыуған - 2012 йылдың ошо уҡ осоро менән сағыштырғанда был 0,6 процентҡа кәмерәк. Үлем осраҡтары ғинуар-июнь айҙарында 2,2 процентҡа артҡан. Башҡортостанда тыуым кимәле үлемдән 3,2 процентҡа юғарыраҡ (2012 йылдың ғинуар-июнь айҙарында 6,1 процентҡа юғарыраҡ булған).

МИЛЛИ ИДЕЯҒА ТОРОШ

# ЕРЕҢ ҺАТҺАҢ, АУЫЛЫҢА ҺАТ...

## бер ситенә үҙең барып ултырырһың

**Әйтемдә ни өсөн ереңде фәҡәт ауылдашыңа һатыу зарурлығы хаҡында әйтелә һуң? Әйтәйек, ниңә мин еремде йә йортомдо яҡын туғаныма, дуҫыма, яҡшы танышыма һата алмайым? Был һорауҙарға яуапты үткәндәрҙәге бер нисә ваҡиға юҫығында әҙләп ҡарайыҡ. Миҫалға өс тарихи ваҡиғаны килтерәйек.**



Тәүге миҫал үҙебеҙҙең ауылда булған ваҡиғаға бәйле. Ваҡиға Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Ноғман Мусиндың "Һайлап алған яҙмыш" романы менән ауаздаш. Беҙҙең ауылдан Билал Азаматов атлы олатай 1914 йылғы Беренсе бөтә донъя һуғышында йөрөгәндә ата-әсәһе, туғандары һәләк булған Зоя исемле етем поляк ҡыҙын осрата. Ҡыҙҙы йәлләп, ул үҙенең наҡыҫ һалдат паегы менән бүлешә, уны ағайҙарса ҡурсалай, яҡты йөҙөн күрһәтә. Ҡыҙ олатай йөҙөндә үҙенең яҡлаусыһын күреп, уның артынан ҡалмай эйәреп йөрөй башлай. Аҙаҡтан поляк ҡыҙы, һалдаттан һис тә айырылырға теләмәйенсә, беҙҙең ауылға эйәреп ҡайта. Ҡайтып төшөү менән йәш егет ҡыҙға өйләнергә теләүен белдерә. Ауыл аҡһаҡалдары Билал олатай алдына шундай шарт ҡуя:

1.Буласаҡ килен фәҡәт беҙҙең телде өйрәнеп, динебеҙҙе ҡабул иткәндән һуң ғына беҙҙең ауыл ҡапҡаһын асып инә һәм беҙҙең ауыл кешеһенә кейәүгә сыға ала.

2.Ошо шарттарҙы үтәргә әҙер булғанға тиклем ҡыҙ башҡа урында йәшәп торорға тейеш.

Тап шулай була ла. Зөләйха-Зоя телебеҙҙе ҡабул иткәнгә, яулыҡ ябынғанға тиклем бер нисә доға өйрәнеп, күрше Ямаш-Беренсе Эткол ауылында йәшәй. Уның Билалдан тыуған ҡыҙы Мөслимә инәй ауылыбыҙҙың Зөлҡәрнәй Буранбаев тигән кешеһенә кейәүгә сыға. Беҙ бала саҡта Мөслимә инәй бешкән ҡымыҙҙы яратып эстек. Зөләйха-Зояның бүләрбүләсәрҙәре хәҙерге ваҡытта беҙҙең ауылда һәм районыбыҙҙың һәм республикабыҙҙың төрлө төбәктәрендә йәшәй.

Ошоға оҡшаш икенсе ваҡиға Көйөргәҙе районының Таймаҫ ауылында була. Ошо ауылдың егете Вәхит Айытбаев 1962 йылда әрме сафынан Нина исемле мәрйә кәләш эйәртеп ҡайта. Килен аш-һыуға бик оҫта, тырыш, уңған ҡыҙ була. Егеттең әрменән имен-һау әйләнеп ҡайтыуы уңайынан ҡорбан салына, ауылдың аҡһаҡалдары мәжлескә йыйыла. Нина ашнаҡсы ҡатын-ҡыҙҙар ыңғайына ҡунаҡтарҙың алдына аш-һыу килтереп, үгерп йөрөй икән. Мәжлес тамам булып, доғалар уҡылғас, ауыл муллаһы Нинаны үҙенең янына саҡырып ала ла, уға 25 һумлыҡ аҡса бирә. Ҡалған аҡһаҡалдар ҙа һәр ҡайһыһы хәленсә ҡыҙҙың усына аҡса һала, шунан мулла ҡыҙға үҙенең тыуған яғына ҡайтып китергә ҡуша. Нисек кенә ҡыйын булмаһын, Нинаға был ауылды ташлап, тыуған яғына ҡайтып китергә тура килә. Вәхит тә уның артынан эйәрә һәм улар ғүмере буйына Нинаның тыуған яғында йәшәй.

Өсөнсө ваҡиға хаҡында Аҡъярҙа йәшәүсе билдәле крайҙы өйрәнеүсе Рәшит ағай Насыров һөйләгәйне. Уның ауылдашы Баһауетдин атлы ир-уҙаман рус-япон һуғышында ҙур батырлыҡтар күрһәтеп, ике "Георгий тәреһе" миҙалы менән бүләкләнә. Һуғыштан ҡайтып килгәнендә уны Ырымбур губернаторы поездан төшөрөп алып ҡалып, ҡунаҡ итә. Аҙаҡ губернатор батырҙы көймәгә ат мисәп ектереп, ике һыбай биреп, тыуған ауылына тиклем оҙаттыра. Баһауетдиндың батыр булып килеүе хаҡындағы хәбәр тыуған ауылына алдан уҡ килеп етә. Ауыл ҡарттары уның ҡайтып еткәнен көтөп, мәсет янында ултыра икән. Баһауетдин ауылдаштары менән күрешеп сыҡҡан да: "Ағай-эне, йәмәғәт, әгәр ҙә имен-һау әйләнеп ҡайтһам, иң тәүҙә мәсеткә инеп, әруахтар рухына аят уҡытырмын, саҙаҡа өләшермен, тигән әйтеүем бар ине. Шуны үтәргә рөхсәт итегеҙ?" - тип рөхсәт һораған. Ауыл ҡарттары унан түшендәге тәреләрен ергә һалырға, тик шунан һуң ғына мәсеткә үтергә рөхсәт итәсәктәре хаҡында белдергән. Баһауетдин, әлбиттә, аҡһаҡалдарҙың теләгенә ҡаршы килә алмаған.

Юғарыла килтерелгән өс ваҡиғанан беҙ шуны күрәбеҙ: башҡорт йәмғәтселеге элек-электән ситтәр йоғонтоһонан үҙен яҡларлыҡ һәм һаҡларлыҡ хәлдә булған. Элек-электән башҡорт йәмғәтселеге үҙен һаҡлар, яҡлар өсөн бер ниндәй ҙә дәүләт механизмына, закон ҡурсалауына таянмаған. Атай-олатайҙарыбыҙ дини мәнфәғәт менән милли мәнфәғәтте бергә уҡмаштыра һәм шуның нигеҙендә үҙҙәрен яҡлай алған. Күрәһең, беҙҙә хәҙер ана шундай берҙәмлек ҡаҡшаған һәм шуның өсөн дә ауылдарыбыҙҙың ҡапҡаһы милләттәштәребеҙҙән күнеле кеүек шарран асыҡ. Башҡорт ауылы, улай ғына ла түгел, Рәсәй ауылдары (Кавказ ауылдарын иҫәпкә алмағанда, әлбиттә) хәҙерге ваҡытта әйберә бушлай өләшелгән йә арзан ғына хаҡҡа һатылған "коммунизм магазины"н хәтерләтә. Ул магазинға инеп, арзан ғына хаҡҡа үҙеңә һәм тотош әҡрәбәңә йорт, ер, сабынлыҡ, көтөүлек, ғөмүмән, быуаттар буйы йәшәрлек йорт-ер һатып алырға була. Хәйер, ауылдарыбыҙ ғына түгел, ҡалаларыбыҙ, хатта илебеҙ шундай хәлдә бит.

"Ереӊ һатһаң, ауылыңа һат: бер ситенә үҙең барып ултырырһың..." Юғарыла килтерелгән миҫалдарҙан, уларға бәйле дәлилдәрҙән нәҡ шул аңлашыла ла инде: фәҡәт бары тик һинең менән бер мөхиттә, бер йәмғәтселек ҡоронда, бер үк төрлө йола-традициялар үтәп йәшәүсе ауылдашың, күршең генә һинең ошо ерлеккә бәйле проблемаларыңды аңлай һәм һиңә ярҙам итә ала. Был йәһәттән ситтә йәшәүсе туғаның, дуҫың, танышың, ғөмүмән, ситтәге кеше ул барыбер ҙә ят кеше. Шуның өсөн дә йортоңдо, ереңде фәҡәт һинең менән бер ләғәт-йола-традиция солғанышында йәшәгән ауылдашыңа, күршеңә һатыу башҡа ауылдаштарыңа зыян килтермәслек шарт булып һаналалыр ҙа инде.

Юҡҡа ғына йырҙарҙа: "Сит ерҙәрҙә күп йөрөһәң, үҙ туғаның ят була..." - тип йырланмайҙыр. Ғәҙәттә, Таймаҫ ауылы егете Вәхит Айытбаев һымаҡ ситтә йәшәгән туғаныңдың тормош юлдашы ла сит ҡандан, балалары ла сит милләттеке, йола-традициялары ла үҙгәргән булыусан. Был йәһәттән донъя ауырлығын бер ҡатар тартҡан ауылдашың, күршең барыбер һиңә яҡыныраҡ.

**...Теге саҡта ауылыбыҙға мәхрүм булған туғаныбыҙҙың йортон һатып алырға теләүселәрҙе кире бороп ҡайтарып ебәргәндән һуң Өфөгә юлландым. Баш ҡалаға килгәс тә, телефон аша шылтыратыуҙар дауам итте. Ниәттәре килеп сыҡмаған диндарҙар беҙҙең туғандар аша шылтыраттырырға, йортто хәҙер инде туғандарыбыҙға һаттырырға күндерергә тотондо. Уларҙың тактикаһы бер аҙ үҙгәрә төшкәйне, йәғни беҙ йортто туғаныбыҙға һатабыҙ ҙа, улар шундуҡ уны тегеләргә 5-6 мең өҫтәп һатып ебәрә. Хәҙерге эшһеҙлек ваҡытында ауыл кешеһе өсөн был аҡса эстәрен тишмәй. "Ереӊ һатһаң, ауылыңа һат: бер ситенә үҙең барып ултырырһың..." тигән мәҡәлде уйлап сығарыусы, тимәк, туғанлыҡ, ҡан туғанлыҡ аша ауылдарыбыҙҙы яуларға теләүселәргә лә ҡаршы торорға өндәй.**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

**(Аҙағы. Башы 33-34-се һандарҙа.)**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓2 сентябрҙә 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы музейы мәктәп уҡыусылары һәм мәктәпкә тиклемге йәштәге балалар өсөн "Музейға илткән юл" акцияһын үткәрә. Был көндө балалар бушлай музей экспозициялары менән таныша аласаҡ. Шулай уҡ бында оригами сәнғәте буйынса оҫталыҡ дәрестәре ойоштороласаҡ. Музей адресы: Өфө ҡалаһы, Левитан урамы, 27. Белешмә өсөн телефондар: (347) 227-47-57, 227-52-02.

✓Истанбулда Төрки телле илдәр һәм төбәктәр медиа-платформаһының Координация советы ултырышы үтте. Унда Төркиә, Әзербайжан, Ҡырғыҙстан, Молдова составындағы Гагауз Автономиялы Республикаһы, Украина составындағы Ҡырым Автономиялы Республикаһы һәм башҡа төбәктәрҙән киң мәғлүмәт саралары һәм хөкүмәт ҡарамағында булмаған ойошмалар вәкилдәре ҡатнашты. Рәсәй исеменән Ҡарасәй-Черкес һәм Башҡортостан журналистары, шул иҫәптән "Башинформ" мәғлүмәт агентлығының баш мөхәррире урынбаҫары Алик Шакиров сығыш яһаны.

✓ Башҡортостанда 430 меңдән ашыу бала мәктәпкә уҡырға барасаҡ, уларҙың 44 меңе - беренсе класс уҡыусылары. 2013 йылда Белем көнө йәкшәмбегә тура килә, шуға күрә байрам дүшәмбе, 2 сентябргә күсерелә. БР Мәғариф министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, байрам тантаналы линейканан башланып, РФ Конституцияһының 20 йыллығына арналған асыҡ дәрес менән тамамланасаҡ. Ведомство мәғлүмәттәре буйынса, бөгөнгә көндә республикала 1587 мәктәп һәм 812 филиал эшләй. Барлыҡ белем биреү учреждениелары уҡыу йылына әҙер һәм 1 сентябрҙә штат режимында эшләй башлаясаҡ.

✓БР Ауыл хужалығы министрлығы мәғлүмәттәре буйынса, иген, ҡуҙаҡлы иген һәм көнбағыштан тыш, май культуралары 908 мең гектар майҙанда сабылған (планға ҡарата был 51 процент тәшкил итә), 891 мең гектарҙа һуғып алынған (50 процент). Бөгөнгә көнгә республикала 1,372 миллион тонна иген һуғып алынған. Иген һәм ҡуҙаҡлы иген культураларының уңышы гектарынан уртаса 15,4 центнер тәшкил итә. Саҡмағош районы аграрийҙары гектарынан - 25 центнер, Мәләүез игенселәре - 23,6 центнер, Стәрлетамаҡ районы хеҙмәтсәндәре 22,4 центнер йыйып ала.

**"Башинформ"дан**

✓ Йортҡа заманса, юғары технологиялы электромагнитлы эҫе һыу ҡулланыуҙы һанаусы ҡоролма ҡуйыла. Ул һыуҙың күпмегә йылытылып еткерелмәүен асыҡлай, иң мөһиме - йылы һыу ҡулланыуҙы аныҡ иҫәпләй.



ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

# ҺӘР КЕМ ҮҘЕ ХӘЛ ИТӘ

**Мотлаҡ пенсия страховкаһы системаһында теркәлгән 1967 йылғы һәм унан кесерәк граждандарҙың 2013 йыл аҙағына тиклем хеҙмәт пенсияһының тупланма өлөшөнә страховка иғәнәһе тарифын һайлау мөмкинлеге бар: бөгөнгөсә 6 процент итеп ҡалдырырғамы, әллә пенсияның страховка иғәнәһен формалаштырыу тарифын 10 проценттан 14-кә тиклем арттырып, 2 процентҡа кәметергәме?**

Хеҙмәт пенсияһының страховка өлөшө, инфляция кимәле иҫәпкә алынып, дәүләт тарафынан ышаныслы индексациялана. Тупланма өлөш уның хужаһы теләге буйынса дәүләттеке булмаған пенсия фонды идаралығына йәки идарасы компанияға тапшырыла һәм финанс баҙарында инвестициялана. Тупланма өлөш дәүләт тарафынан индексацияланмай, уның килеме инвестициялау һөҙөмтәләренә бәйле. Үҙҙәренең пенсия тупланмалары менән идара итеү буйынса бер ҡасан бер ниндәй ҡарарға килмәгән "өндәшмәҫ" граждандар өсөн уларҙың һүҙһеҙ ризалыҡтары менән 2014 йылдан пенсия тупланмалары эш хаҡтарының 2 проценты күләмендә гәмәлгә ашырыла башлаясаҡ һәм, шулай итеп, пенсияларының сраховка өлөшөнә уларҙың иғәнә тарифы 14 процент тәшкил итәсәк. Тупланма өлөшкә аҡса күсереүҙе 6 процентҡа тиклем еткереү өсөн Пенсия фондына тейешле ғариза менән мөрәжәғәт итергә кәрәк.

Үҙҙәренең пенсия тупланмаларын бынан алдараҡ идарасы компанияларға йәки дәүләттеке булмаған пенсия фондына күсерергәндәр өсөн пенсия тупланмаһы ғаризаһыҙ ҙа эш хаҡының 6 проценты күләмендә гәмәлгә ашырыласаҡ. Был тарифты тупланма өлөшкә - 2 һәм страховка өлөшкә 14 процент итеп үҙгәртеү шулай уҡ йыл аҙағына тиклем Пенсия фондына тейешле ғариза биреү юлы менән хәл ителә. Рәсәй Пенсия фондының Башҡортостан бүлексәһе идарасыһы Фоат Хантимеров һүҙҙәренә ҡарағанда, пенсияһының тупланма өлөшөн булдырыуға страховка иғәнәләре тарифының күләме ниндәй булырын һәр кем үҙе хәл итә. Республиканың 1500 кешеһе был йәһәттән ниндәйҙер ҡарарға килде һәм тейешле ғариза менән республика Пенсия фонды идаралығына мөрәжәғәт итте. Яҙма ғаризалар 2013 йылдың 31 декабренә тиклем ҡабул ителә.

**Рәсәй Пенсия фонды Башҡортостан буйынса бүлексәһенең матбуғат хеҙмәте.**

...ҒӘҘЕТТӘРЕ КҮРКӘМ

# ФЕКЕРЕҢ МЕНӘН БҮЛЕШ!

**Баш ҡалала UrbanБайрам I Ҡала төҙөлөшө форумы сиктәрендә эш сессияһы уҙҙы. Ул Ҡала үҫеше стратегияһын эшләүҙең әҙерлек этабы булып торҙо.**

Сараның беренсе этабы август башында үтһә, икенсе этабы уҙған аҙнала тамамланды. Унда Рәсәй генә түгел, сит ил экспертттары ла ҡатнашты. Сессия сиктәрендә "Стратегия һәм генплан. Тоташыу нөктәһе", "Һаҡларға ярамай емерергә. Өҫтөнлөктәр ҡуйып", "Өфө өсөн заманса торлаҡ стандарты. Уңыш өлөшө" кеүек көнүҙәк темалар буйынса түңәрәк ҡорҙар ойошторолдо.

Бөгөн баш ҡалала 2006 йылда раҫланған генплан нигеҙендә эш алып барыла, әммә заман башҡа - заң башҡа, тигәндәй, иҫкергән алымдар буйынса уны бөгөн тулы ҡеүәтенә тормошҡа ашырыу мөмкин түгел. Ойошмаған, үҙаллы төҙөлөштәр һөҙөмтәһендә ҡалаға үҙенсәлеген юғалтыу хәүефе янай һәм тиҙ арала быңдай хәлторошто үҙгәртергә кәрәк. Шуның өсөн дә муниципалитет, бизнес, сит ил һәм Рәсәй белгестәре, ҡала халҡы менән Башҡортостандың баш ҡалаһында тормошто нисек ҡуҙаллауыбыҙ, Өфөнө территориаль планлаштырыу өсөн кәрәкле формат тураһында һөйләшеү башлау UrbanБайрам форумының төп маҡсаты булып торҙо.

# ТЫН АЛЫШЫ ТИГЕҘ

**Граждандар йәмғиәтен үҫтереү фонды экспертары "Йәмәғәт фекере" фонды ярҙамында һәм уның мәғлүмәттәре нигеҙендә Рәсәй төбәктәренең социаль хәле буйынса рейтинг төҙөнө.**

Исемлектә 79 төбәк һәм федераль әһәмиәттәге ҡала бар. Улар араһында белгестәр рейтингтары юғары булған 15 төбәкте һәм рейтингтары уртасанан түбән булған 8 төбәкте билдәләгән. 74 мәрәй йыйып, Башҡортостан Бүрәт Республикаһы менән абруйлы дүртенсе урынды бүлешә. Беренсе урында 95 мәрәй менән Ямал-Ненец автономиялы округы тора. Был исемлектә Мәскәү 10-сы урынды, ә Санкт-Петербург 24-се урынды биләй.

Төбәктәрҙе төркөмдәргә бүлеү өсөн база һәм ярҙамсы критерийҙар итеп халыҡтың бирелгән һорауҙарға яуабы алынған. Мәҫәлән, респонденттар төбәктәге хәл-торош менән ҡәнәғәт булыу-булмауын белдергән, үҙҙәренең матди хәлен баһалаған.

# ТАМСЫНАН КҮЛ ЙЫЙЫЛА

**Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов баш ҡаланың күп фатирлы йорттарының береһендә энергияны һаҡлау системаһының эше менән танышты.**

Система һауа торошо үҙгәреүенә ҡарап автоматик рәүештә фатирҙарға йылы биреүҙе көйләй. Был милексәләрҙең тормошон уңайлыраҡ итә һәм ресурстарҙы ғына түгел, ә халыҡтың аҡсаһын да экономияларға мөмкинлек бирә. Мәҫәлән, йылытыу миҙгеленең 7 айында 35 фатирлы йортта йәшәүселәр йылылыҡ өсөн түләүгә генә 38618 һум экономиялаған. Шул уҡ ваҡытта ҡоролма үҙ мөмкинлектәренең яртыһын ғына файҙаланған.

Шулай уҡ йортҡа заманса, юғары технологиялы электромагнитлы эҫе һыу ҡулланыуҙы һанаусы ҡоролма ҡуйыла. Ул ресурс менән тәьмин итеү ойошмаларының һыуҙы күпмегә йылытып еткермәүен асыҡлай, иң мөһиме - йылы һыу ҡулланыуҙы аныҡ иҫәпләй. Һөҙөмтәлә халыҡтың аҡсаһы экономиялана, ә ресурс менән тәьмин итеүсе ойошмалар үҙ бурысына яуаплыраҡ ҡарай башлай. 11 айҙа быңдай прибор милексәләрҙең 68 418 һум аҡсаһын экономиялай.

Модернизация шулай уҡ дөйөм йорт ихтыяжына сығымдарҙы экономиялауға ла ҡағыла. Быға йорттарҙа бәләкәй форматлы ҡабатлап һанаусы электр счетчиктары ҡуйыу сәбәпсе. Улар һәр фатир, унда күпме кеше йәшәүенә ҡарамайынса, күпме ресурс ҡулланғанын 100 процентҡаса асыҡлай. Әлегә һынау үтеүсе ҡоромалдар һынау осорон уңышлы йырып сыҡһа, тиҙҙән "күрше өсөн" түләүгә сик ҡуйыласаҡ.

# ҺИНДТАР КИЛДЕ...

**Һиндостандың иң эре TATA Motors автоетештереүсеһе "Башҡортостан троллейбус заводы" асыҡ акционерҙар йәмғиәте базаһында автобустар эшләп сығарыу мөмкинлеген өйрәнә.**

Был автоконцерн ТАТА маркаһы аҫтында автомобилдәрҙең киң спектрын сығарыуы менән билдәле. Ул шулай уҡ Jaguar һәм Land Rover маркалары менән дә дан алған. Бынан тыш, концерн йөк машиналары, төрлө двигателле автобустар ҙа эшләй.

ТАТА Motors кеүек эре компанияларҙың Башҡортостандың баш ҡалаһында үҙ бизнесын киңәйтергә теләүе республиканың һәм Өфөнөң инвестицион ылыҡтырыу һәләтен раҫлай.

# ЙӘШЕЛЛЕК ЗОНАҺЫ

**Һәр кемдең ял итеү өсөн яратҡан урыны булһа, баш ҡала халҡының күпселеге "Кашҡаҙан" мәҙәниәт һәм ял паркын үҙ итә. Сөнки бында даими рәүештә ниндәйҙер үҙгәрештәр булып тора.**

Әлеге ваҡытта бында йәйәүләләр өсөн юлдар төҙөкләндерелә. Ә инде велосипед юлы күл тирәләй урап сыға һәм был ошо спорт төрө менән шөғөлләнеүселәр өсөн дә, ялдың бер формаһы итеп велосипедта йөрөүҙе һайлаусылар өсөн дә бик уңайлы.

Шулай уҡ паркта Wi-Fi зонаһы ла бар. Теләүселәр унда интернет селтәренә сығыу мөмкинлегенә эйә. Яҡын киләсәктә бында күпләп ағастар ултыртыласаҡ, эскәмйәләр һаны арттырыласаҡ. Ул ваҡытта инде йәйге эҫе ҡояш ҡыҙҙарғанда ял итеүселәр ағас күләгәһендәге эскәмйәлә ултырып ҡына, йәки күләгәле аллеяларҙа тирә-яҡтың гүзәллеге менән хозурланасаҡ.

# ЙӘРМИНКӘГӘ КИЛ!

**Ошо ял көндәрендә баш ҡаланың барлыҡ райондарында ла бал һәм көҙгө йәрминкәләр башлана. Быңдай йәрминкәләр баш ҡалала инде 20 йылдан ашыу уҙғарыла.**

Уларҙың төп бурысы - Өфөнө етештереүсенән килгән сифатлы продукция менән тәьмин итеү, йәшелсә-емешкә, картуфҡа, иткә хаҡтарҙы арттырмау, республика етештереүсеһенә продукцияһын һатыуға ярҙамлашыу. Сөнки йәрминкәләрҙә ауыл етештереүсеһенә урындар бушлай бүленә. Урынға түләү булмағас, хаҡтар ҙа баҙарҙағыға ҡарағанда 10-15 процентҡа түбәнерәк. Йәрминкәләр ошо майҙандарҙа үтә:

**Дим районы:** Хәҡиҡәт урамы буйынса Таллинн урамынан Муса Йәлил урамына тиклем.

**Калинин районы:** "УМПО Мәҙәниәт һарайы" алдындағы майҙанда - "Бал йәрминкәһе"; "Ауыл хужалығы йәрминкәһе" сауҙа-сервис комплексы алдындағы майҙан (Интернационал урамы, 139); "Меркурий" яуаплылығы сикләнгән ширҡәттең "Юлдаш" сауҙа-йәрминкә комплексы (Ҡарағайлыҡ урамы, 14, 3-сө корпус); "Шаҡша" сауҙа комплексы эргәһендәге майҙан (Гвардия һәм Йәшел урамдары киҫелеше); Баландин бульвары менән Мушников урамы киҫелешендәге майҙан.

**Киров районы:** элекке "Аврора" кинотеатры алдындағы майҙан (Әшсе хәбәрсеәр урамы, 5, 7, 20).

**Ленин районы:** 31 августа - "Пушкин" сауҙа-сервис комплексы алдындағы майҙан (Пушкин урамы, 35/1);

**Орджоникидзе районы:** Серго Орджоникидзе исемендәге майҙан (Беренсе Май урамы, 14); "Меркурий" сауҙа үҙәге алдындағы майҙан (Ҡулса урамы, 65); "Урал" сауҙа-сервис комплексының автопарковка майҙаны (Рәсәй урамы, 23); "Тирәктәр" сауҙа йорто эргәһендәге майҙан (Коммунарҙар урамы, 59).

**Октябрь районы:** Спорт һарайы алдындағы майҙан ( Рихард Зорге урамы, 41).

**Совет районы:** Йәштәр һарайы алдындағы майҙанда "Бал йәрминкәһе" (Октябрҙең 50 йыллығы исемендәге урам, 21).

# Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Республиканың Әбйәлил һәм Белорет райондарында ташҡындан зыян күргән 3,6 мең кешенең һәр береһе 15 мең һум күләмендә матди ярҙам аласаҡ, тине Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, ҡойма ямғырҙар арҡаһында 8-10 августа республиканың Әбйәлил һәм Белорет районында ғәҙәттән тыш хәл килеп тыуҙы. БР Президенты территорияны ҡараған саҡта, юғалтыуҙар ҡапланасаҡ, тип урындағы халыҡты ышандырҙы. Республика Хөкүмәте бойороғона ярашлы, торлаҡ фонды һәм социаль объекттар 15 октябргә тиклем тергеҙелергә тейеш.

✓13-14 сентябрҙә Октябрьский ҡалаһында үтәсәк республика Ҡурай байрамында ҡатнашыуға ғаризалар ҡабул итеү дауам итә. Сара сиктәрендә ҡурайсылар һәм ҡурайсылар ансамблдәре бәйгеһе үтәсәк. Конкурсҡа ҡатнашыусылар үҙҙәре башҡарған көйҙөң тарихын мотлаҡ белергә тейеш. Сығыштарға танылған ҡурайсылар, сәнғәт оҫталары, ғалим-фольклорсылар, халыҡ ижады белгестәре, үткән конкурстарҙа Гран-при яулаусылар баһа бирәсәк. Программала шулай уҡ ансамбль етәкселәре өсөн ижади лаборатория үткәреү ҡаралған. Бәйгелә ҡатнашыу өсөн ғаризаларҙа 8 сентябргә тиклем 450103, Өфө ҡалаһы, Зәйнәб Биишева урамы, 17/2 адресы буйынса Республика халыҡ ижады үҙәгенә ебәрергә кәрәк. Телефон/факс: 8 (347) 289-62-00.

✓БР Мәғарифты үҫтереү институты уҡытыусыларҙың төбәк-ара интернет-кәңәшмәһендә ҡатнашыуға саҡыра. Сара 23 сентябрҙән 7 октябргә тиклем үтәсәк. Сираттағы виртуаль форумдың темаһы - "Педагогик традициялар һәм инновацион белем биреү мөхите - мәғариф системаһын камиллаштырыу нигеҙе".Интернет кәңәшмәлә ҡатнашыу өсөн БР Мәғарифты үҫтереү институты сайтында теркәлергә кәрәк. Докладтарҙы pedsovet.irorb@mail.ru адресына ебәрергә була.

✓Халыҡ-ара статус йөрөткән, Өфөлә йыл да үтә торған "Ҡала мөхите" ("Городская среда") социаль реклама фестиваленең 2014 йыл баһалама комиссияһы ойошторола башланы. Был юлы комиссияға Ҡытайҙан Ян Кэ һәм Ҡаҙағстандан Рубен Казарян исемле ике абруйлы сит ил эксперты инәсәк һәм фестивалдә ҡатнашасаҡ эштәрҙе баһалаясаҡ.

*ҮӘТ, ШУЛАЙ!*

**Хәҙерге эстрадала, "осрашырға, күрешергә, ер аҫтынан юлдар юҡ", тип, образлы йырлаһалар ҙа, тура мәғәнәһендә юлдар ер өҫтөнән генә түгел, ер аҫтынан да үтә. Августың һуңғы декадаһында баш ҡалала "Үҫмерҙәр китапханаһы" туҡталышында йәйәүлеләргә ер аҫтынан үтеү юлы файҙаланыуға тапшырылды. Төҙөлөш эштәре сентябрҙә тамамланырға тейеш булһа ла, подряд ойошмаһы уны планлаштырылғандан бер айға алдараҡ тамамланы.**
**Төҙөлөштөң майҙаны 529 квадрат метр тәшкил итә, тоннелдең оҙонлоғо - 49, киңлеге 6 метр. Ҡала халҡына ғына түгел, транспортсыларға ла бындай уңайлыҡ тыуҙырыу бюджетҡа 40 миллион һумға төшкән.**

# ЕР АҪТЫНАН...

## юлдар бар!



"Үҫмерҙәр китапханаһы" туҡталышы районындағы ер аҫты сығыу юлы мөһим әһәмиәткә эйә. Быға тиклем был юл участкаһы баш ҡалала иң хәүефлеләрҙән һанала ине. Бында йыш ҡына йәйәүлеләр йә үҙ ғәйептәре, йә автомобиль йөрөтөүселәрҙең ғәйебе менән юл-транспорт һәләкәтенә эләкте. Үкенескә күрә, ҡайһы бер осраҡтарҙа ғүмерҙәр ҙә өҙөлдө. Хәҙер иһә юлды нисек аша сығырға тип баш ватаһы түгел - хәүефһеҙ ер аҫты юлында хатта балалы әсәләрҙең дә, коляскала хәрәкәт итеүсе инвалидтарҙың да мәнфәғәте күҙалланған. Шулай ҙа, пандус ГОСТ талаптарына яуап бирһә лә, балаларҙың йәйге коляскаһы менән уларҙан үтеү ҡыйынлыҡтар тыуҙырыуы мөмкин. Был иҫкәрмә урынында уҡ хәл ителде - төҙөүселәр платформаға тағы бер тимер балка ҡуйырға ҡарар итте.

2025 йылға тиклем баш ҡалала 35 ер аҫты һәм өҫтө юлдары төҙөү планлаштырыла. Юлдарҙы киңәйткәндән һуң, был ихтыяж үҙен ныҡ һиҙҙертте. Бындай объекттар Өфөлә өс тиҫтә йыл самаһы инде төҙөлгәне булмаған.

Әйткәндәй, "Дан бульвары" туҡталышы янында йәнә бер ер аҫты үткәүелен төҙөү тамамланып килә, уны сентябрҙә файҙаланыуға тапшырыу планлаштырыла.

*ИҒТИБАР!*

# ЯҢЫ СКВЕРҒА...

## исем ҡушайыҡ!



**Баш ҡаланы төҙөкләндереү һәм йәшелләндереү мәсьәләләренә һуңғы ваҡытта ҙур иғтибар бирелә. Был бигерәк тә граждандар көндәлек ығы-зығынан ял итһен өсөн булдырылған йәшел зоналарҙың, парктар һәм скверҙарҙың артыуында сағыла.**

Әлеге ваҡытта 8 Март һәм Октябрҙең 50 йыллығы исемендәге урамдар киҫелешендәге скверҙа төҙөкләндереү эштәре тамамлана. Тиҙҙән уны асыу тантанаһы буласаҡ. Оҙаҡ йылдар сквер шундағы һәйкәлгә бәйле, халыҡ араһында Октябрь революцияһы һәм Граждандар һуғышы батырҙары скверы, шулай уҡ яҡында ғына студенттар ҡаласығы урынлашҡанлыҡтан, "Йәштәр" скверы тип аталып йөрөтөлдө. Әммә был атамалар рәсми түгел. Скверға исем биреү идеяһы Өфө блогерҙары мөхитендә күтәрелде, унын буйынса етди фекер алышыуҙар барҙы һәм шундай варианттар тәҡдим ителде: Диагональ, Талиптар (Студенческий), Зөбәржәт (Изумрудный), Йәштәр (Молодежный), Революция көрәшселәре (Борцам революции), Беренсе осрашыуҙар (Первых свиданий) скверы.

Ошо уңайҙан Өфө ҡала округы хакимиәте үҙенең рәсми сайтында 2 сентябргә тиклем баш ҡала граждандарынан skver_ufa@mail.ru электрон почтаһына скверға исем биреү буйынса тәҡдимдәр көтә. Иң популяр варианттар һуңынан тауыш биреүгә сығарыласаҡ һәм иң күп тауыш йыйған атама еңеүсе буласаҡ.

*ҮӘТ, ШУЛАЙ!*

# БЕЛЕМ БАЙРАМЫ...

## 2 сентябрҙә үтә

**Быйыл баш ҡала уҡыусылары Тәүге ҡыңғырау байрамына ғәҙәттәгесә 1 сентябрҙә түгел, ә 2-һендә йыйыласаҡ. Был датаның йәкшәмбегә тап килеүе менән бәйле. Әммә ул, байрам тантаналары булмай, тигәнде аңлатмай, киреһенсә, байрамды көтөү процесын тағы ла бер көнгә һуҙып, уны серлерәк тә итә кеүек. Сөнки, нисек кенә тимәйек, кем өсөндөр каникулдарҙың бер көнгә оҙағыраҡ булыуы шатлыҡ килтерһә, быйыл беренсе тапҡыр мәктәп ишеген асып инәсәк 10600 сабый мөғжизәле белем донъяһына тиҙерәк инергә ашығалыр, моғайын. Ә белем усаҡтары уларҙы ҡаршы алырға тулыһынса тиерлек әҙер.**

Ҡала округы хакимиәтендә үткән сираттағы матбуғат конференцияһында хакимиәт башлығы урынбаҫары Сынтимер Баязитов ошо хаҡта һәм ҡала властарының иғтибары, тәү сиратта, юл-транспорт ваҡиғаларын булдырмауға, янғын хәүефһеҙлеген тәьмин итеүгә, матди-техник базаны нығытыуға, санитар-гигиена шарттарын, белем биреү процесы сифатын яҡшыртыуға йүнәлтелеүен белдерҙе.

Быйыл 107 белем биреү учреждениеһында, шул иҫәптән 32 мәктәптә, 67 балалар баҡсаһында, 8 өҫтәмә белем биреү учреждениеһында капиталь ремонт үткәрелгән. Яңы уҡыу йылы башланыуға улар тулыһынса әҙер буласаҡ, әммә ҡайһы бер мәктәптәрҙә йылытыу системаһына ремонт эштәре йылытыу миҙгеле башланғанға тиклем дауам итеүе ихтимал. Әммә йылытыу миҙгелен барлыҡ белем усаҡтары ла тулы әҙерлек менән ҡаршылаясаҡ. Мәғариф учреждениеларын яңы уҡыу йылына ҡабул итеү буйынса район хакимиәттәрендә махсус комиссиялар ойошторолған һәм улар 17 июлдән 30 августа тиклем урындарҙа булып, уларҙың әҙерлеген тикшерә, етешһеҙлектәр булһа, уларҙы бөтөрөү бурысын йөкмәтә.

Шулай уҡ мәғариф учреждениелары исемлегенең тулыланыуы ла көтөлә - Октябрь районында 190 урынлыҡ яңы балалар баҡсаһы үҙ ишектәрен асасаҡ. Ғөмүмән, республика адреслы инвестицион программа буйынса балалар баҡсалары төҙөлөшө һәм уларҙы реконструкциялау эшмәкәрлеге лә дауам итә.

"2011 - 2015 йылдарға сикләнмәгән мөхит (доступная среда)" федераль программаһын тормошҡа ашырыу сиктәрендә баш ҡалала Ленин районында - 10-сы, Орджоникидзе районында - 61-се, Совет районында 107-се дөйөм белем биреү мәктәптәрендә дүртенсе йыл физик мөмкинлектәре сикләнгән балалар ҙа үҙ тиҫтерҙәре менән бергә белем ала. Өфөлә тағы ла 14 мәктәптә шундай шарттар тыуҙырылған. Программа өс: федераль, республика һәм муниципаль бюджеттан финанслана. Ошо маҡсаттан быйылғы уҡыу йылына 6 миллион 600 мең һум аҡса бүленәсәк.

Әйткәндәй, 2013 йылда Башҡортостан Республикаһында дөйөм белем биреү системаһын модернизациялау буйынса саралар комплексын тормошҡа ашырыуға федераль бюджеттан 220 миллион һум самаһы аҡса бүленгән. Шуларҙың 10 миллионы - спорт инвентарҙары, 111 миллион самаһы мәктәп китапханалары фондын тулыландырыуға һәм уҡытыу-методик әҙәбиәт алыуға, 7 миллионы медицина кабинеттарын йыһазландырыуға йүнәлтелә. Шулай уҡ мәктәп ашханаларын заманса ҡорамалдар менән тәьмин итеү ҙә, педагогтарҙың белемен камиллаштырыу һәм квалификацияһын күтәреү эшмәкәрлеге лә ошо аҡса иҫәбенә финанслана.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, анығ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Атеросклероз

❖ **Энәлек, еҙгәй, энәте** (боярышник) артериаль ҡан баҫымын түбәнәйтә, яҡшы йоҡлата. Ул йөрәк мускулын тонуста тота, ҡан әйләнешен яҡшырта, тын ҡыҫылыуын, йөрәк һуғыуын, баш әйләнеүен бөтөрә. Энәлек препараттарын оҙайлы ҡулланыу аҙып киткән атеросклерозды ла яҡшы дауалай. Дауа өсөн уның сәскәләре, емештәре, япраҡтары ҡулланыла.

**Сәскәнән төнәтмә:** 1 ҡалаҡ сәскәне 1 стакан ҡайнар һыуҙа төнәтергә. 15 минут төнәтергә, эҫе көйөнсә көнөнә 3 тапҡыр ашар алдынан берәр стакан эсергә.

**Емештәренән төнәтмә:** 20 грамм киптерелгән йәки яңы өҙөлгән емештәргә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға. Ярты сәғәт төнәтергә йәки 5 минут утта ҡайнатырға. Ашар алдынан һәм төнгөлөккә берәр стаканлап эсергә.

**Тағы бер ысул:** 500 мл һыуға 1 стакан емеш, 2 ҡалаҡ шәкәр һалып, талғын утта 40 минут ҡайнатырға. Һыу яртылаш ҡалырға тейеш. Төнәтмәне һөҙмәйенсә һыуытҡыста һаҡларға, ашар алдынан 1-әр һәм төнгөлөккә 2-шәр ҡалаҡ ҡабул итергә.

Көҙөн энәлек емештәренән файҙалы дауа эшләп алырға була. Шәкәрҙе лимон кислотаһы менән (1 кг энәлеккә - 0,8 кг шәкәр һәм 20 г лимон кислотаһы) болғатып, иҙелгән емештәргә өҫтәргә. Быяла һауыттарға һалырға һәм һыуытҡыста һаҡларға. Әҙер иҙелмәне банкаларға тултырғас, өҫтөнә шәкәр һибергә, спиртта сылатылған ҡағыҙ һалырға һәм ҡапҡас менән ябырға. Ҡышын сәйгә ҡушып эсергә.

❖ **Шалфей** - атеросклерозды дауалауҙа шулай уҡ яҡшы сара. Әммә уны оҙайлы ваҡыт ҡулланырға ярамай, ул ашҡаҙандың лайлалы шекәрәһенә насар тәьҫир итә. 90 грамм быйыл йыйылған шалфейға 800 мл араҡы, 400 мл һыу ҡойоп, 40 көн ябыҡ быяла һауытта һаҡларға. 1 ҡалаҡ төнәтмәне һыуға ҡушып, иртән, ашар алдынан ҡабул итергә. Был дауа оло кешеләргә нервылар системаһын нығытыу өсөн ҡулланыла. Бер йыл һаҡлағандан һуң шалфей үҙенең файҙалы сифаттарын юғалта.

**Марат ИШМӨХӘМӘТОВ.**

**(Дауамы бар).**

БАҠЫЙ БЫУАТ ЙОЛАҺЫ

# БАШҠОРТТАРҘЫҢ... дауалау һәм ҡурсалау магияһы

## Ҡот саҡырыу

**Һаҡаллы бабайҙан ҡурҡыу.** "Минең улым өс айлыҡ сағында ҡото алынды, илай ҙа илай, туҡтамай, ҡалтырап тора. Әсәйем: "Улыңдың ҡото алынған, мулла бабайға бар", - тине. Ҡурғаш алып барҙым. Шул ҡурғашты ул мейестә иретте. Мөрйәләрҙе асты. Улым ята. Бер һауыттағы һыуға ҡурғашты ҡойҙо. Ҡойғанда ошо әпсенде лә әйтте:

*Кил, ҡотом, кил. ҡотом,*
*Күгәрсендәй гөрләп кил.*
*Ҡыр ҡаҙылай теҙелеп кил,*
*Аҡ йыландай һуҙылып кил.*

Ҡот оҙаҡ төшмәне. Шунан ул мөйөштәрҙән, тәҙрәләрҙән, мөрйәнән ҡысҡырып саҡыра башланы. Аҙаҡ ҡот һаҡаллы урыҫ бабайы булып төштө. Балам шунан ҡурҡҡан. Унан һуң ҡото алынғаны бөттө" (Урта Урал башҡорттарынан яҙып алынды).

**Ҡотто аҡҡа саҡырыу.** Ҡот төшмәһә, аҡ таҫтамал ябып, мөрйәне асып:

*Ҡотом, кил, ҡотом, кил.*
*Йылы бауырҙарымдан сыҡма инде.*
*Ҡотом, кил, ҡотом, кил.*
*Йылы бауырҙарыма,*
*Йылы эстәремә кер!* - тип саҡыралар.

2. Кеше кемдән, нәмәнән ҡурҡа, ҡурғаш шуға оҡшап төшә. Ҡот ҡойғанда ишекте лә, төндөктө лә, усаҡ ауыҙын да асалар, шунан саҡыралар. Ҡот ҡунһын, тип, муйынына ап-аҡ һөлгө һалалар:

*Кил ҡотом, һылыу ҡотом.*
*Ҡайҙан керҙең, шунан сыҡ,*
*Ишектән сыҡһаң, ишектән кер,*
*Баланың йөрәген ярһытма!*

Ҡотто һыуҙан алып, ҡурҡҡан кешенең күкрәгенә тағалар. Ауыртыныуы, ҡурҡыуы баҫылғас, алып ҡуялар.

**Мейестән саҡырыу.** 1. Ҡот төшмәһә, мейескә килеп, ауырыуҙың атаһының исемен әйтеп саҡырғандар.

2. Ишекте әҙ генә асып, ишектән өс мәртәбә мейес янына барып:

*Ишектән осһаң, ишектән ҡайт,*
*Мейестән осһаң, мейестән ҡайт!* - тип әйтергә кәрәк.

Ҡот саҡырғанда ауырыуҙы уртаға ултыртып ҡуялар. Ҡурғаш һибелмәһен өсөн одеял менән ҡаплағандар.

**Ҡот һыуы эсереү.** Ҡот осһа, ҡурғашты иретеп, баш өҫтөндәге һыуға һалалар. Ул шыжлап китә. Нәмәнән ҡурҡһа, ҡурғаштан шуның һыны яһала. Шул ҡурғаш төшкән һыуҙы ике мәртәбә: "Име-йомо шул булһын", - тип эсерәләр. Шунан ҡурғашты алып, тишеге булһа, еп менән бәйләп, тишеге булмаһа, тишеп, ауырыуҙың муйынына тағалар.

**Ҡурғашты сүплеккә ташлау.** Муйынға ҡурғашты таҡҡас, ул шунда йөрөй. Кеше уны ҡулы менән торға тейеш түгел. Кешенең ауырыуы бөткәс, икенсе кеше уны алып бәрергә, сүплеккә сығарып һалырға тейеш. Ташлағанда ошо әпсен дә әйтелә:

*Уның тәнендә һиңә урын юҡ.*
*Ҡайҙан килдең, шунда кит! Урының сүплектә!*

**Тәңкә кеүек булып төшөү.** Ҡот ҡойғанда ҡурғаш бәғзе ваҡыт тәңкә кеүек булып төшә. Был осраҡта кешенең ҡото осмаған, ауырыуы башҡа сәбәптән, ауырыу эйәләренән, ен-шайтандан, тиҙәр.

## Ҡот ҡойоусы

Имләгән кешенең теле саф булырға, име килешергә тейеш. Уның һәр һүҙе, бөтөн барлығы тура килеүе, күңеле таҙа булыуы мотлаҡ. Ҡот ҡойоусы саф, иманлы кеше булһа ғына име килешә. Ҡот төшмәһә: "Кил, ҡотом, кил, ҡотом", - тип, берәй әйбер менән һелтәйҙәр. Ҡот шунан килә. Ҡот килһен өсөн ошо әпсенде лә әйтәләр:

*Ҡотом, кил, ҡотом, кил,*
*Тәҙрәнән сыҡһаң, тәҙрәнән кер,*
*Ишектән сыҡһаң, ишектән кер.*
*Мөрйәнән сыҡһаң, мөрйәнән кер.*

**Фирҙәүес ХИСАМИТДИНОВА.**

БЕЛЕМ УСАҒЫ

# АҠЫЛЛЫ ЙӘМҒИӘТТЕ...

## кем төҙөйәсәк һуң?

**Мәғариф өлкәһенең яңы уҡыу йылын яңы реформалар, яңы ҡанундар менән ҡаршы алыуына күнегеп бөткәнбеҙ инде. Быйылғы уҡыу йылы ла яңы үҙенсәлектәре менән киләсәк. Әммә мәғариф системаһы алдына ниндәй генә етди мәсьәләләр ҡуйылмаһын, белем биреүҙең сифатлы булыуы һәм бөгөнгө заман талаптарына яуап бирергә тейешлеге төп бурыстарҙың береһе булып ҡала. Баш ҡала мәғариф хеҙмәткәрҙәренең традицион август кәңәшмәләрендә лә һүҙ башлыса ошолар тураһында барҙы.**



Быйылғы йылдың төп яңылығы булып - 1 сентябрҙән "Рәсәй Федерацияһында мәғариф тураһында" һәм уның нигеҙендә төҙөлгән "Башҡортостан Республикаһында мәғариф тураһында"ғы закондың төп нормалары үҙ көсөнә инеүе торалыр, моғайын. Әлбиттә, был закон тарафынан индереләсәк һәр яңылыҡтың шунда уҡ ниндәйҙер һөҙөмтәләргә килтереүен баһалауы ауыр, бының өсөн ниндәйҙер ваҡыт арауығы талап ителәсәк. Шулай ҙа был документтың мәктәптә башҡорт телен дәүләт теле булараҡ уҡытыуға законлы нигеҙ биреүен әйтеп китергә кәрәк. Федераль дәүләт белем биреү стандарттары индерелә башлау менән бәйле, мәктәптәрҙә йыл һайын бер класта дәүләт теле булараҡ башҡорт теле дәресе уҡыу программаһынан төшөп ҡала бара ине. Хәҙер яңы закондың 6-сы статьяһының икенсе өлөшөндә билдәләнеүенсә, Федераль дәүләт белем биреү стандарттарына ярашлы, башҡорт телен дәүләт теле булараҡ уҡытыу мотлаҡ. Был турала БР Мәғариф министры Әлфис Суфиян улы Ғаязов республика август кәңәшмәһендәге сығышында ла айырым билдәләп үтте.

Баш ҡаланың башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары быға тиклем дә иң әүҙем һәм иң оҫта уҡытыусылар рәтендә ине һәм артабан һәр мәктәптең был законды үтәүүтәмәүе тағы ла уларҙың эшенә яуаплы ҡарауына, үҙ һүҙен әйтә белеүенә бәйле буласаҡ. Барыһын да хәүефләндергән оптималләштереү тулҡыны дауам иткән саҡта туған тел һәм дәүләт теле булараҡ уҡытылған башҡорт теле дәрестәре һаман да "артыҡ" сығымдар исемлегенә эләкмәһен өсөн, уҡытыусыларҙың үҙҙәренән дә бер аҙ ғына фиҙаҡәрлек талап ителә. Шуныһы ла бар: нисек кенә ҡыҙғаныс булмаһын, республикала йәшәүсе башҡа милләттәр тарафынан башҡорт телен уҡытыуға бәйле нигеҙһеҙ ғәйепләүҙәр бер ҡасан да тынмаясаҡ. Иң мөһиме - закондар туған телдәрҙе лә, дәүләт телдәрен дә яҡлай, уларҙы ентекләп өйрәнеп, тыныс ҡына эшләү күпкә урынлыраҡ икәнен аңламағанадарға аңлатыу фарыздыр.

Баш ҡала мәғарифының башҡа яңылыҡтарына килгәндә иһә, Өфө ҡалаһы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов үҙенең сығышында белем биреү объекттарын төҙөүгә ҙур иғтибар бүленеүен белдерҙе. Өфөлә һуңғы биш йылда 15 белем биреү усағы - 2 мәктәп һәм 13 балалар баҡсаһы төҙөлгән, 2 мәктәптә һәм 14 балалар баҡсаһында реконструкция үткәрелгән. Быйыл Һупайлы һәм Затон биҫтәһендә балалар баҡсалары төҙөлөп бөтәсәк. Шулай уҡ шәхси балалар баҡсаларында 400 урын сафҡа инеүе көтөлә.

Баш ҡаланың дөйөм белем биреү системаһына 133 мәктәп инә, уларҙа бөтәһе 97 мең уҡыусы уҡый. Иҫәпләүҙәр буйынса, 2016 йылға уҡыусылар һаны 105 меңгә етәсәк. Ирек Ишмөхәмәт улы әйтеүенсә, ҡалала яңы типтағы комплекстар - мәктәп-балалар баҡсаһы-өҫтәмә белем биреү учреждениелары төҙөү кәрәк, улар яҡынса 2 мең баланы һыйҙырырға тейеш. Был сара финанс ресурстарҙы һөҙөмтәлерәк ҡулланырға, педагогик коллективтарҙың интеллектуаль ҡеүәтен берләштерергә мөмкинлек бирәсәк. Һуңғы өс йыл эсендә мәктәптәрҙе модернизациялауға федераль, республика, ҡала бюджетынан 608 млн 386 мең һум аҡса бүленгән. Һөҙөмтәлә, матди база нығытылған, уҡытыусыларҙың, тәрбиәселәрҙең эш хаҡы артҡан. Федераль дәүләт белем биреү стандарттарына ярашлы, дәреслектәр менән мәктәптәр 100 процентҡа тәьмин ителгән, был дәреслектәр барыһы ла бушлай буласаҡ. Мәктәптәрҙе компьютер техникаһы, интерактив йыһаздар менән тулыландырыу ҙа тулы ҡеүәт менән бара. Электрон белем биреү системаһына күсеү, заманса мәғлүмәти технологиялар ҡуллана башлау йәһәтенән дә үҙгәрештәр бар. Мәғариф өлкәһендә берҙәм мәғлүмәти киңлекте киңәйтеү өсөн электрон дәреслектәр, журнал һәм көндәлектәр булдырыу кәрәклеге лә билдәләнде кәңәшмәлә.

Дөйөм алғанда, баш ҡаланың белем биреү системаһын башҡаларға һис шикһеҙ өлгө итеп ҡуйырға була. Һуңғы ваҡытта "оптималләштереү" һүҙе "мәктәрҙе ябыу" һүҙбәйләнешенең синонимы кеүек яңғырай башланы, ысынында иһә, оптималләштереү бары белем биреүҙең сифатын күтәреү һәм бюджет сараларын һөҙөмтәле ҡулланыу маҡсатында үткәрелергә тейеш. Ғөмүмән, "оптималләштереү" һәм "оптимизм" тигән һүҙҙәр этимологик яҡтан дөйөм тамырлы, ул иң яҡшы тигәнде аңлата. Был йәһәттән Өфө ҡалаһы етәкселегә мәғариф системаһын иң яҡшылар рәтенә баҫтырыу өсөн тырышлығын һәм мөмкинлектәрен йәлләмәй.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Быйылғы уҡыу йылы өсөн иң төп яңылыҡ булып яңы закондың үҙ көсөнә инеүе тора, тип әйткәйнек инде. Ҡайһы бер ғалимдар был закондың илдәге мәғариф системаһын ахырынаса емереп ҡуясаҡ, тип фаразлаһа ла, барыбер бөгөн генә уның аныҡ һөҙөмтәләре тураһында һүҙ йөрөтөп булмай. Хәйер, даими үткәрелеп торған реформалар элекке системаны күптән юҡҡа сығарҙы, унан бары тик һаман да элеккесә уҡытҡан, элеккесә фекерләгән һәм хатта етәкселәрҙең бер туҡтауһыҙ яуҙырған вәғәҙәләренә ҡарамаҫтан, эш хаҡы ла элеккесә булған уҡытыусылар ғына тороп ҡалды, ахыры. Әле генә яңы федераль белем биреү стандарттарын индереп, көнбайышса уҡытыу модулен күсереп бөтөргә лә өлгөрмәнек, аҡыллы йәмғиәт, көнбайышса әйткәндә - "смарт-йәмғиәт" төҙөй башларға кәрәк, тигән лозунгылар яңғыраны. Эйе, интернет һәм заманса мәғлүмәти технологиялар белем биреү процесын да, йәшәйеште лә күпкә еңелләштерә, тик бөтөнләй фекерләй һәм ябай ғына ҡарар ҙа ҡабул итә белмәгән быуын киләсәктә ил менән лайыҡлы идара итә алырмы һуң? Элек уҡыусыға мәктәпте тамамлағанда тапшырылған өлгөргәнлек аттестаты ысын мәғәнәһендә уның интеллект үҫешенең дә өлгөрөп етеүе тураһында һөйләй ине һәр хәлдә. Һәр яңылыҡ йәмғиәт ихтыяжын ҡәнәғәтләндергәндә генә уңышлы була, ә бөгөн оптималләштереү һәм башҡа процестар менән идара итеүселәр йәмғиәт ихтыяжын бөтөнләй иҫәпкә алмай кеүек.**

**Ләйсән НАФИҠОВА.**

*ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...*

# "ИХТИЛАЛ БАТЫРҘАРЫН... ЯЗАЛАУ УРЫНЫЛЫР БЫЛ"

## ҒАЛИМДАРҒА МӨРӘЖӘҒӘТ ИТӘМ...

**"Киске Өфө"нөң 33-сө һанында Рәдис Дусалиндың "Ихтилал батырҙарын язалау урынылыр был" тигән мәҡәләһен уҡып тетрәндем. Мәҡәлә авторы төҙөлөш эштәре алып барғанда осраҡлы рәүештә тиҫтәләгән кешеләрҙең язалап үлтерелеп күмелгән урынын һәм һөйәктәрен тапҡан Артур атлы ирҙең һөйләүҙәренә таянып, үҙ фараздарын килтерә һәм мин дә ул фараздар менән килешәм. Мотлаҡ ҙур фажиғә менән бәйле был тарихи урын.**



Мин мәҡәләне ике тапҡыр уҡып сыҡтым. Тәүге тапҡыр уҡығанда археологик күренеш эҙҙәрен юлланым, икенсеһендә инде һөйәктәр араһында кешеләрҙең муйынына таға торған ағас ҡамыттарҙың (колодкаларҙың) табылыуына иғтибар иттем. Был факт Башҡортостанда XVII-XVIII быуаттарҙағы ҡатмарлы һәм ҡанлы ваҡиғаларҙың бер эҙе булыуына ишаралай. Бында, ысынлап та, бер юлы тиҫтәләгән кеше язаланған һәм ергә күмелгән. Был ҡәберлек әле документтарҙа теркәлмәгән, бығаса беҙгә билдәле булмаған, ысын мәғәнәһендә ҙур тарихи әһәмиәткә эйә урын.

Был ҡәберлекте мотлаҡ рәүештә Башҡортостан тарихсылары тикшерергә тейеш, тигән ҡараштамын. Гәзит бите аша үҙемдең коллегаларыма, крайҙы өйрәнеүселәргә, дәүләт кешеләренә, киң йәмәғәтселеккә мөрәжәғәт итеп, тиҙ арала ошо тарихи урынды тикшерергә тейешбеҙ, тип белдерәм. Беҙ шундай һорауҙарға яуап табырға тейешбеҙ:

-Был кешеләр кемдәр булған һәм улар ниндәй быуаттың, нисәнсе йылдарында ҡайҙа йәшәгән?

-Улар ҡасан, ҡайҙа, ниндәй кешеләр тарафынан һәм ниндәй сәбәпкә бәйле үлтерелгән?

-Улар үлтерелгән саҡта илебеҙҙә, республикабыҙҙа ниндәй сәйәси ваҡиғалар барған һәм һәләк ителеүселәр ул ваҡиғаларҙа нисек ҡатнашҡан?

Был тарихи ваҡиғаны асыҡлау беҙҙең бурыс, был ваҡиғаға беҙ бер нисек тә күҙ йомоп ҡарарға тейеш түгелбеҙ. Мин Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетында эшләгән саҡта Һөйәнтүҙ ваҡиғаһына асыҡлыҡ индереү маҡсатында ғилми-ғәмәли конференция үткәргәйнек. Минеңсә, әлеге тарихи ваҡиға ла шул тарихи осор менән бәйләнгән булырға тейеш. Улай ғына ла түгел, был тарихи урын да Һөйәнтүҙ ауылы фажиғәһе кеүек ҡабул ителергә һәм уға ла шундай уҡ иғтибар булырға тейештер. Иң беренсе сиратта, тәртипһеҙ рәүештә ташланып, бер соҡорға күмелгән милләттәштәребеҙҙе беҙ әҙәмсә, ҡәҙерләп һуңғы юлға оҙатырға һәм унда ҡәбер ташы ҡуйырға бурыслыбыҙ. Бындай ҡанлы ваҡиғалар, вәхшилектәр ҡабатланмаһын өсөн кәрәк был.



**Нияз МӘЖИТОВ,**
**академик.**

# ТИКШЕРӘ БАШЛАНЫҠ...

**"Киске Өфө" гәзитенең 33-сө һанында баҫылған мәҡәләлә яҙылғанса, былтыр, йәғни 2012 йылда төҙөлөш объекттарына нигеҙ ҡаҙығанда ерҙән кеше һөйәктәре табыла. Һөйәктәрҙең күп өлөшөн, ауыл халҡы әйтеүенсә, 9-10 тоҡ, Петровск ауылы участка милиционеры алып китә. Табылған һөйәктәрҙең күләме бик ҙур һәм, әлбиттә, ул бында ниндәйҙер ҙур ерләү урыны булыуын раҫлай.**

Беҙ мәҡәлә эҙенән урынға барып, Ишембай районындағы участканы ҡарап, топографик план төҙөнөк, башҡа махсус эштәр башҡарҙыҡ һәм һөйәктәрҙең ҡалған өлөшөн алып ҡайттыҡ. Ауыл халҡы әйтеүенсә, ерләү ниндәйҙер система буйынса башҡарылмаған, йәғни нисек етте шулай, өҫтө-өҫтөнә өйөлгән. Ә ниндәй генә милләтте алып ҡараһаҡ та, уларҙың ерләү ҡануны буйынса, унда мотлаҡ система була: кеше арҡаһында ятамы, аяҡтары тура һуҙылғанмы йәки тубыҡтан бөгөлгәнме һ.б. Был осраҡта мәйеттәр бер-береһенең өҫтөнә ырғытылған. Һөйәктәр табылған мәлдә төшөрөлгән фотолар урынында бер нисә металл әйбер таптыҡ. Улар сүкеп яһалған сөйҙәр ине. Хәҙер бит ҡаҙаҡ-сөйҙәрҙе тимер сыбыҡтан эшләйҙәр һәм улар түңәрәк була. Ә был имән ҡалыптарҙың фрагменттарында һаҡланып ҡалған ҡаҙаҡтар - өс ҡырлы. Һәм шундай һығымтаға этәрәләр: әлбиттә, бында ерләнгән кешеләр тотҡондар, язаға дусар булыусылар, йәиһә иркенән мәхрүм ителеүселәр.

Ерләү урыны - йылғаның тигеҙ ярында урынлашҡан ҙур булмаған участкала ҙур булмаған ҡәберлек. Ауыл халҡы фаразлауынса, был - халыҡты ҡурҡытыу өсөн эшләнгән эш. Ҡәберҙең тирә-яғына кешеләрҙе теҙеп, уларҙың күҙ алдында яза башҡарылған булыуы мөмкин.

Беҙ алып ҡайтҡан һөйәктәр бер тоҡ самаһы, улар системаға һалынып, унда нисә кеше булғаны һуңыраҡ асыҡланыр, тип уйлайбыҙ. Әлегә бер нисә версия йәшәй: йә был кешеләр каторжандар булған, сөнки Егән йылғаһы буйлап каторжан юлы үтә; йә улар ихтилалдар ваҡытында яндырылған башҡорт ауылдары халҡы. Был факт һәм һөйәктәрҙең ҡайһы милләт вәкилдәренә ҡарауы антропологик тикшеренеүҙәрҙән һуң ғына асыҡланасаҡ. Йәғни беҙ быны баш һөйәктәре буйынса ғына билдәләй аласаҡбыҙ.

**Дим ҒИЗЗӘТОВ,**

**Башҡортостан Республикаһының Күсемһеҙ мәҙәни мираҫ объекттарын һаҡлау һәм файҙаланыу буйынса фәнни-производство үҙәге дәүләт мәҙәни бюджет учреждениеһы ғилми хеҙмәткәре.**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР

## Һөнәрсылыҡ, ҡошсолоҡ һәм балыҡсылыҡ

Башҡорттарҙа игенде һуғып алыу төрлө ысулдар менән башҡарылған: аттар, буш һәм таш һалынған арбалар ярҙамында, сыбағас һуғып, XVIII быуат һуңында, И. Г. Георги һүҙҙәренсә, башҡорттар орлоҡто һаламдан эре малдан тапатып айырған. Йәғни һуғыуға әҙерләнгән иген өҫтөнән эре малды йөрөткәндәр. В.М. Черемшанский белдереүенсә, уҙған быуат уртаһында игенде бындай ысул менән һуғыу Башҡортостандың рус булмаған халҡы араһында ғына түгел, рустар араһында ла киң таралған булған.

Дағаланмаған аттар менән баҫтырғанда бәйләнгән көлтәләр түңәрәк буйынса бер-береһенә яҡын итеп, тығыҙлап, башаҡтарын өҫкә ҡаратып баҫтырып ҡуйылған. Баҫтырыусы аттар һаны төрлөсә: өстән алып унға һәм унан да күберәк булған. Улар бер-береһенә муйындарынан һәм ҡойроҡтарынан бәйләп ҡуйылған. Түңәрәк уртаһында ҡамсылы бер кеше торған һәм аттарҙы ҡыуалаған. Ҡабырға яҡтарҙан һәнәкле һәм тырмалы бер нисә кеше һаламды түңәрәктең эсенә, аттарҙың аяҡ аҫтына ырғытып торған. Ваҡыты-ваҡыты менән аттарҙы ырҙын табағынан (токтан) сығарып, тырма менән һуғылған һаламды тарматып, аҫта ҡалғанын әйләндереп, аттарҙы ҡабат ырҙын буйлап ебәргәндәр. Был операция бер нисә тапҡыр ҡабатланған. В. М. Черемшанский һүҙҙәренә ҡарағанда, уңыш яҡшы булғанда биш ат көнөнә 100 бот иген һуҡҡан.

XX быуат башында көньяҡ башҡорттары араһында иген һуғыуҙың тағы ике ысулы таралған: таштар менән һәм таштар тейәлгән арба егелгән аттар менән. Иген һуғыу таштары күсеп килеүсе украиндарҙан алынған. Арба менән иген һуҡҡанда, арба егелгән атты ырҙын буйлап һалынған көлтәләр өҫтөнән йөрөткәндәр. Сыбағас һуғыу Башҡортостандың көнбайыш һәм өлөшләтә төньяҡ һәм үҙәк өлөшө өсөн хас булған. Урал арьяғы һәм көньяҡ башҡорттарында сыбағас һуғыу бөтөнләй булмаған, йәки был ысулды һирәк кенә һәм бары тик тары һәм һоло һуғыу өсөн ҡулланғандар. Иген һуғыу маҡсатында ҡулланылған сыбағас **(һүрәттә)** ике өлөштән торған: оҙонлоғо 1,2 метрға еткән көбәктән һәм тәпәстән. Көбәктең алғы осо йыуаныраҡ итеп эшләнгән һәм унда диаметры 1,5 - 2 сантиметр булған втулка бырауланған. Ошо втулкаға ҡайыш кейҙерелгән, уның бер осо көбәктең йыуанайған өлөшөнөң нигеҙенә бәйләнгән, икенсеһе тәпәстең муйынына бәйләнгән. 35 сантиметр оҙонлоғондағы тәпәс - имән, ҡайын йәки ҡарама ағасынан эшләнгән. Көбәктең муйынындағы ҡайыш та, тәпәс муйынындағыһы ла ирекле әйөрәлөп йөрөгән, ураланып тормаған һәм сыбағас менән эшләгәндә ауырлыҡ тыуҙырмаған.



Игенде көрәк йәки тубал ярҙамында елгәргәндәр. Бай башҡорттар күрше рус крәҫтиәндәренән атҡа тағылған һуҡҡыс һәм елгәргесте күреп, үҙҙәрендә лә шуны ҡулланған.

Игенде һаҡлау өсөн амбар һәм келәттәрҙән тыш, башҡа айырым махсус биналар төҙөлмәгән.

***Сәңгелдәктә ятҡан саҡтан алып улыбыҙға милли рух һеңдерергә тырыштыҡ. Өйөбөҙҙә һәр саҡ башҡорт көйҙәре һәм сихри ҡурай моңдары яңғырап торҙо.***



**Беҙҙең атай иретеп- йәбештереүсе булып эшләгән осорҙа, ауылдың икенсе осонда урынлашҡан машина-трактор мастерскойына йәйәү йөрөй торғайны. Өҫкө кейеменең иҙеүҙәрен ысҡындырып, салғыйҙарын ҡайырып, ҡулдарын артҡа ҡаушарып эштән ҡайтыр ине. Ағайымдың да атайыбыҙ һымаҡ ҙур кеше булғыһы килгәндер инде. Бала сағында, атай булам, тип, гел генә ҡулын артҡа ҡуйып йөрөр булған, йәғни атай йөрөшөн эләкләгән. Күп осраҡта улдар атайҙар юлын ҡабатлай шул. Атанан күргән - уҡ юнған, әсәнән күргән - тун бескән, ти башҡорт халыҡ мәҡәле. Ысынлап та, ул ағайым, атайыбыҙ һымаҡ, шул уҡ машина-трактор мастерскойы юлын тапап, оҙаҡ йылдар буйы колхозда иретеп-йәбештереүсе булып эшләне. "Киске Өфө" уҡыусыларына атайым тәрбиәһе, ғөмүмән, атай тәрбиәһе нисек булырға тейешлеге тураһында һөйләргә ниәтләнем әле. Ошо яҙмаларымдан сығып, кемдер башҡорт ғаиләһендәге онотола башлаған атай тәрбиәһе ҡанундарын иҫкә төшөрһә, бик шат булырбыҙ.**

# ОЖМАХ ҠАПҠАҺЫ

## Донъя тотҡаһы булды

Беҙ ғаиләлә ун бала үҫтек: ете малай һәм өс ҡыҙ. Атайыбыҙ донъябыҙ тотҡаһы булды. Беҙҙе аяҡҡа баҫтырып кеше итер өсөн уға күп тир түгергә тура килде. Башта уның етмеш төрлө һөнәрен һанап китәйем әле. Беҙҙең атайҙың ҡулынан килмәгән эше булмағандыр ул. Ҡайҙа яуаплы эш, ҡайҙа оҫталыҡ талап ителә, ул шунда булды. Уға тракторсы ла, иретеп- йәбештереүсе лә, монтер ҙа, ташсы ла, клуб мөдире лә, хатта һауынсы булырға тура килде. Хаҡлы ялға сыҡҡас та тик ятманы. Кешеләрҙе ҡыуандырып, йорттар төҙөнө. Хатта күрше ауылдарҙан да килеп алып китә торғайнылар үҙен. Атайыбыҙ ологайғансы сәғәттәр һәм төрлө механизмдар йүнәтте, мейес сығарҙы, хатта быйма табанлау һәм диван тышлау кеүек эштәргә лә маһир ине. Сәс алдырырға ла уға килә торғайнылар. Ярҙам һорап килеүселәрҙең береһен дә атайыбыҙ кире бороп сығарманы, хәленән килгәнсә ярҙам ҡулы һуҙҙы.

Шифалы үләндәрҙе лә танып белде. Мин бала саҡта велосипед менән ҡолап, мейене төшөрҙөм. Атайым башымды еп менән үлсәп, ҡором менән һыҙып һәм усы менән ҡыҫҡылап, мейене урынына ултыртты. Алкоголь менән ауырығандарҙы ла йүгертеп дауалағаны хәтерҙә. Атайыбыҙ беҙ йәшәгән урамдағы тәртипте ныҡ тотто. Берәй ғаиләлә ғауға ҡупһа, ул барып тәртип урынлаштырып ҡайта торғайны. Беләк көсө менән күп эшләгәнгә күрә, ологайғансы көслө булды. Ҡул көрәштереүҙә уны еңеүсе булманы.

Сәнғәтте үҙ итте. Ауылдың үҙешмәкәр театрында ла уйнаны, мәҙәниәт йорто сәхнәһендә лә бейене. Беҙгә күрше йәшәгән оҙон Әғләм ағай менән "Кәтүк менән Бағанай"ҙы уйнауҙары әле лә хәтеремдә.

Мин атайымдың ни эшләргә белмәй ҡул ҡаушырып ултырғанын иҫләмәйем. Беҙ бер ваҡытта ла башҡа ғаиләләрҙең балаларынан уҙҙырып кейенмәнек, тәмлекәстәр менән ауыҙ буяп ултырманыҡ. Шул уҡ ваҡытта фәҡирлек тә беҙгә ҡағылманы.

## Динде үҙенсә ҡабул итте

Атайыбыҙ бер ваҡытта ла динде инҡар итеп һөйләмәне. Шул уҡ ваҡытта икенсе заманалар етте, гонаһтарымды йыуам, тип, ураған һайын мәсет юлын тапап, көн-төн доғалар өйрәнеп тә ултырманы. Ә динде үҙенсә ҡабул итте. Башҡалар ҡурҡып икеләнгәндә лә, атайым дини йолаларҙы үтәргә тырышты, хәленән килгәнсә үлеп ҡалған ауылдаштарының мәйеттәрен йыуырға йөрөнө. Үҙе белгән йолаларҙы, ғөрөф-ғәҙәттәрҙе башҡаларға ла өйрәтте.

***Атайыбыҙҙың кешелеклелек даны тирә-яҡ ауылдарға ла таралды. Тик ул күкрәк тултырып орден-миҙалдар сыңлатып, гәзит-журналдарҙа күккә сөйөп маҡталып, оло йыйындарҙа ҡатнашып, түрәләрҙе маҡтап, етеп килгән коммунизмды данлап түгел, ә бары тик ҡәҙимге ябай ер кешеһе булараҡ өлгәште быға. Атайыбыҙ бер ваҡытта ла беҙгә, шулай булығыҙ, былай булығыҙ, тип нотоҡ уҡып ултырманы. Балаларым яҡшы уҡып, институттарға инһендәр, тип, дәрес әҙерләшмәне, беҙҙе яҡлайым, тип, мәктәпкә барып әрләшеп тә йөрөмәне. Ул беҙгә бала саҡ иреклеге бүләк итте. Әммә шул уҡ ваҡытта беҙ төшөнмәгән алымдар аша тәрбиә эшен дә алып барҙы. Ул тәрбиә беҙҙең өйҙә генә бикләнеп ҡалмай, урамдаш балаларға ла тарала торғайны.***

***Атайыбыҙ, эше күп булһа ла, тыуған ауылым, ғаиләм, тип, бер урында ғына мүкләнеп ятманы. Мөмкинселек тыуғанда, сит тарафтарға сәфәр ҡылып, ер-һыу күреп килде. Ул алыҫ сәфәрҙән ҡайтыуға, өйөбөҙгә халыҡ йыйылып китә. Өй тулы балалар булыуға ҡарамаҫтан, беҙҙән кеше өҙөлмәне.***

Атайыбыҙҙың кешелеклелек даны тирә-яҡ ауылдарға ла таралды. Тик ул күкрәк тултырып орден-миҙалдар сыңлатып, гәзит-журналдарҙа күккә сөйөп маҡталып, оло йыйындарҙа ҡатнашып, түрәләрҙе маҡтап, етеп килгән коммунизмды данлап түгел, ә бары тик ҡәҙимге ябай ер кешеһе булараҡ өлгәште быға. Атайыбыҙ бер ваҡытта ла беҙгә, шулай булығыҙ, былай булығыҙ, тип нотоҡ уҡып ултырманы. Балаларым яҡшы уҡып, институттарға инһендәр, тип, дәрес әҙерләшмәне, беҙҙе яҡлайым, тип, мәктәпкә барып әрләшеп тә йөрөмәне. Ул беҙгә бала саҡ иреклеге бүләк итте. Әммә шул уҡ ваҡытта беҙ төшөнмәгән алымдар аша тәрбиә эшен дә алып барҙы. Ул тәрбиә беҙҙең өйҙә генә бикләнеп ҡалмай, урамдаш балаларға ла тарала торғайны.

Атайыбыҙ, эше күп булһа ла, тыуған ауылым, ғаиләм, тип, бер урында ғына мүкләнеп ятманы. Мөмкинселек тыуғанда, сит тарафтарға сәфәр ҡылып, ер-һыу күреп килде. Ул алыҫ сәфәрҙән ҡайтыуға, өйөбөҙгә халыҡ йыйылып китә. Өй тулы балалар булыуға ҡарамаҫтан, беҙҙән кеше өҙөлмәне. Төрлө милләттәге юлсылар ҙа, башҡалар индермәгән диуаналар ҙа беҙҙең өйҙә өшөгән йәндәренә йылы һүҙ ишетә, арыған тәндәренә йылы урын таба торғайны. Уларҙың эскерһеҙ әйткән рәхмәттәре ун баланың имен-һау үҫеп етеүенә булышлыҡ иткәндер.

Заманына күрә тимер аттарҙы ла йүгәнләне беҙҙең атай. Ауылда беренселәрҙән булып матай һатып алды. "Беларусь" тракторында колхоз ҡырҙарында ҡыуыштарҙа ятып бесән эшләне, сылбырлы тимер аттар менән ер һөрҙө. Ул үҙе менән бергә бәләкәс малайҙарын да эшкә алып йөрөнө. Атайыбыҙ артынан бер тотам ҡалмай эйәреп йөрөгән ағайыбыҙ 8-се кластан һуң, йәйге каникулдарында үҙ аллы тракторҙа эшләй башланы. Ул ваҡытта ауылда абруйлы һаналған тракторсы һөнәрен беҙ, ете улы ла, үҙләштерҙек. Ағайымдар тракторҙа намыҫлы эшләп, колхоз, район чемпиондары булды.

## Уҡыттылар, кеше иттеләр

Барыбыҙ ҙа тыуған ауылыбыҙ мәктәбен тамамланыҡ. Ваҡыты еткәс, һәр беребеҙ үҙ аллы тормош юлына аяҡ баҫтыҡ һәм күңелгә ятышлы һөнәр һайланыҡ. Атайыбыҙ бер ваҡытта ла, шунда уҡыһағыҙ, ҙур түрә булырһығыҙ, шул һөнәрҙе һайлаһағыҙ, сереп байырһығыҙ, тип аҡыл өйрәтеп, беҙҙең башты ҡаңғыртманы. Уңайы тура килгәндә ярҙам итте, ә үҙе беҙҙән ярҙам һораманы.

Беҙҙең атай-әсәй ун балаһына мөмкин булғандың барыһын да бирҙе. Беренсенән, ныҡлы һаулыҡ бүләк итте улар беҙгә. Быға мин үҙем инандым. Армияла Мәскәүҙә хеҙмәт иткән осорҙа табиптар һаулығымды тикшереп: "Ундай һаулығың өсөн атай-әсәйеңә рәхмәттәр уҡы,"- тине. Икенсенән, атай-әсәй беҙҙе ысын илһөйәр һәм телһөйәр итеп тәрбиәләне. Беҙ ҡайҙарҙа ғына йөрөһәк тә, тыуған илебеҙҙе һағынып ҡайтабыҙ, ологайған һайын милләт, тел ҡәҙерен тағы ла ныҒыраҡ аңлайбыҙ. Өсөнсөнән, атай-әсәй беҙҙә кешелеклек сифаты орлоғо һалды. Изге китаптарҙа әйтелеүенсә: ожмах әсәйҙәрҙең аяҡ аҫтында ята, ә уның ҡапҡаһының асҡысы - атайҙа.

## Улым Салауат тыуғас

Хәҙер инде үҙем дә күптән атаймын. Ҡатыным менән бер ул һәм бер ҡыҙ үҫтерәбеҙ. Яҙмыш Өфө ҡалаһында төпләнергә насип итте. Инде баш ҡалала ғүмер иткәнгә лә өсөнсө тиҫтә тулып килә. Яйы сыҡҡан һайын балаларҙы тыуған ауылыма алып ҡайтырға тырышам. Улар ҙа беҙҙең ынғайға, ауылға ҡайтып киләбеҙ, тип һөйләшергә өйрәнде.

Һәр ир заты һымаҡ, өйләнгәс тә улым тыуыуы тураһында хыялландым. Аллаһы Тәғәләнең "Амин!" тигәненә тура килеп, улым донъяға килде. Улыбыҙға алдан уҡ бөйөк батырыбыҙ Салауат исемен һайлап ҡуйғайныҡ. Улым "Батырҙар" исемен йөрөткән урамда урынлашҡан бала табыу йортонда тыуҙы. Башҡортостан мосолмандары диниә назариәте мөфтөйө Нурмөхәммәт хәҙрәтте саҡырып, улыбыҙҙың ҡолағына исем ҡысҡырттыҡ. "Был балаға, исеменә тап килеп, Салауат батырыбыҙ һымаҡ тыуған илен һаҡларҙай, үҙ халҡын яҡларҙай ир-егет булып үҫергә яҙһын", тип доға ҡылды хәҙрәтебеҙ.

Сәңгелдәктә ятҡан саҡтан алып улыбыҙға милли рух һендерергә тырыштыҡ. Өйөбөҙҙә һәр саҡ башҡорт көйҙәре һәм сихри ҡурай моңдары яңғырап торҙо. Улыбыҙға башҡортса

**атайҙар**

әкиәттәр, шиғырҙар уҡыныҡ. Һөҙөмтә оҙаҡ көттөрмәне, Салауатыбыҙ теле асылыу менән башҡортса әкиәттәр һөйләй, шиғырҙар ятлай башланы.

Бер саҡ трамвайҙа китеп барғанда улыбыҙ ҡысҡырып башҡортса шиғыр һөйләй башламаһынмы! Беҙ ултырған трамвайҙа башҡорт халыҡ шағиры Рәми Ғариповтың ҡатыны Надежда апай ҙа булған икән. Салауатты эргәһенә саҡырып алып, арҡаһынан һөйөп рәхмәт әйтте. Ғөмүмән, урамда, транспортта йөрөгәндә "Ҡала шарттарында нисек итеп улығыҙға туған телен өйрәтә алдығыҙ ул?" тип һораусылар күп була торғайны. Ауылдан ҡәйнәм беҙҙең янға күсеп килгәнгә күрә, улыбыҙҙы балалар баҡсаһына йөрөтмәнек. Башҡа балалар менән аралашып үҫһен, тип, бер нисә тапҡыр алып барып ҡараным унда. Ҡалмайым, тип йәнтәслим ҡаршылашты. Милли рухта тәрбиәләнгән бала күңеле баҡсала уны нимә көткәнен алдан һиҙенгәндер. Нимә генә тиһәң дә, балалар баҡсаһы тәрбиәһе атай-әсәй, олатай-оләсәй тәрбиәһенә етмәй инде.

Улым менән бергәләшеп радионан "Иләү"ҙе тыңлай, телевизорҙан "Сәңгелдәк"те яратып ҡарай торғайныҡ. Бер заман улым, мин дә "Сәңгелдәк"кә барам, тип ныҡышҡас, Телеүҙәккә алып барҙым. Ярты йылға яҡын радиола тапшырыуҙар алып барҙы, аҙаҡ телевидениеға "Сәңгелдәк"кә күсерҙеләр.

Улыбыҙға, һин бер кемдән дә кәм түгел, ә, киреһенсә,

***✓ "Әгәр ҙә таң менән тороп, спорт менән шөғөлләнеү рәхәт кенә булһа, ошо тау башында һыйыш булмаҫ ине. Ә бит ысын рәхәтлектәр, еңеү тойғоһон кисереүҙәр ана шул ҡыйынлыҡтар һәм ауырлыҡтар артында ята.***

# АСҠЫСЫ...

## ҡулында

ошо ерҙең хужаһы булараҡ, илебеҙҙең киләсәге һинең дә ҡулыңда, тип әйтә киләбеҙ. Бала саҡтан уҡ төрлө мәҙәни сараларға алып йөрөнөк. Илен һаҡларҙай, халҡын ҡурсаларҙай ир-егет булып үҫһен өсөн, улымды спортҡа ылыҡтырҙым. Биш йәштән көнсығыш ҡул һуғышы серҙәрен өйрәнә башланы. Алыҫ, уңайһыҙ тип тормай, башҡорт мәктәбенә уҡытырға йөрөттөк. Беҙ өйҙә тик башҡортса һөйләшкәс, балалар ҙа үҙ телдәрен яҡшы белә.

### Атайың менән маҡтанма...

Йәшәйеш тамырҙарын белһен өсөн улымдың һәр йәйге каникулын ауылда үткәрҙек. Күк Ирәндек тауҙарын, йәмле Һаҡмар буйҙарын ҡыҙырҙыҡ. Велосипедҡа атланып, ауылдан 30 саҡрым алыҫлыҡта ятҡан Баймаҡ ҡалаһын, Ирәндек тауҙары аша 40 саҡрымдағы Әхмәр ауылын, Һаҡмар туғайҙары буйлап Темәс ауылын урап ҡайта торғайныҡ. Ирәндек тауына ике сәғәт тимер атты этеп менәбеҙ ҙә, бер сәғәт буйы һарҡыуға табан эйеп төшәбеҙ. Ауылдан 12 саҡырым алыҫлыҡта ятҡан Талҡаҫ күленә барып һыу төшөп ҡайтыу беҙҙең өсөн һәр ваҡыт оло ҡыуаныс тыуҙыра. Улымды үҙемдең бала саҡ һуҡмаҡтарынан йөрөтөп, үҙем дә бала саҡҡа әйләнеп ҡайтҡандай булам.

Таңғы сәғәт 5-6-ла тороуҙы ла улымдың ҡанына һеңдерергә тырыштым. Ауыл ҡатын-ҡыҙҙары таң менән көтөү ҡыуырға сыҡҡанда, беҙ улым менән аҡ томандарға мансылған йылға буйынан һыу инеп ҡайтып килә торғайныҡ. Улымды тыуған ауылыма алып ҡайтыуҙың маҡсаты төшкә хәтлем йоҡлатып, ҡартатай-ҡартәсәй ҡосағында иркәләнеп ҡоймаҡ ашап, телевизор ҡаратып ятҡырыу түгел. Ә, киреһенсә, ата-бабалары төйәгендә, тәбиғәт ҡосағында рухи яҡтан байығыу, физик яҡтан нығыныу.

Атайың менән маҡтанма, улың менән маҡтан, ти халыҡ мәҡәле. Улың менән маҡтаныр өсөн уға иң беренсе яҡшы тәрбиә бирергә кәрәк. Ә ул тәрбиәне бирер өсөн атай кешегә һәр ваҡыт яҡшы яҡтан ғына өлгө булыу мотлаҡ. Был мең мәшәҡәтле донъяла гел генә өлгө булып йөрөүе еңел түгел. Ә шулай ҙа балаң алдында һин көҙгө һымаҡһың икәнде һәр саҡ иҫтә тотоу фарыз. Ни хәтлем ауыр булһа ла, теш төрәңде ҡыҫып булһа ла, түҙәһең инде. Бер оло еңгәйемдең улыма: "Салауат улым, атайың һымаҡ бул!"- тип әйтеүе бушҡа түгелдер. Мин дә киләсәкте ҡайғыртҡан һәр атай һымаҡ, үҙем тормошҡа ашыра алмаған хыялдарымды улым тормошҡа ашырһын ине, тип хыялланам.

### Улым менән бер ай

Улым унынсыны тамамлау менән, кәрәкле әйберҙәрҙе төйнәнек тә, ауылға юлландыҡ. Был юлы күнекмәләр үткәреү өсөн йәмле июнь айын һайланыҡ. Ауылға ҡайтып төшөп, атай-әсәйҙең хәл-әхүәлен белешкәс, һынауҙарҙы башлап та ебәрҙек. Баштарҙы таҡырайтып сәстәрҙе алғас, һыу ташып, мунса тоҡандырып ебәрҙек. Ҡайын миндеге менән туйғансы сабынып, ауылдың саф һауаһын һулап ингәндән һуң, урындыҡҡа урын йәйеп йоҡларға яттыҡ. Маҡсатыбыҙ - июнь айының һәр көнөн тулыһынса үҫеш өсөн генә файҙаланыу. Ир-егеттең һүҙе бер була, әйткән һүҙ - атҡан уҡ, тип, улымда дәрт-дарман оҫҡондары ҡабыҙам.

1 июнь. Таңғы сәғәт 5. Ауыл әле йоҡлай. Көслө ел, ямғыр һибәләй. Ауылдан алты саҡрымда ятҡан Бикеш ауылына табан йүгерәбеҙ. Кире ҡайтышлай Һаҡмар туғайында ялан аяҡ ысыҡ кисеп, иртәнге күнекмәләр эшләйбеҙ. Ҡул һуғышы алымдарын өйрәнәбеҙ. Күнекмәләрҙән һуң аяҡтарҙы бөкләп ултырып, тәнйәнгә тыуған ерҙән көс-дәрт алабыҙ. Аҡ томандарға солғанып аҡҡан Һаҡмарыбыҙға сумып сыҡҡандан һуң өйгә табан йүгерәбеҙ. Йыуынып-таҙарынып алғас, ихлас күңелдән иртәнге аш әҙерләйбеҙ. Беҙ туҡланған аҙыҡтың күбеһе ярмаларҙан тора. Әсәйҙән ҡурмас ҡурҙыртып, ҡул тирмәнендә талҡан тартабыҙ. Мейестә бешкән икмәккә ҡушып, ойотҡан эсәбеҙ. Магазин тәм-томдарынан баш тартабыҙ. Аш әҙер булғас, урындыҡҡа ашъяулыҡ йәйеп, аяҡтарҙы бөкләп ултырабыҙ. Төшкө аш ваҡытында самауыр ҡайнатабыҙ. Туҡланғандан һуң ашъяулыҡты йыйыштырып, шул уҡ урындыҡта аяҡтарҙы бөкләп ултырып китап уҡыйбыҙ.

Инде бер аҙ эш менән булышып алырға ла ваҡыт етә. Иң тәүҙә урамда тәртип урынлаштырабыҙ, тәнгә күнекмәләр үткәреү өсөн урын әҙерләйбеҙ, ҡулайламалар эшләйбеҙ. Тағы ла яланаяҡ Һаҡмарға табан йүгерәбеҙ. Яр буйында күнекмәләр үткәргәс, рәхәтләнеп һыу инәбеҙ. Беҙ ҡайтыуға әсәйем ҡуйған самауыр борҡоп ултыра. Урындыҡта ултырып туҡланғандан һуң, тағы ла китаптар аҡтарабыҙ. Ихатаға сығып, эштәребеҙҙе дауам итәбеҙ. Ҡайһы саҡта өй алдындағы ултырғысҡа халыҡ йыйылып китә. Оҙон-оҙаҡ нимәнелер тикшерәләр. Улар араһында ҡарт-ҡороһо ла, йәш-елкенсәге лә була. Беҙ йә ҡул бирешеп, йә баш ҡағып һаулыҡ һорашабыҙ ҙа, эшебеҙҙе дауам итәбеҙ. Сөнки беҙҙең өсөн һәр минут ҡәҙерле. Тирләп-бешеп эшләгәндән һуң, хәл алыр өсөн тағы ла йылғаға йүгерәбеҙ. Һыу эсендә лә күнекмәләр үткәрәбеҙ. Беҙ күптән инде балыҡ тотоу, ҡыйҙыҡта селәү ҡаҙыу, сәскәләрҙе тапай-тапай сиңерткә баҫтырыу кеүек ғәҙәттәрҙән арынғанбыҙ. Ер йөҙөндәге бер йән эйәһенең дә йәнен ҡыймаҫҡа тип ниәт ҡылғанбыҙ. Туғандарҙан да беҙҙең өсөн мал-тыуар, ҡошҡорттоң баштарын өҙмәүҙәрен һорайбыҙ.

Олоғайған ата-әсәйем күптән инде мал тотмай. Шуға күрә лә беҙ бала саҡта ҡоро тупраҡҡа әйләнгән, тауыҡтар ҡытҡылдығы сығып саң борҡотоп йөрөгән урамыбыҙ хәҙер йәм-йәшел үләнгә һәм апаҡ сәскәләргә төрөнөп ята. Ҡайһы саҡта улым менән шул хәтфә үлән өҫтөндә күнекмәләр үткәрәбеҙ. Алыҫтағы таҡтаға хәнйәр ташлайбыҙ, спорт мылтығынан сәпкә атабыҙ. Ваҡыттың барлығына ҡарап, үлән ҡурайҙа уйнарға өйрәнәбеҙ. Киске аштан һуң, китаптар ҡараштырғас, сәғәт туғыҙҙа урындыҡта йоҡларға ятабыҙ.

Иртәнсәк йоҡонан торғас, көн һайын төрлө тарафтарға йүгерәбеҙ. Бер көндө беҙҙең ауылдан ете саҡырым алыҫлыҡта ятҡан Икенсе Этҡол ауылына табан Таулы йылғаһы аша сығып, әрәмәлек буйлап йүгерәбеҙ. Икенсе көндө ауылдан ун саҡрым алыҫлыҡта ятҡан Байым ауылына табан, Саҡмағош быуаһы буйлап, бер йорт ҡына тороп ҡалған Ҡуяндар ауылы аша йүгереп үтәбеҙ. Байым урман уртаһында урынлашҡан бик матур ауыл. Ауыл кәртәһен урап кирегә боролабыҙ. Саҡмағош быуаһы эргәһендә күнекмәләр үткәргәндән һуң, һыуҙа ҡолас ташлап йөҙәбеҙ. Улымды бәләкәй сағынан йөҙөргә өйрәттем. Хәҙер инде уны ҡыуып етеп тә булмай. Һыуҙан сыҡҡас, Мүнтәк тауы аша ҡайтыу яғына йүгерәбеҙ. Ә инде дүртенсе тараф - Ҡаҡтуғай ауылы. Ҡаҡтуғайға табан, ун саҡрым араны, Һаҡмар йылғаһының туғайҙары буйлап йүгерәбеҙ. Таңғы тынлыҡты ҡыуаҡтар араһындағы ҡошсоҡтарҙың сихри сутылдашҡаны күмә. Туғайҙарҙа таң атҡанда һәр саҡ томан ята. Ауылға илткән Һаҡмар күперен урайбыҙ ҙа, кирегә боролабыҙ. Ирәндек тауҙарының һырты аша ҡалҡҡан ҡояштың йылы нурҙары арҡанан иркәләй. Йә Кинйәкабаҡта, йә Зәйнулла кисеүе эргәһендә иртәнге күнекмәләр үткәрәбеҙ. Ағын ерҙәге үтә күренмәле Һаҡмар һыуының ҡосағына сумып сығабыҙ ҙа, атай-әсәй йәшәгән Тамаҡ урамына йүгереп ҡайтып инәбеҙ. Беҙҙең урам Таулы йылғаһы Һаҡмарға ҡойған ерҙә урынлашҡан. Шуға күрә исеме Таулы тамағынан алынған. Ҡайһы ваҡыт, таң менән велосипедтарға атланып, ауылдан 12 саҡрым алыҫлыҡта ятҡан Талҡаҫ күленә барып, һыу инеп ҡайтабыҙ. Күлгә йүгереп барып, ҡом өҫтөндә күнекмәләр яһап ҡайтҡан саҡтар ҙа булды. Улым менән һәр саҡ Талҡаҫ юлын һағынып иҫкә алабыҙ. Беҙ ул юлды үткәндә тик үҙебеҙ генә аңлаған рәхәтлек тойғоһо кисерәбеҙ. Ҡайһы тарафтарға йөрөһәк тә, тау, уба баштарында аяҡ салып ултырып, тирә-яҡтың матурлығы менән һоҡланабыҙ, ил-йортҡа именлек , батыр һәм ғорур халҡыбыҙға азатлыҡ теләйбеҙ. Үҙем уҡып-ишетеп белгән ата-бабалар тарихын улыма еткерәм. Ауыл эргәһендәге әүлиәләр ятҡан ерҙәргә зыярат ҡылабыҙ.

Даими рәүештә мунса яғып төшәбеҙ. Мунсала тәндең һығылмалылығы өсөн күнекмәләр үткәрәбеҙ. Үҙебеҙ эшләгән ҡулайламаларҙа таштар күтәрәбеҙ, турниктә тартылабыҙ. Күнекмәләрҙән һуң йәшел үләнгә салҡартан ятып, зәңгәр күкте байҡайбыҙ. Беҙҙең яҡтарҙағы халыҡ телендә "Ирәндек бөркөтө" тигән һүҙ йөрөй ул, әммә ләкин бөркөттәр күҙгә күренмәй. Бына шул төпһөҙ күкте күҙәтеп ятҡанда, бейек-бейектә нөктәләр хасил була. Ентекләп ҡараһаң, уларҙың ҡоштар икәнен күрергә мөмкин. Бәлки, ана шул ҡоштар ғорур Ирәндек бөркөттәрелер...

Беҙҙең телевизор ҡарарға ла, урам буйлап һәптәнләп йөрөргә лә ваҡытыбыҙ юҡ. Тирә-яҡтағы кешеләр көндәрен нисек үткәрергә белмәй, көн-төн телевизор ҡарап ятҡанда, улың менән таң һарыһынан тороп, көндәр буйы ҡара тиргә батып ихатала эштәр башҡарыу, ел-ямғырҙа күнекмәләр эшләү бер ҙә еңелдән түгел. Беҙҙең ауылды уртаға бүлеп, тирә-яҡты шифалы һыуы менән туйындырып аҡҡан Һаҡмарыбыҙҙан тыш, ауылыбыҙҙың тағы ла бер билдәһе булған текә битле Бәбеләш тауыбыҙ бар.Тыуған яҡҡа яҡынлашҡанды аңғартып, ул әллә ҡайҙан күренеп тора. Ҡайһы саҡта беҙ ана шул Бәбеләш тауының түбәһенә йүгереп менеп шөғөлләнәбеҙ. Тау башынан күп тапҡырҙар ҡояш ҡалҡҡанын ҡаршыларға тура килде. Ай буйы улым менән икәүләп кенә күнекмәләр үткәрәбеҙ.

Улымдың ҡабынған теләктәрен һүндермәҫ өсөн, милли рухын күтәрер өсөн данлы тарихыбыҙҙы һөйләйем, шанлы киләсәгебеҙгә әйҙәйем. "Әгәр ҙә таң менән тороп, спорт менән шөғөлләнеү рәхәт кенә булһа, ошо тау башында һыйыш булмаҫ ине. Ә бит ысын рәхәтлектәр, еңеү тойғоһон кисереүҙәр ана шул ҡыйынлыҡтар һәм ауырлыҡтар артында ята. Бушҡа ғына сабырлыҡтың төбө һары алтын, сабыр иткән - мораҙына ирешкән, тимәгән халыҡ мәҡәле, тип аңлатам.

Улым менән бергәләшеп шөғөлләнеү минең үҙемә лә бик күпте бирҙе. Тән ныҒына, йән тынысланa. Дарыу-фәлән ҡулланмайбыҙ, дауаханаларға ла уфтана-уфтана аяҡ баҫмайбыҙ. Ерҙәге тормош, йәшәйеш мәғәнәһен улыма аңлатҡан ваҡытта үҙем өсөн дә яңынан-яңы асыштар яһайым. Ошо бер ай эсендә ата-бабаларым төйәгендә улымда киләсәк тормошондағы ауырлыҡтарҙы еңеү көсөн барлыҡҡа килтерешә, оло ҡыуаныстарҙы тулы мәғәнәһендә тойоу хисен тоҡандыра, милли рухын уята алһам, үҙемдең атайлыҡ бурысымды үтәгәнмен тип әйтә алам.

**Айҙар КҮСӘЕВ.**

***Таңғы сәғәт 5-6-ла тороуҙы ла улымдың ҡанына һеңдерергә тырыштым. Улымды тыуған ауылыма алып ҡайтыуҙың маҡсаты төшкә хәтлем йоҡлатып, ҡартатай-ҡартәсәй ҡосағында иркәләнеп ҡоймаҡ ашап, телевизор ҡаратып ятҡырыу түгел. Ә, киреһенсә, ата-бабалары төйәгендә, тәбиғәт ҡосағында рухи яҡтан байығыу, физик яҡтан нығыныу.***
***Атайың менән маҡтанма, улың менән маҡтан, ти халыҡ мәҡәле. Улың менән маҡтаныр өсөн уға иң беренсе яҡшы тәрбиә бирергә кәрәк. Ә ул тәрбиәне бирер өсөн атай кешегә һәр ваҡыт яҡшы яҡтан ғына өлгө булыу мотлаҡ. Был мең мәшәҡәтле донъяла гел генә өлгө булып йөрөүе еңел түгел. Ә шулай ҙа балаң алдында һин көҙгө һымаҡһың икәнде һәр саҡ иҫтә тотоу фарыз. Ни хәтлем ауыр булһа ла, тештәреңде ҡыҫып булһа ла, түҙәһең инде. Бер оло еңгәйемдең улыма: "Салауат улым, атайың һымаҡ бул!"- тип әйтеүе бушҡа түгелдер. Мин дә киләсәкте ҡайғыртҡан һәр атай һымаҡ, үҙем тормошҡа ашыра алмаған хыялдарымды улым тормошҡа ашырһын ине, тип хыялланам.***

✓ Үсмерҙәр араһындағы был сәм һуңғы йылда көтмәгәндә көндәшлеккә әүерелде. Бындай үҙгәрештең сәбәпсеһе - улар менән бер класта уҡыған Сафура.



**Мәүлит ЯМАЛЕТДИН**

# ТАРТАЙ

**(Хикәйә)**



Һикһәненсе йәш менән барған Ғамир Сибәғәт улына "тартай" ҡушаматы йәбешкәндә ул алтынсы класта уҡый ине. Әле малайлыҡтан сығып өлгөрмәһә лә, Ғамир заманына күрә күҙҙәре ярайһы асылған үсмер. Муйынына таҡҡан ҡыҙыл галстук үҙе ни тора: ул, берҙән, ут ҡыҙыл төҫө менән ҡараштарҙы арбап, ниндәй идеалдарға табынырға кәрәк икәнен иҫкәртә, икенсенән, саҡ ҡына ситкә тайпылһаң, минең боғалаҡ булғанды онотма, тип киҫәтә. Етмәһә, мәктәптәге дәрестәрҙең һәр береһендә тиерлек уҡытыусылар иҫкелек ҡалдыҡтары менән аяуһыҙ көрәш, яңы тормош төҙөү өсөн фиҙаҡәр хеҙмәт тураһында тылҡып ҡына тора. Өҫтәүенә, Ҡыҙылъяр ауылы мәктәбендәге пионер дружинаһы кулак атаһын фаш итеп ҡорбан булған Павлик Морозов исемен йөрөтә. Ошондай шарттарҙа күҙең асылмаҫ ерҙән асылыр.

Эйе, күҙе күргән, ҡолағы ишеткән кешеләргә һәр ерҙә яңылыҡ - улар менән донъя тулған, тиһәң дә була. Ул ҡәҙәр донъяны айҡамайынса, Ҡыҙылъяр ауылына ҡараш ташлап та белергә мөмкин яңы заман һыҙаттарын. Уларҙың иң сағыуы, әлбиттә, күмәк хужалыҡ. Ауыл халҡы яҙҙан көҙгәсә арбаларға тейәлешеп, йырлашып эшкә китә, таҡмаҡ әйтеп эштән ҡайта. Ә элгәре? Ғамирҙың әсәһенән ишетеүенсә һәм китаптарҙан уҡыуынса, революцияға тиклем һәр кем шәхси хужалығында бөксәнләгән. Ә клуб һуң? Унда элек, уҡытыусыларҙың тасуирлауынса, эс бошорғос аҙан тауышы яңғырап торһа, хәҙер манараһы ҡолатылған был йорттан ярты төнгә саҡлы күңелле йыр, гармун ауаздары ишетелә. Йәш-елкенсәктең клубта күңел асыуҙары, "Наза", "Һигеҙ бейеү", "Марш" кеүек замана бейеүҙәренә тыпырлауҙары Ҡыҙылъярға терәтеп тигәндәй МТС төҙөлөп, унда һәр тарафтан ғаиләләре менән төрлө һөнәр кешеләре күсеп килгәндән һуң уғата көсәйеп китте.

Ул саҡта илгә ҡырғын һаласаҡ Оло Ватан һуғышы башланмағайны әле. Шулай ҙа, иртәме-һуңмы, уның тоҡанасағы тураһында халыҡ араһында төрлө хәбәрҙәр йөрөй, гәзиттәрҙә баҫылған мәҡәләләр һәм һирәк-һаяҡ күренеп ҡалған шиғырҙар ҙа шом өҫтөнә шом өҫтәп тора. Ана, яңыраҡ "Ударсы" тип аталған район гәзитендә Ҡыҙыл байраҡ тураһында халыҡ йырҙары баҫылып сыҡҡайны, унда ла фашистар менән ҡотолғоһоҙ алышҡа ишара яһала:

*Күгәрсендәр ергә төшә*
*Бергәләп гөрләшергә.*
*Ленин-Сталин байрағы*
*Саҡыра берләшергә.*
*Йыртҡыс фашист теш ыржайта*
*Совет иленә ҡарап.*
*Дошмандарҙы еңеп сығыр*
*Һәр ерҙә ҡыҙыл байраҡ.*

Әлеге гәзиттә Ш. Мулдыҡай тигән берәүҙең "Тураҡларбыҙ дошманды" тигән әҫәрен Ғамир ятлап уҡ алды. Ул шулай күңеленә оҡшаған шиғырҙарҙы хәтеренә бикләргә ғәҙәтләнгән. Ә Ғамирҙың ятлағанын бер ваҡытта ла онотмай торған сифаты бар. Ете төндә уятып һораһалар ҙа, ул шартлатып һөйләп бирәсәк. Мәҫәлән, Ш. Мулдыҡайҙың баяғы шиғырын:

*Ҡара йылан кеүек ағыу сәсеп,*
*Сик артында яуыз дошмандар,*
*Тыныслыҡта торған илебеҙҙе*
*Емерергә план ҡорғандар.*
*Улар теләй бөйөк Украинаны,*
*Көнсығышты баҫып алырға;*
*Улар теләй күкрәп сәскә атҡан*
*Ил халҡына бығау һалырға.*
*О, юҡ, булмаҫ!*
*Ҡулды күтәреп, беҙ:*
*"Әйҙә, инегеҙ!" - тип тормабыҙ.*
*Йөҙ ҙә етмеш миллион, бер кешеләй,*
*Ҡорал тотоп, ҡаршы барырбыҙ.*
*Үҙ ерендә дошман кәүҙәләрен*
*Ташларбыҙ беҙ йөҙгә киҫкеләп.*
*Беҙ күтәргән еңеү байраҡтары*
*Һис бер ваҡыт аҫҡа эйелмәҫ.*

Ғамирҙың район гәзитендә баҫылған һәр шиғырҙы йотлоғоп уҡыуы, оҡшағандарын ятлап алыуы, ғөмүмән, әҙәби ижад менән мауығыуы бер йыл элек Ҡыҙылъяр мәктәбенә эшкә килгән башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Әсмә Мөслимова апайға бәйле. Дөрөҫөрәге, килеү менән мәктәптә ул ойоштороп ебәргән әҙәби түңәрәккә. Өфөлә уҡыған һәм Башҡортостандың халыҡ шағиры Мәжит Ғафуриҙың үҙе менән аралашҡан был мөләйем апай һәләтле балаларҙы түңәрәккә йәлеп итеп, уларҙы мәҡәлә, шиғыр яҙырға өйрәтә башланы. Әсмә апай түңәрәк ағзаларының ултырыштарын үткәреүҙе, унда уларҙың ижад емештәрен тикшереүҙе, иң яҡшы тип табылған шиғыр менән мәҡәләләрҙән төҙөлгән ҡулъяҙма журнал сығарыуҙы ғәҙәткә индергәйне. Әҙәби түңәрәккә иң тәүгеләрҙән булып яҙылған Ғамир инде шиғырҙың нимә икәненә арыу уҡ төшөнә, әсәһе менән апаһына белгертмәй генә үҙенең күңеленә килгән уй-хистәрен айырым дәфтәр биттәренә сыймаҡлап ҡарай. Тик уларҙы әлегә шиғыр тип атауы ҡыйын: йә рифмаһы тап килмәй ыҙалата, йә уныһын килештерһәң, быуындар һаны тәртәнән сыға. Уларҙан тыш, Әсмә апай өйрәткән фекер тослоғо, өр-яңы образ һәм, иң мөһиме, идея тигән ғәләмәттәр ҙә бар бит әле.

* * *

Яңы уҡыу йылы башланып, аҙна-ун көн үтеүгә, Ғамирҙың МТС кәнсәһендә иҙән йыуыусы булып эшләгән апаһы Маһинур төшкө ашҡа үҙе менән тиңдәшерәк бер ҡыҙҙы эйәртеп ҡайтты. Исеме Зәлифә, район үҙәгенән МТС-ҡа бухгалтер итеп эшкә ебәрелгән икән. Ҡуйы ҡара сәстәре яурын тиңенән киҫелгән, башында күк косынка. Күлдәк өҫтөнән ең остары резинка менән бөрмәләтелгән еңел куртка кейгән.

- Әсәй, - тине Маһинур, теге ҡыҙҙың сәләмен бүлдереп. - Зәлифә МТС-ҡа эшкә килгән. Директор уға фатир тапҡансы, беҙҙә йәшәп торһон әле.

- Ярар, - тине сабыр һәм күндәм холоҡло Таһира апай. - Оҡшаһа, әйҙә беҙҙә ятһын. Миңә керҙәш булһа, һиңә серҙәш булыр.

Зәлифә шулайтып Ғамирҙарҙа йәшәй башланы. Үҙе алсаҡ, үҙе илгәҙәк был ҡыҙҙы өйҙәгеләр тиҙ арала яҡын күреп, яратып өлгөрҙө. Яратмаҫлыҡ та түгел ине шул - асыҡ күңелле булыуы өҫтөнә, үҙе ифрат һылыу. Һөйләшкәндә йөҙөнән йылмайыу китмәй. Ә ул йылмайҙымы - һул яҡ битендә бармаҡ баҫымындай ғына уйым барлыҡҡа килә. Ундай саҡта өй эсе мөғжизәле нурға тулып, яҡтырып киткәндәй була.

Үҙенән бер-ике йәшкә генә оло булған Зәлифәгә иң ныҡ ҡыуанған зат - Маһинур ине. Улар бер-береһенә ныҡ эйәләшеп, апалы-һеңлеле әхирәттәргә әүерелеп киттеләр - өй эштәрен шарт-шорт икәүләшеп башҡаралар, киске уйындарға бергәләп йөрөйҙәр. Әйтерһең, бала саҡтан шулай йөрәк серҙәрен бүлешеп, айырылмаҫ дуҫтар булып йәшәгәндәр.

Зәлифә ҡырҡҡа ла етмәҫтән ике бала менән тол ҡалып, иртәнән кискәсә колхоз эшендә ҡайнаған Таһира апайҙың да күңелен табырға онотмай. Була бит шундай тартымһаҡ кешеләр - хәленде аңлап, эс-бауырыңа инә, күңелгә ятышлы хәбәрҙәр һөйләп, кәйефеңде күтәрә. Ундай заттар эргәһендә күңел һәр саҡ күтәренке була, йәнде өйкәп торған тауҙай ауырлыҡтар ҙа кесерәйгәндәй тойола.

Зәлифә күберәген үҙе эшләгән МТС яңылыҡтарын, унда булған ҡыҙыҡлы ваҡиғаларҙы һөйләй ине. Бына бөгөн дә ул, Ғамирҙың уҡыуҙан ҡайтып өлгөрмәгәненән файҙаланып, төшкөлөккә ҡайтҡан арала Таһира апай менән Маһинурға сираттағы мәҙәкте һурытты:

- Уф! - тине ул ишектән инер-инмәҫтән. - Беләһегеҙме, МТС-та нимә булды бөгөн?

- Юҡ, ҡайҙан беләйек? - тине аптырай төшкән Таһира апай.

Әхирәтенең күҙҙәрендә шаян осҡондар уйнағанын күргән Маһинур өндәшмәне - көлөмһөрәп, яңы хәбәр көттө. Зәлифә дауам итте:

-Беҙ баш баҫып эшләп ултырабыҙ. Бер заман коридорҙа кемдеңдер: "Медсестра! Медсестра!" - тип ҡысҡырғаны ишетелде. Кем икән, тип, ишекте асып ҡараһаҡ - беҙҙә эшләгән бер ағайҙың бисәһе, имеш. Ҡаршы ишектән фельдшер апай килеп сыҡты. Уның: "Ни булды?" тигән һорауына теге ҡатын әйтә: "Һеңлем, ҡәйнәмә әллә нимә булды ла ҡуйҙы, барып ҡарамаҫһың микән?" Тәһәрәт алырға сыҡҡан еренән ҡорт саҡҡандай йүгерә-атлай өйгә килеп инде лә, ыңғырашып, урындыҡҡа ауҙы. Мин бында йүгерҙем..."

-Уй, Алла! - тип һүҙ ҡыҫтырҙы Таһира апай. - Кем икән һуң ул? Ныҡ ауырып китмәһә ярар ине - оло кешегә күп кәрәкме?

Зәлифә йәнә бер килке көлөп алғандан һуң, дауам итте:

-Әбейҙә бер ниндәй ҙә ауырыу булмаған шул. Медсестра әйтә, барып инһәм, ысынлап та, оло йәштәге инәй урындыҡта һыҙланып ята. "Нимә булды, ҡайһы ерең ауырта?" тип һораһам, "Эһ!" ти ҙә, билдән түбән яғына ымлай, ти. Ята биргәс, ыңғыраша-ыңғыраша: "Тәһәрәт алыуым булды, әсетеп алып китте, түҙеп тә булмай", - тип әйтә, ти. Медсестра әйтә, барып тегенең ҡомғанын асып ҡараһам, эсендәге һыуы ҡыҙғылт төҫтә, еҫкәп ҡараһам, ҡыҙыл борос еҫе сыға, ти. "Әбей, - тип әйтәм, ти, - борос һалғандар бит. Ҡараңҡырап йөрө". Шул һүҙҙәрҙе әйтеүем булды, килен кеше сыуал соҡалағындағы тәртешкәне эләктереп алды ла: "Ах, ҡәһәр төшкөр! Ғизетдиндән башҡа берәү ҙә түгел! Хәҙер елкәһен өҙә һуғам!" - тип тышҡа йүгерҙе. Баҡтиһәң, әбейҙең ауырыуы шуҡ ейәненең ҡомғандағы йылымыс һыуға һалған боростан булып сыҡты...

- Әсәһе теге Ғизетдинде тапты микән? - тип һораны Маһинур, көлә-көлә.

- Ҡайҙан тапһын! - тине Зәлифә. - Медсестра апай әйтә, мин өйгә инеп барғанда алан-йолан ҡарап, ихатала бер үсмер йөрөй ине, ғауға ҡупҡандан һуң ҡараһаҡ, унан елдәр иҫкән, ти...

Ғамир мәктәптән ҡайтып ингәндә, Маһинур апаһы менән Зәлифә тыйыла алмай көлә, ә Таһира апай:

- Әстәғәфирулла!.. Тәүбә, тәүбә... Етәр, шырҡылдашмағыҙ, шул булдымы көлә торған нәмә. Гонаһ шомлоғо! - тип тегеләрҙе тыйып маташа.

Ғамирҙың ҡайтып инеүе әхирәттәрҙе көлөшөүҙән тыйылырға мәжбүр итте. Ни тиһәң дә, ир нәҫеленән бит. Етмәһә, көлөүҙең сәбәбе бик сетерекле - балиғ булмаған бала ҡолағы өсөн түгел.

- Ҡалай оҙаҡланың бөгөн. Иртәрәк ҡайта торғайның, - тине Таһира апай, хәбәрҙе ҡапма-ҡаршы юҫыҡҡа йүнәлтергә яйы сыҡҡанға ҡыуанған төҫтә.

Ғамирҙың:

- Дәрестәрҙән һуң әҙәби түңәрәк ултырышы булды, - тиеүен етди ҡиәфәт кергән Зәлифә эләктереп алды:

- Оһо, һин шулай матур әҙәбиәт менән ҡыҙыҡһынаһыңмы ни? Яҙыусы йәки шағир булып китһәң, беҙҙе лә берәй ергә ҡыҫтырып ҡуйырһың әле.

-Эй-й, - тип уңайһыҙланды Ғамир. - Әсмә апай әйтә, шағирлыҡ менән яҙыусылыҡ тыумыштан бирелә, мин һеҙҙе матур әҙәбиәтте аңларға, уны яратырға ғына өйрәтәм, ти.

- Апайығыҙ бик аҡыллы икән, - тине Зәлифә. - Һинең һымаҡ саҡта мин дә шиғыр менән мауыға торғайным. Яратҡан шағирҙарҙың әҫәрҙәрен гәзиттәрҙән ҡырҡып алып, йәки күсереп яҙып йыя инем. Ул дәфтәр миндә әле лә бар, теләһәң, аҙағыраҡ уҡытырға бирермен. Ә бер шиғырға хатта бик матур йыр яҙылған. Уны ла өйрәтермен...

* * *

Әҙәби түңәрәктең Октябрь байрамы яҡынлашыуғараҡ уҙғарылған ултырышында Әсмә апай унда шөғөлләнеүселәргә махсус йөкләмә бирҙе.

-Балалар! - тине ул ултырыштың аҙағында. - Бөйөк Октябрь Социалистик революцияһының сираттағы йыллығы етеп килә. Илебеҙҙе даһи Ленин һыҙған юл менән ун йылдан ашыу бөйөк Сталин етәкләй. Концертта һөйләр өсөн уға бағышлап шиғыр яҙырға кәрәк. Һеҙгә бер аҙна ваҡыт бирелә. Кемдең шиғыры иң яҡшыһы, шул концертта һөйләйәсәк.

Ғамирҙың йөрәге елкенеп ҡуйҙы, һиҙҙермәй генә тәҙрә эргәһендәге парта артында ултырған Йәүҙәткә күҙ йүгертте. Уны күргәйне, күңеле тыйып тотҡоһоҙ сәмгә тулышты. Әллә Әсмә апай әйткән илһам тигән ғәләмәт ошо буламы икән? Юҡтыр ҙа, сөнки бындай тойғо Ғамирҙың булмышына класташын күргән һайын ябырыла. Моғайын, Йәүҙәт тә уға ҡараған һайын шундайыраҡ тойғо кисерәлер, сөнки класташтар араһындағы өнһөҙ ярыш күптән бара. Кемдәр бер-береһен уҙырға тырышып уҡый? Ғамир менән Йәүҙәт. Кемдәр кемуҙмаҡтан сәмләнеп мәктәптең йәмәғәт тормошонда ҡайнаша? Шулар.

Үсмерҙәр араһындағы был сәм һуңғы йылда көтмәгәндә көндәшлеккә әүерелде. Бындай үҙгәрештең сәбәпсеһе - улар менән бер класта уҡыған Сафура. Исеменән аңғарыуығыҙса, ул муйынына шундай уҡ ут ҡыҙыл төҫтәге галстук таҡҡан ҡыҙыҡай. Ҡыҙыҡайҙың да ниндәйе әле: үҙенең һүҙ менән әйтеп аңлатҡыһыҙ матурлығы һәм һөйкөмлөлөгө менән кластағы бар ҡыҙҙарҙан айырылып тора. Ундай заттарҙы халыҡ араһында "һылыу һөйәк" тип йөрөтәләр. Һәр хәлдә, Сафураның йәнәшәһендәге ҡыҙҙар, нисектер, үҙҙәренән үҙҙәре төҫөн юя, әйтерһең, улар күҙгә күренмәҫ ҡорған артына йәшеренә. Ҡараштар ирекһеҙҙән Сафураға төшә, турғайҙар араһындағы күгәрсен кеүек күҙгә бәрелеп торған ҡыҙҙы күреүҙән кинәнес тойғоһо кисерергә ашҡына.

Был бер Ғамирға ғына шулай тойолалыр, тип уйлар инең - кластағы малайҙарҙың барыһы ла Сафураға тартыла, уның күңелен табырға тырыша. Һәр хәлдә, Ғамир шулай тоя. Бигерәк тә Йәүҙәт янғалаҡлай, ҡыҙҙың иғтибарын төрлөсә үҙенә йәлеп итергә маташа. Ана, яңыраҡ ул, дәрестәр бөтөп, ҡайтырға сыҡҡас, Сафураға:

-Ҡайҙа, сумкаңды тотошайым, - тип ярамһаҡланған булды. Ләкин Сафура шул саҡ Ғамирҙың түбәһен күккә тейҙергән, йөрәген татлы һулҡылдатып ҡуйған һүҙ әйтте:

- Юҡ, Ғамир тота. Уға юл ыңғайыраҡ. Эйе бит, Ғамир?

**(Дауамы бар).**

АФАРИН!



# ҠУРАЙҘЫҢ УРЫНЫ...

## һәр саҡ түрҙә

**Үткән йәкшәмбелә Ишембай районының Урман-Бишҡаҙаҡ ауылы янындағы Торатау итәгендә "Торатау" тип аталған халыҡ-ара этно-фестивалдә һәм балалар һабантуйында булыусылар ысын мәғәнәһендәге күңел, йөрәк, моң байрамында ҡатнашыуҙары хаҡында хәбәр еткерҙе. Байрамдың был шаңдауы бик оҙаҡ ваҡыт яңғырап торор әле. Был концертта Роберт Юлдашевтың "Ҡурайсы" төркөмө, "Арғымаҡ" этно-рок төркөмө, шулай уҡ Тыва республикаһынан килгән "Ят-Ха" төркөмө, Эквадор индеецтарының "Rainbow", Мәскәүҙең кельт музыкаһын башҡарыусы "Тинтал", Екатеринбургтан Европаның урта быуаттарҙа сығарылған көйҙәрен башҡарыусы "Floss Florum" төркөмдәре, Татарстандан Хәниә Фәрхи һәм башҡа артистәр сығыш яһаны.**
**Халыҡ-ара этно-фестивалдең нисек ойошторолоуы хаҡында белергә теләп, сараның төп ойоштороусыһы, ҡурайсы Роберт Юлдашевҡа мөрәжәғәт иттек. Роберттың этно-фестиваль хаҡындағы мәғлүмәт менән башланып киткән әңгәмәһе үҙенән-үҙе донъя, дин, милләт хаҡында фәлсәфәүи мәсьәләләргә барып ялғанды.**

### Сараның үҙенсәлеге

"Торатау" халыҡ-ара этно-фестивалендә ҡатнашыусыларҙы һайлағанда һәм сараның сценарийын төҙөгәндә иң тәүҙә менәрләгән йылдар аша һаҡланып, һаман да башҡарылып, яратып ҡабул ителеп килгән йырҙары һәм көйҙәрҙе башҡарыусыларҙы йәлеп итергә тырыштыҡ. Беҙгә кешелектең тәбиғи һайланмыш баҫҡысын үткән, бөгөнгөгә килеп еткән көйҙәр һәм йырҙар кәрәк ине. Ундай көйҙәрҙә рухи көс һәм тәрәнлек бар. Былдай башҡарылышты халыҡсан тип атайҙар. Был этно-фестивалдең төп үҙенсәлеге лә шунда: унда ниндәй генә телдә йырҙар һәм көйҙәр башҡарылмаһын, байрамға килеүсе төрлө милләт вәкилдәре барыһы ла, йыр башҡарылған телдәрҙең күбеһен аңламаһа ла, уларҙы үҙенеке итеп ҡабул итте. Эквадор индеецтары сығыш яһауы булды, уларҙың артынан ярты майҙан эйәреп йөрөнө. Уларҙың сығышында яңғыраған йырҙар моңо менән башҡорт көйҙәренә яҡын торған зауыҡлы ғына тамашаны тәшкил итте. Был көндә Торатау янына килгән һәр кем үҙен Аллаһтың яратҡан йән эйәһе икәнен тойҙо һәм тик илаһилыҡ кимәлендә аңлап була торған моң сәңгелдәгендә бәүелде.

Менәр йылдар буйы һаҡланып килгән ошо йырҙарҙа һүҙ менән генә аңлатып булмаған киңлек, тәрәнлек бар, ул барлыҡ кәртәләрҙе, шартлы ҡаршылыҡтарҙы емереп, кешенең йөрәгенә үтеп инә. Нурлы ғына матур августың был көнөндә беҙ үҙебеҙҙе Аллаһы Тәғәләнең ҡосағында булғандай хис иттек. Был илаһилыҡтың серен хатта байрамда сығыш яһаусылар ҙа аңлай алмайынса, минә: "Донъяның барлыҡ сәхнәләрендә, майҙандарында сығыш яһап та, былдай илаһилыҡты тойғаныбыҙ булмағайны. Торатау янында ниндәй мөғжизәгә юлыҡтыҡ һуң?"- тип тә мөрәжәғәт иттеләр. Уларҙың һәр ҡайһыһына был илаһилыҡтың серен аңлатыр өсөн башҡорт халҡының тарихын һөйләп бирергә тура килер ине.

Әгәр ҙә моң, көй, йыр менәр йыллыҡтар аша һаҡланып, беҙгә килеп етә икән, уларҙа, һис шикһеҙ, илаһилыҡ, йәғни Аллаһы Тәғәлә бар. Ул барлыҡ телдәрҙә лә бер үк төрлө аңлашыла һәм барлыҡ халыҡтарҙы үҙҙәрен бер бөтөн итеп тойорға ярҙам итә. Был осраҡта моңға тәржемәсе кәрәкмәй. Гүйә, Аллаһы Тәғәлә ҡасандыр Әҙәмдән һәм Һауанан яралтып, аҙаҡ төрлө халыҡтар итеп ер буйлап таралтҡан бәндәләрен Торатау янына йыйҙы ла, ҡасандыр бар кешеләр бер халыҡ булып йәшәгән саҡтарҙы иҫкә төшөрҙө. Бының өсөн Хаҡ Тәғәлә оран рәүешендә мең йыл элек яҙылған көйҙәрҙе һәм йырҙарҙы яңғыраттырҙы һәм музыка аша кешегә яҡынлашты. Торатау янында үткән халыҡ-ара этно-фестивалдең төп үҙенсәлеге, минең аңлауымса, тап ошондалыр, тием.

### Һандуғас кимәле

Ошондай хозурлыҡтың уртаһында, әлбиттә, ҡурай һәм халҡыбыҙҙың үлемһеҙ боронғо йырҙары булды. Ҡурайым менән ҡайҙа ғына барһам да, ниндәй генә музыка ҡоралдары араһында, кемдәр алдында ғына сығыш яһаһам да, уның урыны һәр ваҡыт ҡап урталыҡта, түрҙә булды. Атай-олатайҙарыбыҙ мираҫ иткән был уйын ҡоралын мин Аллаһтың башҡорт халҡына биргән бүләге тип уйлайым. Ҡурай үләнен тупраҡҡа тамырландырып, елдәр менән наҙлап, шифалы ямғырҙар менән һуғарып, ҡояш нурында иркәләндереп Хоҙай үҫтергән бит инде. Ул һәр бер үҫемлек кеүек үк Аллаһ ниғмәте. Ул шул уҡ скрипка кеүек, кеше тауышына шул тиклем яҡын.

Минең форматтағы сығыштарҙа ҡурайҙың башҡа халыҡтар тарафынан да яратып ҡабул ителеүе хаҡында әйтәләр. Бының ни өсөн шулай икәнлеген аңлата алмайым, аңлата алһам, ундай башҡарыу һәләтенә эйә лә була алмаҫ инем. Был үҙем өсөн дә оло сер булып тора. Шулай ҙа был күренеште шулайыраҡ итеп күҙ алдына килтерәм. "Һәр кеше менән уларҙың телендә һөйләш" тип әйтелә бер хәҙистә. Мин, мәсәлән, ҡурайҙа уйнағанда үҙемде онотам, бары тик Хоҙайҙы һәм халҡымды ғына тоям янымда. Ғөмүмән, Ҡөрьәндә һәм ғәрәп телендә "мин" тигән төшөнсә юҡ, уның урынына һәр ваҡыт "беҙ" йөрөй. "Мин" бар ерҙә эгоизм башлана һәм ул илаһилыҡтан алыҫлашыуҙың тәүге баҫҡысы булып тора. Кем белә, бәлки, концертыма башҡа милләт вәкилдәренең дә күпләп килеүе ошо сәбәпкә бәйлелер.

Әйтәйек, һандуғас барлыҡ телдәрҙә лә, барлыҡ ерҙәрҙә лә бер үк төрлө һайрай һәм уның һайрауы бар кешеләр тарафынан да бер үк төрлө булып ҡабул ителә. Миненсә, былдай хозурлыҡтың нигеҙе илаһилыҡ та. Үҙем шулай уйлайым: Аллаһ ризалығы өсөн башҡарылған барлыҡ ғәмәл дә һандуғас һайрауындай ҡабул ителәләр ул.

Минең уйымса, ҡурайсыларыбыҙ араһында Ишмулла ағай Дилмөхәмәтов ана шундайын, һандуғас бейеклегенә күтәрелгән ҡурайсылыр. Иҫегеҙҙә булһа, уның сәхнәлә яңғыраған ҡурай моңо, милләтенә ҡарап тормайынса, барлыҡ тамашасылар тарафынан да берҙәй үк ҡабул ителә торғайны. Уның сығыштары барыһы тарафынан да сәғәттәр буйына бер тынала ҡабул ителә ине. Сөнки ул үҙенең маһирлығы буйынса барлыҡ кимәлдәрҙе үтеп, илаһилыҡ юғарылығына күтәрелгәйне. Ул башҡорт халыҡ көйҙәрен башҡарғанда, тәүҙә боронғоса дөрөҫ итеп көй ағышын башҡара ла, артабан илаһилыҡ йүнәлешендәге импровизацион үҫеш юлынан китә ине. Йәғни ул, гүйә, теге йәки был көй аша ошо рәүешле итеп үҙенең тормошҡа ҡарашын, фекерен белдерә. Мин быны бик ҙур, бөйөк кимәл тип уйлайым. Мин Ишмулла ағай кеүек үҙенсәлекле башҡарған башҡа боронғо ҡурайсыларҙы һәр ваҡыт тыңлайым һәм туҡтауһыҙ үҙ өҫтөмдә эшләргә тырышам.

**(Дауамы 16-сы биттә).**



✓ *Баланы иртәрәк һәм көн дә бер үк ваҡытта йоҡларға ятырға күнектерегеҙ. Иртәнсәк уны ҡысҡырып, ҡабаландырып, төрткөләп-тартҡылап түгел, ә наҙлап-һөйөп, яғымлы тауыш һәм матур һүҙҙәр менән уятығыҙ.*



ИНТЕРНЕТТАН



## ДЕЛЬФИНДАРҘЫҢ ДА... исемдәре бар

■ Бөйөк Британияның Манчестер университеты ғалимдары өлкәндәр өсөн үҙенсәлекле "бишек йыры" уйлап тапҡан. Улар әйтеүенсә, был көй һулышты яйлата, баш мейеһе әүҙемлеген түбәнәйтә, шуға ла кеше тыныслана һәм уның йоҡоһо килә башлай. Һигеҙ минутлыҡ был көй шул тиклем йоҡоно килтерә, шуға ла уны руль артындағыларға тыңларға ярамай. Ғалимдар төркөмө ҡайһы көйҙәң тынысландырыу һәләтенә эйә икәнлеген белеү өсөн был эшкә табиптарҙы ла йәлеп иткән. Һөҙөмтәлә, килеп сыҡҡан "бишек йыры" тыңлаусыларҙа йөрәк ритмы, артериаль ҡан баҫымы һәм стремм гормоны - кортизол түбәнәйә.

■ Дельфиндар кешеләр кеүек үк бер-береһенә исеме менән "өндәшә", тигән һығымтаға килгән Сент-Эндрюс университеты ғалимдары Стефани Кинг менән Винсент Дженик. Бер нисә йыл Шотландияның көнсығыш ярҙарында йәшәгән афалина дельфиндарын күҙәтеп, һәр дельфиндың үҙенең исеме барлығын асыҡлаған. Был исем - үҙенсәлекле һыҙғырыуҙы улар бөләкәй саҡтан ятлап ала. Ғалимдар раҫлауынса, был исем-һыҙғырыуҙы дельфиндар башҡа төркөм менән осрашҡанда үҙен танытыу өсөн ҡуллана. Был процесс кешеләрҙең үҙ-ара танышыуына оҡшаған икән.

■ Физиологтар иҫәпләүенсә, кеше тәүлегенә бер түгел, ә иң әҙе ике тапҡыр йоҡларға тейеш. Уларҙың раҫлауынса, көн уртаһында йоҡлап алыу хеҙмәт етештереүсәнлеген күтәрә. Мәҫәлән, күреү реакцияһы тиҙлеге (компьютер экранында яҙылғанды аңлау ваҡыты) иртән 10 миллисекунд булһа, кисен ул 40 миллисекунд тәшкил итә. Әгәр кеше көндөҙ йоҡлап алһа, кисен ул мәғлүмәтте иртәнге тиҙлек менән ҡабул итә. Көндөҙ йоҡлауҙың файҙаһын түбәндәге факт та билдәләй: тәүлек эсендә кешенең тән температураһы бер үк булмай, ә ике тапҡыр - 3-5 һәм 13-15 сәғәттәр араһында ул ныҡ түбәнәйә. Тап ошо ваҡытта күптәрҙең йоҡоһо килә башлай ҙа инде.

■ Миннесота университеты ғалимдары фекеренсә, иң яҡшы идеялар тирә-яғында идеаль тәртип булғанда түгел, киреһенсә, бар нәмә болғанып ятҡанда килә. Эш урыны хужаһы тураһында күп нәмә "һөйләй". Даими тәртип эйәһе йышыраҡ педант, ул дөрөҫ туҡлана, бар урында ла тәртип ярата. Ә бына йыйыштырылмаған өҫтәлдә ултырып эшләүселәр йышыраҡ ҡуйылған сиктәрҙән дә сыға, улар тиҙерәк уйлай ҙа. Улар араһында ижади кешеләр, ғалимдар күберәк. Тикшереү барышында хеҙмәткәрҙәрҙең яртыһын идеаль таҙа офисҡа, икенсе төркөмдө тулы хаос булған урындарға ултыртҡандар. Улар барыһы ла өҫтәл теннисы өсөн тәғәйенләнгән тупты ҡулланыуҙың ун ысулын уйлап табырға тейеш була. Бынан тыш, улар мәрхәмәтлек фондтары өсөн аҡса күсерә, шулай уҡ алма йәки шоколад ашай алған. Тест күрһәтеүенсә, таҙа урында ултырыусылар мәрхәмәтлерәк булған, әммә мәсьәләне үтеүҙә артыҡ айырылып тора алмаған. Ә бына икенсе төркөмдә ҡыҙыҡлы һәм ижади тәҡдимдәр күберәк осраған.

АТА-ӘСӘ ҠОЛАҒЫНА

# БАЛАНДЫҢ МӘКТӘПКӘ БАРЫУЫ...

## махсус әҙерлек тә талап итә



**Баланы уҡыуға, айырыуса кескәйҙәрҙе 1-се класҡа барырға әҙерләү бик мөһим мәсьәлә. Улар иҫән-һау, һәр саҡ теремек һәм күтәренке кәйефтә, тыныш һәм уңышҡа ынтылыусан булһын өсөн белгес кәңәштәренә ҡолаҡ һалыу файҙаға ғына буласаҡ, тип ышанабыҙ.**

### Йөгө ауыр булмаһын

**Ата-әсәләр йыш ҡына уҡыусының портфеле ауыр булыуға зарлана. Был йәһәттән бәләкәй кластар өсөн ниндәй нормалар ҡаралған?**

Балаға портфель һайлағанда уның сағыу төҫөнә һәм биҙәктәренә генә ҡыҙыҡырға түгел, ә иң беренсе унайлылығына һәм сифатына иғтибар итергә кәрәк. Ғөмүмән, 1-се класс уҡыусыһы өсөн етештерелгән портфелдәргә талаптар бик ҡәтғи, сөнки ул балаларҙың умыртҡа бағанаһы формалашыуҙа ҙур роль уйнаясаҡ. Шуға күрә лә аҫылмалы сумкаһың арҡаға тейеп торған яғы ортопедик ҡабырғалы булырға тейеш, был баланың умыртҡа бағанаһы рәүешен ҡабатлап торғанлыҡтан, артабан дөрөҫ һын үҫешенә булышлыҡ итәсәк. 7 йәшлек бала өсөн портфель ауырлығы 700 г - 1 кг тәшкил итһә, уҡыу кәрәк-яраҡтары менән тултырғандан һуң сумка 2- 2,5 килограмдан да артыҡ тартырға тейеш түгел. 5-8-се кластар өсөн был норма 3,5 кг, ә өлкән кластарҙа уҡыусылар өсөн 5 кг ҡаралған. Баланың физиологик үҙенсәлектәренән сығып ҡарағанда, былдай ҡәтғилекте һүҙмә-һүҙ ҡабул итергә лә ярамайҙыр, бәлки, шуға күрә ортопед табиптар түбәндәге формула менән файҙаланырға кәңәш итә. Бала ауырлығынан уның 10 процентын иҫәпләп сығарығыҙ ҙа шул һандан 200 грамды алығыҙ. Балағыҙ өсөн уның сумкаһы ауырлығы шул дәүмәлдә тәшкил иткән хәлдә уның умыртҡа бағанаһына зыян килмәйәсәк, ти белгестәр.

Сумканың сифатына ҡағылышлы бәләкәй генә бер кәңәш: әгәр ҙә билдәле берәй сәбәптән фирмала етештерелмәгән рюкзак йә портфель һатып алырға ҡарар итһәгеҙ, еүеш салфетка менән уның биҙәген еңелсә генә ышҡып ҡарағыҙ. Салфеткаға уның буяуы сыҡһа, былдай тауарҙан баш тартыуығыҙ хәйерлерәк булыр.

### Уҡыу кәрәк-яраҡтары

**Хәҙер һатыуҙа дәфтәр, ручка-ҡәләмдәрҙең ниндәйе генә юҡ! Шулар араһынан нисек итеп иң кәрәклеһен дөрөҫ һайларға?**

Ябай ғына мәсьәлә күренһә лә һорау дөрөҫ бирелә, сөнки 1-се класс балаһы өсөн корпусынан атылып сығыусы үҙәкле ручка, музыкаль пенал,"серле код"лы папкалар һәм башҡа шуның кеүек шаҡҡатырғыстар бер нигә лә кәрәк түгел. Канцелярия әйберҙәрен уларҙың ябайлығы һәм кәрәклеге йәһәтенән ҡарап һайларға кәңәш ителә. Мәҫәлән, дәфтәрҙе алып ҡарайыҡ. Уларҙың күҙ ҡамаштырғыс ап-аҡ һәм фил һөйөге төҫөндәге ҡағыҙлыһы бар. Ошо ике вариантһын һуңғыһын һайлағыҙ, яңылышмаҫығыҙ, сөнки был төҫ күҙәр өсөн зыянһыҙ. Шул уҡ ваҡытта ҡағыҙҙың сифатына ла иғтибар итегеҙ: ул икенсел сеймалдан етештерелгән дәфтәр түгелме икән?

Ручкаларҙы, әлеге әйтелгәнсә, "кәттәһен" түгел, ә мәктәп стандарты буйынса рөхсәт ителгән ябайын, унайлыһын һайлағыҙ. Ул йыуан һәм шыуғалаҡ, шыма корпуслы булмаһын. Иғтибарҙы тарҡатыусы артыҡ деталдәре булған ручка ла кәрәкмәй. Ҡәләмдәр ҙә хәҙер танығыһыҙ булып үҙгәрҙе, уларҙың төрлө модификацияһы бар. Алмаш грифелле ҡәләмдәр унайлы, әлбиттә, ләкин 1-се класс балаһына ағас корпуслы, уртаса ҡатылыҡтағы традицион грифелле ("НВ" йәки "ТМ") ҡәләмдәр ҙә ярай. Ә бына төҫлө ҡәләмдәргә килгәндә, уларҙың 48 төҫләһөн алыуҙың бер кәрәге лә юҡтыр, мөғайын, сөнки башланғыс класта бала иң топ 7-8 төҫ менән генә эш итәсәк. Ә инде махсус художество мәктәбенә йәки рәссам түңәрәгенә йөрөгән хәлдә 48 төҫләһөнөң дә кәрәк булыуы бар. Йөйгыстар алам тиһәң дә баш ватырға тура киләсәк әле. Тик берүк баланың, ләк еҫе аңҡытыусы матур йөйгыс алайыҡ, тип мыжыуына бирешә күрмәгеҙ. Ундайҙарҙың сифаты насар була, йөйғанда ҡағыҙҙа эҙ ҡалдыра, ваҡлана, онтала һ.б. Шуға ла, бик күҙгә ташланып бармаһа ла, каучук йөйгысҡа өҫтөнлөк бирегеҙ. Пенал, фломастер һәм башҡа тауарҙарҙың да экологик яҡтан таҙа материалдан етештерелгән булыуына иғтибар итегеҙ.

### Сәләмәт булһын, тиһәң...

**Мәктәпкә төшкән баланың сәләмәтлеге лә борсой ата-әсәне. Баланың иммунитетын көсәйтеү өсөн ниҙәр эшләргә кәрәк?**

Рәсми статистика буйынса беҙҙең илдәге балаларҙың ни бары 10 проценты ғына һау-сәләмәт иҫәпләнә, ҡалған 90 процентының физик һәм психологик үҫешендә проблемалар бар. Бала иңенә төшкән ауырлыҡтар, тейешле ял итә алмау, насар туҡланыу бының сәбәптәре булып тора. Бала иммунитетының иң яман дошмандары - ул стресс, дөрөҫ туҡланмау, хәрәкәттең, физик күнегеүҙәрҙең етешмәүе, аш һендереүҙең боҙолоуы, эс ҡатыу һәм шул арҡала организмдың ағыуланыуы, арыу, хроник сирҙәр, генетик йәһәттән күсеһә иммунитетҡа эйә булыу. Иммунитеты көсһеҙләнгән бала һуңпән, көйһөҙ була, тиҙ арый, йоҡоһо туймай, йөгөшло ауырыуҙарға тиҙ бирешә (йылына 3-4 тапҡыр), аллергик сиргә тарый.

Балам сәләмәт булһын, тиһәң, иң тәүҙә уның туҡланыуына иғтибар итергә кәрәк. Айырыуса иртәнге аш майҙар, аҡһымдар һәм углеводтарҙың тулы йыйылмаһын туплаған булырға тейеш. Бының өсөн уның өҫтәленән икмәк, емеш-еләк, йәшелсә, аҡ май, эремсек, сыр, йомортҡа, майһыҙ ит, балыҡ, һәр төрлө бутҡалар өҙөлмәһен. Саф һауала күберәк булыу, спорт һәм башҡа төр һауыҡтырыу сараларына иғтибар бүлегеҙ. Балағыҙҙы йөҙөү, йүгереү, саңғыла уҙышыу, конькиҙа шыуыу, һауыҡтырыу гимнастикаһы менән шөғөлләнеүгә ҡыҙыҡһындырығыҙ. Телевизор ҡарауҙы һәм компьютерҙа ултырыуҙы ҡәтғи сикләгеҙ. Иммунитетты нығытыуҙа тағы бер ҙур ярҙамсы - ул яҡшы йоҡо. Баланы иртәрәк һәм көн дә бер үк ваҡытта йоҡларға ятырға күнектерегеҙ. Иртәнсәк уны ҡысҡырып, ҡабаландырып, төрткөләп-тартҡылап түгел, ә наҙлап-һөйөп, яғымлы тауыш һәм матур һүҙҙәр менән уятығыҙ. Тәүҙә - 5, унан - 10, аҙаҡ 20 минутҡа тиклем физик күнекмәләр эшләтегеҙ.

**Иммун системаһын нығытыусы халыҡ медицинаһы саралары:**

● витаминлы ҡатнашма - 1,5 стакан йөҙөм, 1 ст.грек сәтләүеге, 0,5 ст.миндаль, 2 лимон ҡабығын ит турағыстан үткәреп, лимон һуты һәм 0,5 ст.шыйыҡ бал өҫтәп бутағыҙ. Ике көн ҡараңғы урында тотоп төнәткәс, балаға көнөнә 2-3 тапҡыр ашар алдынан 1-2 ҡалаҡ бирегеҙ;

● көртмәле менән лимон - 1 кг ҡыҙыл көртмәле һәм 2 лимонды ит турағыстан үткәреп, 1 стакан бал менән бутағыҙ. Көнөнә 2-3 тапҡыр 2-шәр балғалаҡ ашатығыҙ;

● ашар алдынан балаға йылы һөткә прополис төнәтмәһе һалып эсерегеҙ. Тәүҙә баланың ҡортсолоҡ продукттарын нисек ҡабул итеүен тикшерегеҙ, аллергия билдәләре булмаһа, йәшенә ҡарап, шунса тамсы прополис тамыҙылған һөттө ай буйы эсерегеҙ, унан бер ай туктатып торорғоҙ. Тамсылар һанын әкренләп арттыра барығыҙ;

● ҡыҙҡбыуын үләне төнәтмәһе - 1 аш ҡалағы ҡыҙҡбыуын үләнен 1 стакан ҡайнар һыуҙа төнәткәндән һуң көнөнә 3-әр тапҡыр 30-ар грамм эсергә. Был төнәтмәне айлыуса көҙ, грипп кизеүе башланыр алдынан ҡабул итеү файҙалы, тик шуны хәтерегеҙҙән сығармағыҙ: ҡыҙҡбыуын үләнен бөйөр ауырыуҙары йә бөйөрҙә таш булған осраҡтарҙа ҡулланыу ярамай.

✓ *"Иманлы әҙәмгә динле булыуҙан һуң насип булған иң күркәм нәмә - изге ҡатындыр. Уға бойорһаң, ул буйһонор, уға ҡараған ваҡытта күңелең шатлыҡ менән тулыр, һүҙ бирһәң, һис шикһеҙ ышаныр.*

*МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ*

# ИР ХАҠЫН ҺАҠЛАУ - САУАП,

## ирҙе тыңламау - оло гонаһ



**Хәҙерге көндә күп ғаиләләрҙә ғаилә башлығы булып ир кеше түгел, ә ҡатын-ҡыҙ һанала. Ни өсөн? Сөнки ундай ғаиләләрҙә ир-егеттең абруйы түбән, көслө затты һанға һуҡмайҙар һәм Аллаһтың ҡушҡанын үтәмәйҙәр, Уның тыйғанын ашатлап сығалар.**

Ислам динендә ошоға ҡағылышлы бик күп һорауҙарға дөрөҫ яуаптар бар. Һәр ҡатын-ҡыҙ ирҙәрҙе ҡәҙер итеүҙең сауаптарын һәм ирҙәрҙе рәнйетеүҙең гонаһтары хаҡында белергә тейеш. "Ире ҡәнәғәт булған мосолман ҡатын-ҡыҙ Йәннәткә керер,"- тигән Бәйғәмбәребеҙ (с.ғ.с.). Итәғәтле, тыңлаусан, ире өйҙә булмағанда үҙен дә, уның малын да һаҡлаған ҡатын - иң күркәм ҡатын-ҡыҙҙыр". Ошо һүҙҙәрҙе әйткәс, Аллаһ илсеһе "Ҡатындар" сүрәһенән 34-се аятты уҡыған: "Алла кешеләрҙең береһен икенсеһенән өҫтөнөрәк иткәнгә күрә, һәм ирҙәр үҙ малдарын сарыф ҡылғанға күрә, улар ҡатындарға ҡарағанда өҫтөнөрәк".

Бер ваҡыт Аллаһ илсеһе сәхәбәләр араһында булғанда уға Йәзид ҡыҙы Әсмә былай тип мөрәжәғәт итә: "Һин миңә атайым да, әсәйем дә кеүек, мин һиңә барлыҡ ҡатын-ҡыҙҙарҙың илсеһе сифатында килдем. Башҡалар ҙа Шәреҡтән алып Ғәребкәсә Аллаһы Тәғәлә тарафынан бөтә ирҙәргә һәм ҡатындарға хаҡ юл күрһәтеүсе итеп ебәрелгән булыуың тураһындағы фекерем менән килешерҙәр. Беҙ һиңә һәм һинең Бөйөк Хужаңа иман килтерҙек. Мин өйҙә ултырыусы һәм һеҙҙең барлыҡ теләктәрегеҙҙе үтәүсе, һеҙҙең балаларығыҙҙы тәрбиәләүсе күп һанлы ҡатындарығыҙҙың береһе. Һеҙ, ирҙәр, шуның өсөн дә өҫтөнөрәктер, сөнки йома намаҙында, күмәк намаҙҙарҙа булаһығыҙ, йыл һайын хаж ҡылаһығыҙ; Аллаһ юлында көрәшкә сығаһығыҙ. Беҙ иһә, һеҙ Хаж сәфәренә киткәндә, походтарға ҡуҙғалғанда, өйҙә ҡалабыҙ, үҙебеҙҙе һәм малығыҙҙы һаҡлайбыҙ, кейемдәрегеҙҙе тегәбеҙ, төҙәтәбеҙ һәм һеҙ ҡылған әлеге изге ғәмәлдәрҙә ҡатнаша алмайбыҙ", - ти. Мөхәммәт бәйғәмбәр (с.ғ.с.) сәхәбәләренә борола ла: "Һеҙҙең ҡасан да булһа дин мәсьәләләре буйынса ҡатын-ҡыҙ тарафынан бынан да гүзәлерәк сығыш ишеткәнегеҙ булдымы?"- тип һорай. Унан һуң ҡатынға ҡарап әйтә: "Ҡайт та, башҡа ҡатындарға еткер: кем иренән нимә ҡылһа ла ҡәнәғәт ҡала, кем уның теләк-ихтыяждарын үтәй, әйткән фекере менән килешә - һеҙҙең аранан иң күркәме шул булыр. Быларҙың һәммәһен башҡарыу ҡатын-ҡыҙға ире башҡарған изге ғәмәлдәрҙең сауабына тиңләшер".

Бәйғәмбәребеҙҙең ҡатыны Ғәйшә (раҙый Аллаһу ғәнһә) ҡатын-ҡыҙҙарға: "Әгәр ҙә ирҙәрегеҙ алдындағы вазифаларығыҙҙы белгән булһағыҙ, үҙегеҙ туҙанға батҡан осраҡта ла, иң тәүҙә ирегеҙҙең битенән туҙанды һөртөп алыр инегеҙ",- тигән.

Мөғаз бине Ябал (раҙый Аллаһу ғәнһү) әйткән: "Әгәр иренең ризалығы өсөн икмәк бешергән ваҡытта ҡатындың йөҙө йәки ҡулы ут эҫеһенә бешһә, Аллаһ уның йөҙөн тамуҡ утына хәрәм ҡылыр. Ҡайһы ҡатын ире алдында аяғүрә тора, башын һыйпай йәки ире ултырған ваҡытта уға мендәр һала, алдына аш әҙерләп килтерә, иренең йөҙөнә йылмайып ҡарай, ҡәҙер-ғиззәт итә, үҙенең ата-әсәһенә, күршеләренә ирен маҡтай, ире менән һөйләшеп кәңәшләшә һәм быларҙың һәммәһен дә иренең күңелен асыр һәм Аллаһы Тәғәләнең ризалығы өсөн эшләй, ул ҡатындың һәр бер һүҙе бәрәбәренә, һәр аҙымы бәрәбәренә ҡол азат иткәндәге кеүек сауап бирелер. Теге донъяла барса ҡатындар был ҡатындың нурын күреп ғәжәпкә ҡалыр: "Их, беҙ ҙә был ҡатын кеүек ирҙәребеҙҙе ҡәҙер-хөрмәт иткән булһаҡсы!" - тиерҙәр".

Бөгөнгө көндә күп ҡатын-ҡыҙҙарҙың ирҙәрен яманлап хәбәр таратыуына шаһит булына. Ғүмер буйы иренән изгелектәр күреп тә, бер оҡшамаған ғәҙәте килеп сығып, "Һинән ғүмеремдә бер изгелек һәм файҙа ла күрмәнем",тип ысҡындыра икән, Аллаһы Тәғәлә ул ҡатындың барса изгелектәрен юҡ итер. Әгәр бер ҡатын теле менән ирен рәнйетһә, уның теле Ҡиәмәт көнөндә етмеш аршын булып муйынына сорналып йөрөр. Һәр ҡылыҡ, һәр әйткән һүҙ өсөн Аллаһы Тәғәлә ҡаршыһында яуап тотасаҡбыҙ. Ҡылған ғәмәлдәребеҙҙең береһен ҡалдырмай фәрештәләр ғәмәл дәфтәрҙәренә яҙып бара һәм Әхирәткә күскәс, беҙҙең эштәребеҙ үлсәүҙәргә һалып үлсәнәсәк, ҡайһы яғы ауырыраҡ тарта, шуға ҡарап яуапҡа тарттырыласаҡбыҙ. Ә ҡатын-ҡыҙҙың Йәннәткә инеү-инмәүе уның иманлылығынан һәм иренең ризалығына ирешеүенән тора. Шуға күрә, мөмкин тиклем күберәк изге эштәр ҡылырға, ә гонаһтарҙан арынырға кәрәк.

Иренән йөклө булға ҡатынға Аллаһы Тәғәлә көндөҙҙәрен ураҙалар тотҡан, төндәрен уяу тороп ғибәҙәт ҡылған сауаптарын яҙыр. Тулғаҡ кисерһә, Аллаһ уға тулғаҡ ғазабы өсөн бер ҡол азат иткән сауапты яҙыр. Әгәр балаһы тыуһа, күктән: "Эй, изге ҡатын! Һинең барса гонаһтарың ярлыҡанды. Инде изгелектәр генә ҡылып йәшә!" - тигән бер ауаз килер.

Бәйғәмбәребеҙ: "Ире тарафынан ҡыйырһытылыусылар иренә "буйһонам" тиһә, был ҡатын-ҡыҙҙың һүҙҙәрен Хаҡ Тәғәлә Үҙен маҡтаусы һәм Уны данлаусы фәрештәгә тиң итер. Аллаһты маҡтаған ҡатын-ҡыҙ өлөшөнә яҙылыусы сауаптар ул тыңлаусан булғансы һәм "буйһонам" тигәнсе дауам итер", - тигән. Тимәк, иренән ҡыйырһытылып йәшәгән ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙы ла түҙгәндәре һәм буйһонғандары өсөн Аллаһы Тәғәлә изгелек менән һөйөндөрә. Аллаһ - ғәҙелдәрҙән ғәҙел. Әгәр бер ҡатын Аллаһы Тәғәлә ризалығы өсөн иренең рәнйетеүенә сабыр итһә, ул ҡатынға дине өсөн һуғышта ҡатнашыусы сауабы яҙылыр. Ул ҡатын мосолман, тәүбә ҡылған ҡатындарҙан булыр. Динебеҙҙә иң күркәм ҡатындар бына нисек һүрәтләнә: "Иманлы әҙәмгә динле булыуҙан һуң насип булған иң күркәм нәмә - изге ҡатындыр. Уға бойорһаң, ул буйһонор, уға ҡараған ваҡытта күңелең шатлыҡ менән тулыр, һүҙ бирһәң, һис шикһеҙ ышаныр, һин өйҙә булмағанда, үҙен, өйөндө һәм мөлкәтеңде һаҡлар".

Ҡатын-ҡыҙҙарға Аллаһ ризалығына өлгәшеү һәм Ожмахҡа инеү, бер уйлаһаң, шул тиклем еңел: иреңде яратып, ҡәҙерләп, уның ризалығын алыу һәм, әлбиттә, иманлы мөслимә булыу.

Бер мосолман Аллаһ юлына сыҡҡанда ҡатынына үҙе әйләнеп ҡайтҡансы өйҙөң икенсе ҡатынан төшмәҫкә бойорған. Беренсе ҡатта ҡатындың ауырыу атаһы йәшәгән һәм ул ҡыҙынан үҙенә ярҙам итеүен һораған. Ҡатын быңдай осраҡта нимә эшләргә кәрәклеген һорап, Мөхәммәт бәйғәмбәргә мөрәжәғәт иткән. "Аллаһтан ҡурҡ һәм иреңде тыңла", - тигән Аллаһ илсеһе. Ҡатындың атаһы вафат булған һәм ул йәнә Бәйғәмбәрҙән кәңәш һораған. Аллаһ илсеһе: "Ирең һүҙенән сыҡмағаның өсөн Аллаһ атайыңдың гонаһтарын кисерҙе", - тигән.

Эйе, хәҙистәрҙән һәм Ҡөрьән Кәрим аяттарынан ир хаҡын һаҡлауҙың, уға итәғәт итеүҙең һәм уның абруйын күтәреүҙең ни тиклем дә мөһим икәнен аңлайһың. Әммә ҡатындарҙың ире алдындағы бурыстары булған кеүек, ирҙәрҙең дә ҡатыны алдында үҙ бурыстары бар. Был хаҡта Бәйғәмбәребеҙ (с.ғ.с.) әйтеп ҡалдырған: "Мин һеҙгә ҡатындарығыҙ менән яҡшы мөнәсәбәттә булыуығыҙҙы васыят итәм. Онотмағыҙ: улар һеҙҙең әсирҙәрегеҙ кеүек. Уларға насарлыҡ эшләмәгеҙ. Ғәйептәре булһа, артыҡ уҫалланмағыҙ. Ул осраҡта урын-ер айырым булырға тейеш. Буйһонһалар, мыҫҡыл итмәгеҙ. Белегеҙ, уларҙың һеҙгә ҡарата хоҡуҡтары булған кеүек, һеҙҙең дә улар ҡаршыһында хоҡуҡтарығыҙ бар. Улар шунан ғибәрәттер: ҡатындарығыҙ һеҙ яратмаған кешене йортоғоҙға индерергә тейеш түгел, ә һеҙ ҡатындарығыҙҙы яҡшы ашатырға һәм кейендерергә бурыслы".

Әлхәмдүлилләһ, Аллаһы Тәғәлә һәр ҡолона ғәҙел. Аллаһтың ҡушҡандарын һәр ғаиләлә үтәргә тырышһалар, әрләш-талаш, тигеҙһеҙлек, айырылышыуҙар аҙыраҡ булыр ине. Ә ғаиләлә күп нәмә ҡатындарҙан тора.

**Айгизә АСҠАРОВА әҙерләне.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ЫСЫН ТОРМОШҠА СӘЙӘХӘТ

## "Мега тормош". 30 көнлөк программа

## Һигеҙенсе көн.

**Беренсе бүлек: аҡыл. Иғтибар туплауҙы көсәйтеү күнегеүе**

**Аҡылды күнектереүгә ике минут**

Ике минут дауамында ҡул сәғәтегеҙҙең секундтарҙы һанаған теленә иғтибар туплап, унан күҙегеҙҙе алмайынса ҡарағыҙ. Башҡа бер ниндәй уй-фекергә лә иғтибарығыҙҙы ситкә йүнәлттерергә рөхсәт итмәгеҙ. Әлеге ваҡытта һеҙҙең өсөн бөтөн донъя ошо сәғәт телендә. Ихтыярығыҙҙы туплағыҙ һәм күнекмәне дөрөҫ башҡарығыҙ, иғтибарығыҙҙы бүлгеләмәгеҙ. Әгәр ошо күнегеүҙе көнөнә өс тапҡырҙан да кәм эшләмәһәгеҙ, 21 көндән һуң иғтибар туплауҙа, энергетик кимәлдәрҙә һәм аңдың дөйөм һығылмалылығында һәм йәнлелегендә һиҙелерлек үҙгәрештәр күрерһегеҙ.

**Икенсе бүлек: тән. Йоганың мөғжизәле сифаттары**

Әгәр һеҙҙең тән сәләмәтлеген нығытыуға йүнәлтелгән физик күнегеүҙәрҙең бер системаһын ғына эшләргә ваҡытығыҙ ҡала икән, ул сағында йоганы тәҡдим итәм. Күнегеү өсөн барлыҡ ҙур ҡалаларҙа тиерлек төркөмдәр бар, позаларҙы өйрәнеүе еңел һәм улар көсөргәнештән бик яҡшы арындыра. Йога менән даими шөғөлләнеү ҡәнәғәтлек килтерә, энергия бирә, йөҙ төҫөн һәм аҙыҡ эшкәртеүҙе яҡшырта, шулай уҡ мускулдарҙың дөйөм тонусын күтәрә.

**Өсөнсө бүлек: характер. Дуҫлыҡ ҡәҙере**

Дуҫлыҡтың тормошобоҙҙо матур һәм ҡыҙыҡлы итеп кенә ҡалмауы, ә уны оҙайтыуы бик күп тапҡырҙар иҫбатланған инде. Мичиган штаты университеты тикшеренеүселәре, ҙур ғаиләһе һәм бик күп дуҫтары булған шауни ҡәбиләһе юлбашсыһы Текумса бик оҙон ғүмер йәшәгән, тигән һығымтаға килгән. Тикшеренеүселәр шулай уҡ ғаиләле ир-ат һәм ҡатын-ҡыҙҙың яҙғыҙаҡтарға ҡарағанда оҙағыраҡ йәшәүен күрһәтә.

Бөгөнгө көндә дуҫлыҡ мөнәсәбәттәрен яҡшыртыу өсөн файҙаланығыҙ. Тығыҙ, ныҡлы бәйләнештәр булдырырға теләгән биш дуҫығыҙҙы һайлап алығыҙ ҙа, уларҙы айырым исемлеккә теркәгеҙ. Артабан уларҙың дуҫлығы ни өсөн бик мөһим икәнлеген билдәләгеҙ. Һуңынан инде ошо дуҫлыҡты нығытыуға йүнәлтелгән эшмәкәрлек планын яҙығыҙ. Уға дуҫлыҡты һаҡлай белгән өсөн рәхмәтле булыуығыҙҙы белдереп хат яҙыу ҙа инә. Шулай уҡ берәй китап һатып алып, уны дуҫығыҙға шәхсән тапшырып: "Китап магазинында ошо байлыҡты күрҙем дә, уның һиңә файҙаһы тейер, тип уйлап, алып килдем", - тип әйтә алаһығыҙ. Дуҫығыҙҙы ял көндәрендә сәйгә йәки берәй йылға, күл буйына прогулкаға саҡыра алаһығыҙ. Хатта дуҫығыҙға мөхәббәтегеҙҙе белдереп хат яҙып та, уны ебәрмәһәгеҙ ҙә, дуҫлығығыҙҙы тағы ла нығыта алаһығыҙ, сөнки үҙегеҙ өсөн был кешенең тормошоғоҙҙа ниндәй мөһим урын алып торғанын асыҡлаһығыҙ бит инде.

**Робин ШАРМА.**



## 2 СЕНТЯБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.35 "Женский журнал"
09.45 "Жить здорово!" (12+)
10.55 "Модный приговор"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Время обедать!"
13.00 "Доброго здоровьица!" с Геннадием Малаховым" (12+)
13.45 "Истина где-то рядом"
14.00 Другие новости
14.25 "Понять. Простить" (12+)
15.00 Новости (с субтитрами)
15.15 "Женский доктор-2". Сериал (16+)
16.10 "Ясмин". Сериал (16+)
17.00 "В наше время" (12+)
18.00 "Вечерние новости" (с субтитрами)
18.45 "Давай поженимся!" (16+)
19.50 "Пусть говорят" (16+)
21.00 "Время"
21.30 "Жених". Сериал (16+)
23.30 "Вечерний Ургант". Сериал (16+)
00.00 "Ночные новости"
00.10 "Билл Гейтс. История успеха" (12+)
01.05 "Сумасшедшие на воле" (16+)
03.00 Новости
03.05 "Форс-мажоры". Трагикомедия

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан"
09.00 "1000 мелочей"
09.45 "О самом главном"
10.30 "Кулагин и партнеры" (12+)
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
11.50, 14.50 "Вести. Дежурная часть"
12.00 "Тайны следствия". Сериал (12+)
13.00 "Особый случай" (12+)
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
15.00 "Тайны института благородных девиц", 163-я серия. Сериал
16.00, 17.30 "Всегда говори "всегда-7". Сериал (12+)
17.00 "Вести"
17.10 "Вести - Башкортостан"
18.30 "Прямой эфир" (12+)
19.40 "Местное время. Вести - Башкортостан"
20.00 "Вести"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Простая жизнь". Сериал (12+)
00.30 "Дежурный по стране". Михаил Жванецкий (16+)
01.25 "Девчата" (16+)
02.10 "Улицы в крови" (16+)
04.00 "Комната смеха"

### "ҠУРАЙ"
07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
07.45 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.00 "Төрки донъя". Төрөк телендә йырҙар (12+)
08.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
09.30 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.50 "Замандаштар". Вәкилә Ҡалмантаева (6+)
10.15 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн". Алһыу Сафина йырлай (6+)
10.30 "Һеҙ яратҡан йырҙар" (6+)
11.30 "Илһам" . Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
12.45 "Наза". Башҡорт халыҡ бейеүҙәре (0+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Каруанһарайға 20 йәш". Концерт (12+)
21.00 "Урал моңо-2012". Концерт (12+)

### БСТ
07.00 "Сәләм!" (12+)
10.00 "Новости недели" (на баш. яз) (16+)
10.30, 12.30, 14.35, 17.10, 17.40, 02.10, 06.15 "Выборы-2013" (16+)
10.45, 15.30 "Гора новостей"
11.00 "Городок АЮЯ"
11.15, 18.15, 02.00 "Замандаштар" (6+)
11.30 "Новости недели" (на русс. яз.) (16+)
12.00 "Мультсериал"
12.40, 16.15 "Учим башкирский язык"
12.45, 06.45 "Весело живем" (12+)
13.00 "Тәмле" (16+)
13.30, 19.30, 00.30 Новости (на башк. яз.)
13.40 "Песни композитора Газиза Давлетбердина" (6+)
14.45 "Бәхетнамә"
15.15 "Царь горы"
15.45 "Бауырһаҡ"
16.00 "Шатлык йыры"
16.30, 21.30, 03.00 Новости (на русск. яз.)
16.45 "Дорога к храму"
17.15 "Доброе сердце" (6+)
17.50 "Создай свое дело" (12+)
18.00 "История признания"
18.30, 02.15 "Эдера" (12+)
20.00 "Сәңгелдәк"
20.15 "Жизнь замечательных людей" (12+)
20.30 "Телецентр. Главный день" (12+)
22.00 "Следопыт"
22.30, 03.30 Художественный фильм (16+)
01.00 "Единое время" (16+)
06.30 "Полезные новости" (12+)

## 3 СЕНТЯБРЯ ВТОРНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.35 "Женский журнал"
09.45 "Жить здорово!" (12+)
10.55 "Модный приговор"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Время обедать!"
13.00 "Доброго здоровьица!" с Геннадием Малаховым" (12+)
13.45 "Истина где-то рядом"
14.00 Другие новости
14.25 "Понять. Простить" (12+)
15.00 Новости (с субтитрами)
15.15 "Женский доктор-2" .Сериал (16+)
16.10 "Ясмин". Сериал (16+)
17.00 "В наше время"
18.00 "Вечерние новости" (с субтитрами)
18.45 "Давай поженимся!" (16+)
19.50 "Пусть говорят" (16+)
21.00 "Время"
21.30 "Жених". Сериал (16+)
23.30 "Вечерний Ургант" (16+)
00.00 "Ночные новости"
00.10 "Pink Floyd". "История "Wish you were here" (16+)
01.20, 03.05 "27 свадьба". Комедия (12+)
03.00 "Новости"
03.30 "Форс-мажоры"
04.20 "Контрольная закупка"

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан"
09.00 "Ауаз"
09.45 "О самом главном"
10.30 "Выборы-2013"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
11.50, 14.50 "Вести. Дежурная часть"
12.00 "Тайны следствия". Сериал (12+)
13.00 "Особый случай" (12+)
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
15.00 "Тайны института благородных девиц", 164-я серия. Сериал
16.00, 17.30 "Всегда говори "всегда-7". Сериал (12+)
17.00 "Вести"
17.10, 19.40 "Местное время. Вести - Башкортостан"
18.30 "Прямой эфир" (12+)
20.00 "Вести"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Простая жизнь". Сериал (12+)
00.45 "Противостояние" (16+)
03.20 "Девушка-сплетница" (16+)

### "ҠУРАЙ"
07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
07.45 "Дарман" (6+)
08.15 "Төрки донъя". Төрөк телендә йырҙар (12+)
08.20 "Ҡәмит". Юмор (6+)
08.30 "Йәштәр тауышы" . Йырҙар (6+)
09.15 "Замандаштар". Азамат Кәримов (6+)
09.30 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
11.45 "Илһам" . Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
12.45 "Наза". Донъя халыҡтары бейеүе (0+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Ант" төркөмө. Концерт (6+)
20.00 "Йыһандың үҙен ҡосоп...". Шәүрә Дилмөхәмәтова (12+)

### БСТ
07.00 "Сәләм!" (12+)
10.00 "Круизы в мир открытий" (16+)
10.30, 12.30, 14.35, 17.10, 02.10, 06.15 "Выборы-2013" (16+)
10.45, 15.30 "Зеркальце" (6+)
11.15, 17.00, 02.00 "Замандаштар" (6+)
11.30 "Здоровое решение" (12+)
12.00 "Мультсериал"
12.40, 16.15 "Учим башкирский язык"
12.45, 01.45, 06.45 "Весело живем" (12+)
13.00 "Тәмле" (12+)
13.30, 19.30, 00.30 Новости (на башк. яз.)
13.40 "Мелодии лета"
14.45 "Бәхетнамә"
15.15 "Книга сказок"
15.45 "Борсак"
16.00 "Йырлы кәрәҙ"
16.30, 21.30, 03.00 "Новости (на русс. яз.)
16.45 "Криминальный спектр" (16+)
17.50 "Создай свое дело"
18.00 "Үткән ғүмер. 1960-е годы" (12+)
18.30, 02.15 "Эдера" (12+)
20.00 "Сәңгелдәк"
20.15 "Власть отвечает" (16+)
20.30 "Телецентр" (12+)
22.00 "Уфимское "Времечко" (12+)
22.30, 03.30 Художественный фильм (16+)
01.00 "Единое время"
06.30 "Полезные новости" (12+)

## 4 СЕНТЯБРЯ СРЕДА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.35 "Женский журнал"
09.45 "Жить здорово!" (12+)
10.55 "Модный приговор"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Время обедать!"
13.00 "Доброго здоровьица!" с Геннадием Малаховым" (12+)
13.45 "Истина где-то рядом" (16+)
14.00 Другие новости
14.25 "Понять. Простить" (12+)
15.00 Новости (с субтитрами)
15.15 "Женский доктор-2". Сериал (16+)
16.10 "Ясмин". Сериал (16+)
17.00 "В наше время"
18.00 "Вечерние новости" (с субтитрами)
18.45 "Давай поженимся!" (16+)
19.50 "Пусть говорят" (16+)
21.00 "Время"
21.30 "Жених". Сериал (16+)
23.30 "Вечерний Ургант". Сериал (16+)
00.00 "Ночные новости"
00.10 "Как Стив Джобс изменил мир" (12+)
01.05, 03.05 "Волк". Триллер
03.00 Новости
03.30 "Форс-мажоры" (16+)

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан"
09.00 "1000 мелочей"
09.45 "О самом главном"
10.30 "Кулагин и партнеры" (12+)
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
11.50, 14.50 "Вести. Дежурная часть"
12.00 "Тайны следствия". Сериал (12+)
13.00 "Особый случай" (12+)
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
14.50, 04.45 "Вести. Дежурная часть"
15.00 "Тайны института благородных девиц", 165-я серия. Сериал
16.00, 17.30 "Всегда говори "всегда-7". Сериал
17.00 "Вести"
17.10 "Местное время. Вести - Башкортостан"
18.30 "Прямой эфир" (12+)
19.40 "Местное время. Вести - Башкортостан"
20.00 "Вести"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Простая жизнь". Сериал (12+)
00.45 "Противостояние". Док. фильм (12+)
03.25 "Девушка-сплетница-5"

### "ҠУРАЙ"
07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
07.45 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.00 "Төрки донъя". Төрөк телендә йырҙар (12+)
08.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
09.45 "Һеҙ яратҡан йырҙар" (6+)
10.45 "Онотолор тимә...". Ретро (6+)
11.10 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
11.45 "Илһам" . Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
12.20 "Байыҡ". 1-се тур (0+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Ир ғүмере, ил ғүмере". Артур Туктағолов (6+)
21.00 "Арғымаҡ". Йөрәктауҙа уҙған концерт (12+)

### БСТ
07.00 "Сәләм!" (12+)
10.00 "Круизы в мир открытий" (16+)
10.30, 12.30, 14.35, 17.10, 02.10, 06.15 "Выборы-2013" (16+)
10.45, 15.30 "Гора новостей"
11.00 "Книга сказок"
11.15, 17.00, 02.00 "Замандаштар" (6+)
11.30 "Отдел культуры" (12+)
12.00 "Мультсериал"
12.40, 16.15 "Учим башкирский язык"
12.45, 06.45 "Весело живем"
13.00 "Тәмле" (16+)
13.30, 19.30, 00.30 Новости (на башк. яз.)
13.40 "Байыҡ-2013"
14.45 "Бәхетнамә"
14."5 "Бәхетнамә"
15.15 "Цирк в 13 метров"
15.45 "Семәр"
16.00 "Городк АЮЯ"
16.30, 21.30, 03.00 Новости (на русск. яз.)
16.45 "Орнамент"
17.50 "Алтын тирмә"
18.30, 02.15 "Эдера" (12+)
20.00 "Сәңгелдәк"
20.15, 06.30 "Полезные новоти" (12+)
20.30"Телецентр" (12+)
21.15 "Деловой Башкортостан"
22.00 "Историческая среда"
22.30 "Аль-Фатиха"
23.00, 03.30 Художественный фильм (16+)
01.00 "Единое время" (12+)

## 5 СЕНТЯБРЯ ЧЕТВЕРГ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.35 "Женский журнал"
09.45 "Жить здорово!" (12+)
10.55 "Модный приговор"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Время обедать!"
13.00 "Доброго здоровьица!" с Геннадием Малаховым" (12+)
13.45 "Истина где-то рядом"
14.00 Другие новости
14.25 "Понять. Простить" (12+)
15.00 Новости (с субтитрами)
15.15 "Женский доктор-2". Сериал (16+)
16.10 "Ясмин". Сериал (16+)
17.00 "В наше время"
18.00 "Вечерние новости" (с субтитрами)
18.45 "Давай поженимся!" (16+)
19.50 "Пусть говорят" (16+)
21.00 "Время"
21.30 "Жених". Сериал (16+)
23.30 "Вечерний Ургант". Сериал (16+)
00.00 "Ночные новости"
00.10 "Все или ничего: Неизвестная история Агента" (16+)
02.00, 03.05 "Кокон: возвращение". Фантастическая комедия
03.00 Новости

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан"
09.00 "От всей души"
09.45 "О самом главном"
10.30 "Выборы-2013"
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
11.50, 14.50 "Вести. Дежурная часть"
12.00 "Тайны следствия". Сериал (12+)
13.00 "Особый случай" (12+)
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
15.00 "Тайны института благородных девиц", 166-я серия. Сериал
16.00, 17.30 "Всегда говори "всегда-7". Сериал (12+)
17.00 "Вести"
17.10 "Местное время. Вести - Башкортостан"
18.30 "Прямой эфир" (12+)
19.40 "Местное время. Вести - Башкортостан"
20.00 "Вести"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Простая жизнь". Сериал (12+)
00.45 "Противостояния" (16+)
03.35 "Девушка-сплетница" (16+)

### "ҠУРАЙ"
07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
07.45 "Йырлап асыла күңел " (6+)
08.15 "Төрки донъя". Төрөк телендә йырҙар (12+)
08.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
09.00 "Замандаштар". Вафа Мәүлитов (6+)
09.30 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.45 "Һеҙ яратҡан йырҙар" (6+)
10.40 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
11.30 "Илһам" . Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
12.45 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 Римма Амангилдина йырлай (6+)
17.00 "Башватҡыс". Фильм (6+)
20.30 "Кис ултырып". Рәшиҙә Туйсина. Концерт (12+)

### БСТ
07.00 "Сәләм!" (12+)
10.00 "Круизы в мир открытий"
10.30, 12.30, 14.35, 17.10, 02.10, 06.15 "Выборы-2013" (16+)
10.45, 15.30 "Гора новостей"
11.00 "Царь горы"
11.15, 17.00, 02.00 "Замандаштар" (6+)
11.30 "Власть отвечает" (16+)
11.45 "Мир настоящих мужчин" (16+)
12.00 "Мультсериал"
12.40, 16.15 "Учим башкирский язык"
12.45, 06.45 "Весело живем" (12+)
13.00 "Тәмле"
13.30, 19.30, 00.30 Новости
13.40 "Песни композитора Абрара Габдрахманова" (12+)
14.45 "Бәхетнамә"
15.15 "Ғәләмәт донъя"
15.45 "Тамыр йондоҙҙары"
16.30, 21.30, 03.00 Новости
16.45 "Орнамент"
17.50, 02.15, 03.30 "Эдера" (16+)
20.00 "Сәңгелдәк"
20.15, 06.30 "Полезные новости" (12+)
20.30 "Телецентр" (12+)
21.15 "Жизнь замечательных людей" (12+)
22.00 "ФК "Уфа"
22.30, 04.15 "Художественный фильм" (16+)
01.00 "Единое время" (12+)

## 6 СЕНТЯБРЯ ПЯТНИЦА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.35 "Женский журнал"
09.45 "Жить здорово!" (12+)
10.55 "Модный приговор"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Время обедать!"
13.00 "Доброго здоровьица!" с Геннадием Малаховым (12+)
13.45 "Истина где-то рядом"
14.00 Другие новости
14.25 "Понять. Простить" (12+)
15.00 Новости (с субтитрами)
15.15 "Женский доктор-2". Сериал (16+)
16.10 "За и против". Ток-шоу (16+)
17.00 "Жди меня"
18.00 Вечерние новости
18.45 "Человек и закон" (16+)
19.50 "Поле чудес"
21.00 "Время"
21.30 "Голос"
23.40 "Вечерний Ургант"
00.35 "Под куполом". Док. фильм (16+)
01.25 "Ромовый дневник" (16+)
03.35 "Форс-мажоры" (16+)

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Местное время. Вести - Башкортостан"
09.00 "Ауаз"
09.45 "О самом главном"
10.30 "Кулагин и партнеры" (12+)
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
11.50, 14.50 "Вести. Дежурная часть"
12.00 "Тайны следствия". Сериал (12+)
13.00 "Особый случай" (12+)
14.00 "Вести"
14.30 "Вести - Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
14.50 "Тайны института благородных девиц". 167-серия
16.00, 17.30 "Всегда говори "всегда-7". Сериал
17.00 "Вести"
17.10 "Вести - Башкортостан"
18.30 "Хит" (12+)
19.50 "Спокойной ночи, малыши!"
20.00 "Вести"
20.20 "Футбол. Чемпионат мира-2014. Отборочный турнир. Россия-Люксембург. Прямая трансляция из Казани"
22.25 "Паутинка бабьего лета". Мелодрама (12+)
00.20 "Александра" (12+)
02.30 "Честный детектив" (16+)
03.00 "Путь войны" (16+)

"ҠУРАЙ"
07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
07.45"Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.00 "Төрки донъя". Төрөк телендә йырҙар (12+)
08.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
09.15 "Моңло аҙан". Дини йырҙар (6+)
09.35 "Һеҙ яратҡан йырҙар" (6+)
10.40 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
11.00 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
11.30 "Илһам" . Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
12.45 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Йома". Стәрлетамаҡ районы, Рощинский ауылы (6+)
17.00 "20-се быуат йырҙары". Концерт (6+)
20.00 "Сулпаным булһаң ғына...". Зилә һәм Хәсән Усмановтар (6+)

### БСТ
07.00 "Сәләм!" (12+)
10.00 "Круизы в мир открытий" (16+)
10.30, 12.30, 14.35, 17.10, 17.40, 06.45 "Выборы-2013" (16+)
10.45, 15.30 "Гора новостей"
11.00 "Ғәләмәт донъя"
11.15, 17.00, 02.00 "Замандаштар" (6+)
11.30 "ФК "Уфа"
12.00 "Мультсериал"
12.40, 16.15 "Учим башкирский язык"
12.45, 06.45 "Весело живем" (12+)
13.00 "Тәмле" (12+)
13.30, 19.30, 00.30 Новости (на башк. яз.)
13.40 "Мелодии души" (6+)
14.45 "Бәхетнамә"
15.15 "Зеркальце"
15.45 "Йәйгор"
16.30, 03.00 Новости
16.45 "Криминальный спектр" (16+)
17.15 "Автограф"
17.50 "Создай свое дело" (12+)
18.00 "Йома"
18.30, 02.15 "Эдера" (12+)
20.00 "Сәңгелдәк"
20.15, 06.30 "Полезные новости" (12+)
20.30"Жизнь замечательных людей" (12+)
20.45 "Чемпионат России по хоккею. В перерывах: Новости (на русс.яз.)
23.15 "Отдел культуры" (12+)
23.45 "Дарман"
01.00 "Александрия - великий город" (на баш.яз.) (16+)
03.30 "Художественный фильм" (16+)

## 7 СЕНТЯБРЯ СУББОТА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.30 "Экипаж машины боевой"
06.00 Новости
06.10 "Звонят, откройте дверь" (16+)
08.20 "Дисней-клуб"
08.50 "Смешарики. Новые приключения"
09.00 "Играй, гармонь любимая!"
09.45 "Слово пастыря"
10.00, 15.00 Новости (с субтитрами)
10.15 "Смак" (12+)
10.55 "Все трофеи Елены Прокловой" (12+)
12.00 Новости (с субтитрами)
12.15 "Идеальный ремонт"
13.10 "Д'Артаньян и три мушкетера".
18.00 Вечерние новости (с субтитрами)
18.15 "Угадай мелодию"
18.45 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым"
19.50 "Минута славы. Дорога на Олимп!"
21.00 "Время"
21.20 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым" (16+)
23.00 "Успеть до полуночи". Юмористическая викторина (16+)
23.55 "Перевозчик". Боевик (16+)
01.40 "Автора! Автора! (12+)
03.40 "Замороженная планета" (12+)
04.40 "Документальный фильм"

### РОССИЯ 1
04.50 "Менялы". Комедия (12+)
06.35 "Сельское утро"
07.05 "Диалоги о животных"
08.00 "Вести"
08.10 "Местное время. Вести - Башкортостан" (16+)
08.20 "Военная программа" Александра Сладкова"
08.50 "Планета собак"
09.25 "Субботник"
10.05 "Оренбургское село" (12+)
10.15 "Качество жизни" (12+)
10.25 "Наши новости" (12+)
10.35 "Будьте здоровы" (12+)
11.00 "Вести"
11.10 "Местное время. Вести - Башкортостан"
11.20 "Вести. Дежурная часть"
11.55 "Честный детектив" (16+)
12.25, 14.30 "Куклы". Мелодраматический сериал (12+)
14.00 "Вести"
14.20 "Местное время. Вести - Башкортостан"
16.50 "Субботний вечер"
18.45, 20.30 "Два Ивана". Мелодрама (12+)
20.00 "Вести в субботу"
23.30 "Когда цветет сирень". Мелодрама (12+)
01.20 "Горячая десятка" (12+)
02.30 "Покровитель" (16+)
04.25 "Комната смеха"

### "ҠУРАЙ"
07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
07.45 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
08.20 "Төрки донъя". Төрөк телендә йырҙар (12+)
08.35 "Тәмле" (12+)
09.15 "Ҡош юлы". Рамазан Йәнбәков (6+)
10.15 "Һеҙ яратҡан йырҙар" (6+)
10.25 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн". Лилиә Биктимерова йырлай (6+)
11.00 "Онотолор тимә... ". Ретро (0+)
11.25 "Илһам" . Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
12.45 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Йырҙарымды һеҙгә юллайым". Наил Шәймәрҙәнов (12+)
19.00 "Етегән". Хит-парад (6+)
21.00 "Оҙон-оҙаҡ баласаҡ". Фильм (12+)

### БСТ
07.00, 18.30, 00.30 Новости (на башк. яз.)
07.15 "Доброе утро!"
07.45 "Фильм детям"
09.00 "Көндәлек" (6+)
09.30 Мультфильм
10.00 "Сәләм+" (12+)
10.15 "Бәхетнамә"
10.45, 03.30 "Доброе сердце"
11.30 "Аль-Фатиха"
12.00 "Следопыт"
12.30, 21.30, 03.00 Новости (на русск. яз.)
12.45 "Здоровое решение" (12+)
13.15 "Автограф. Алмас Шаммасов" (6+)
13.45 "Весело живем"
14.00 "Дарю песню"
16.00, 14.15 "Хазина"
16.30, 04.45 "Замандаштар" (6+)
16.45, 05.00 "Золотое сердце" Спектакль
18.00 "Башҡорттар"
18.55 Футбол. Первенство ФНЛ. ФК "Уфа" (Уфа) - ФК "Спартак-Нальчик" (Нальчик"). Прямая трансляция
21.00 "Живое село" (12+)
22.00 "Башҡорт йыры - 2013"
22.45 "Еду я деревню"
23.15 "Мирас" (12+)
01.00 Художественный фильм (16+)
03.30 "Доброе сердце"
06.15 "Автограф" (6+)

## 8 СЕНТЯБРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.45, 06.10 "Поезд до Brooklyna" (12+)
06.00 Новости
07.40 "Армейский магазин" (16+)
08.15 "Дисней-клуб"
08.40 "Смешарики. ПИН-код"
08.55 "Здоровье" (16+)
10.00 Новости (с субтитрами)
10.15 "Непутевые заметки"
10.35 "Пока все дома"
11.25 "Фазенда"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.15 "Ледниковый период". Полнометражный анимационный фильм
13.45 "Крепкий орешек". Боевик (16+)
16.20 "КВН" (16+)
18.00 "Ледниковый период"
21.00 "Воскресное "Время"
22.00 "Две звезды". Лучшее
00.00 "Перевозчик-2". Боевик
01.40 "Тихий дом" на Венецианском кинофестивале
02.10 "Последняя песня" (12+)
04.10 "Форс-мажоры" (16+)

### РОССИЯ 1
05.25 "Законный брак"
07.20 "Вся Россия"
07.30 "Сам себе режиссер"
08.20 "Смехопанорама" Евгения Петросяна"
08.50 "Утренняя почта"
09.30 "Сто к одному"
10.20, 14.20 "Вести - Башкортостан. События недели"
11.00 "Вести"
11.10 "Городок. Дайджест"
11.45 "Мой папа - мастер"
12.15, 14.30 "Костер на снегу". Мелодраматический сериал (12+)
14.00 "Вести"
14.20 "Вести - Башкортостан"
16.25 "Смеяться разрешается".
18.20 "Наш выход!". Музыкальное шоу
20.00 "Вести"
21.30 "Я тебя никогда не забуду". Мелодрама (12+)
23.20 "Стерва". Мелодрама (12+)
01.15 "Эксперимент" (16+)
03.20 "Планета собак"
03.55 "Комната смеха"

### "ҠУРАЙ"
07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
07.45 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.00 "Төрки донъя". Төрөк телендә йырҙар (12+)
08.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
09.15 "Автограф". Лира Яҡшыбаева (12+)
09.45 "Һеҙ яратҡан йырҙар" (6+)
10.50 "Йырлап асыла күңел" (6+)
11.30 "Илһам" . Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
12.45 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Мораҙым Хан". Фильм (6+)
19.00 "Йондоҙло сәғәт". Иҙел Нурғәлин (6+)
22.00 "Дарман шоу". Концерт-дискотека (12+)

### БСТ
07.00, 13.00, 18.30 Новости
07.15 "Доброе утро!"
08.30 "Йома"
09.00, 16.30 "Новости"
09.15 "Мир настоящих мужчин" (12+)
09.30 "Живое село"
10.00 "Бауырһаҡ"
10.15 "Городок АЮЯ"
10.30 "Гора новостей"
10.45 "Шәп арба"
11.00 "Семәр"
11.15 "Книга сказок"
11.30 "Байтус"
11.45 "Алтын тирмә"
12.30 "Үткән ғүмер"
13.15 "Специальный репортаж" (16+)
13.30 "Башҡорттар"
14.00 "Дарю песню"
15.00 "Весело живем" (12+)
15.30 "Еду я в деревню"
16.00 "Дорога к храму"
16.45 "Вестник Газпромтрансгаз Уфа"
17.00 "Историческая среда"
17.30 "Орнамент"
17.45 "История признания" (12+)
18.00 "Любимое дело"
18.50"Чемпионат России по хоккею"
21.30 Новости недели
22.00 "Урал Лото 6 из 40" (16+)
22.15 "Байыҡ-2013"
23.15 "Вечер.com" (12+)
00.00 "Геометрия жизни" (12+)
01.00, 06.30 "Единое время" (16+)
02.15 Художественный фильм (16+)
04.00 "Вот так случилось" (12+)

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# ХӘЙБУЛЛА РАЙОНЫ



**Горизонталь буйынса:** 3. Сочила үтәсәк спорт ярышы. 6. Ниҙеңдер тәьҫиренән килгән көслө уй-тойғо. 11. Һыу буйында үҫә торған бик эре ағас. 12. Резина көпшә. 13. Автомарафон. 14. Ыштанһыҙ егет. 26. Һата торған ғәйбәт. 28. Дөйөм туҡланыу урыны. 29. Ырыу эсенә ингән вағыраҡ төркөм. 34. Туҫтаҡтан ҙурыраҡ йәйенке һауыт. 35. Башҡорт аттарына һыртын биргән йәнлек. 36. Үкенгәндә "тешләге" килгән урын. 37. Кер йыуыу һауыты. 39. "(...)оң артҡан һайын кеселегең артһын". 42. Табындағы аяҡсы. 45. Тоҙло ҡыяр йөҙгән шыйыҡса. 47. Студенттың эш хаҡы. 50. Хәйбулланың "һыйырҙар" йылғаһы. 55. Үрелгән сәс. 56. Һүҙһеҙ таҡмаҡ. 57. "Халыҡ бар ерҙә (...) бар". 58. Ниҙеңдер дөрөҫлөгөн раҫлау өсөн килтерелгән дәлил. 59. Күңелгә хәүеф һала торған нәмә.

**Вертикаль буйынса:** 1. Белем кимәлен билдәләү һынауы. 2. Американың бөйөк күле. 4. Һүҙ байлығы. 5. Аҙнаның "иң ауыр" көнө. 7. Бик бәләкәй кәүҙәле кеше. 9. Иң шәп йөҙөү ысулы. 10. Шыйғаҡлап торған ҡуйы шыйыҡса. 16. Кетчуп, майонез, аджиканың дөйөм атамаһы. 17. Башҡортостандың халыҡ шағиры (...). 19. Никель рудаһын табырға ярҙам иткән индикатор-сәскә. 20. Төйҙәле эш ҡоралы. 22. Күмәкләп йәш түгеү. 23. Әфлисунды боронғолар "алтын (...)" тип йөрөткән. 25. Ашарға яраҡлы көпшәле үҫемлек. 27. Килен йортҡа төшкәндә ҡәйнәһе биргән аяҡлы мал. 28. Судта кем прокурорға ҡаршы тора? 30. Һинд кенәзе. 32. Төркиә күле. 33. Урман, далаға ҡапҡан ут. 37. Бейек яғалы, киң, оҙон итеп тиренән теккән тышҡы кейем. 40. Билдәле тарих өҙөгөн эсенә алған ваҡыт араһы. 41. Ағастың төп, үҙәк өлөшө. 43. Манаранан әйткән һүҙ. 44. Кешенең фекер йөрөтөү һәләте. 46. Уҡыусыларҙы мәктәпкә ташыусы транспорт. 48. Ҡыҙарып, ҡубырсып торған тире сире. 49. Аҫтыртын этлек. 51. Револьвер. 52. Бешә ағасы. 53. Кухня мейесе. 54. Алтын балдаҡтағы яҙыу.

**Илдар ҒӘБИТОВ төҙөнө.**

**34-се һандағы кроссворд яуаптары:**

**Горизонталь буйынса:** 1.Ярғанат. 3.Ҡалмырҙин 6. Мәжитов. 11. Театр. 12. Ареал. 13. Тромб. 14.Урман. 15.Алгебра. 18.Сталактит. 21.Сәлимов. 26.Әминев. 28.Тәмәке. 29. Сәм. 31.Сәрхәт. 33. Ғафури. 34. Иғәнә. 35. Әбүҙәр. 36. Разряд. 37 Сәй. 39. Бүтәгә. 42. Кураре. 45. Ҡунафин. 47. Йома. 50. Олон. 55. Барымта. 56. Терпе. 57. Графа. 58. Фотон. 59. Нюанс. 60. Алабута. 61. Урманшин. 62. Снайпер.

**Вертикаль буйынса:** 1.Яҡупова. 2. Алтатар. 4. Акробат. 5. Исағужи. 7. Әйләнмә. 8. Вахитов. 9. Салон. 10. Ферма. 16. Гоби. 17. Бәке. 19. Лотос. 20. Кейем. 22. Ләлә. 23. Мөсә. 24.Сәйетбаба 25. Кейекбаев. 27. Вәсүәсә. 28. Твиндек. 30. Әрәсә. 32. Тир. 33. Ғәр. 37. Сирса. 38. Йотҡо. 40. Твен. 41. Гриф. 43. Утар. 44. Аҙым. 45. Ҡанъяға. 46. Илтифат. 48. Олеандр. 49. "Органон". 51. Алаҡсын. 52. Аҡтамыр. 53. Урата. 54. Балан.

## КОТЛАЙБЫҘ!

Август айында тыуған көндәрен билдәләүсе уҡыусыларыбыҙҙы - **Өфө ҡалаһынан** Мәрфуға Мостафина, **Миәкә районы** Садовый ауылынан Фидалиә Садиҡова, **Ғафури районы** Яугилде ауылынан Рәфҡәт Асҡаров, **Ауырғазы районы** Мораҙым ауылынан Илнур Нәҙершин, Солтан Әйүпов, **Мәләүез районы** Смаҡ ауылынан Кинйәбикә Юлмөхәмәтова, Рәзилә Ҡотлогилдина, **Стәрлебаш районы** Мортаза ауылынан Минзиә Аллабирҙина, **Ейәнсура районы** Малай Муйнаҡ ауылынан Гөлназ Аҡбашева, Ибрай ауылынан Гөлдәр Аҡбутина, **Йылайыр районы** Сидоровка ауылынан Ф. Ҡотошова, **Баймаҡ районы** Ярат ауылынан Мансур Ғәҙелшин, **Бәләбәй районы** Иҫке Семенкин ауылынан Зарема Ғүмәрова, **Благовещен ҡалаһынан** Миләүшә Шакирова, **Бөрйән районы** Иҫке Собханғол ауылынан Рәмилә Юлсурина һәм башҡа уҡыусыларыбыҙҙы ихлас күңелдән ҡотлайбыҙ һәм ҡаҡшамаҫ һаулыҡ, бәрәкәтле оҙон ғүмер теләйбеҙ. Киләсәктә лә һеҙҙе имен, ҡояшлы көндәр, бәхетле йылдар көтһөн.

**Иң изге теләктәр менән,**
**"Киске Өфө"ләр**

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

## "ТЕАТР ТӨНӨ"НДӘ ҠАТНАШ!

**12 сентябрҙә Өфөлә "Театр төнө" мәҙәни акцияһы үтәсәк. Был кистә баш ҡала халҡы һәм ҡунаҡтары өсөн барлыҡ театрҙар һәм башҡа мәҙәниәт усаҡтары үҙҙәренең ишектәрен асасаҡ.**

Өфө үҙәгендә - Ленин исемендәге, Совет, "Ҡунаҡһарай" алдындағы майҙандарҙа Театр карнавалы ойоштороласаҡ, унда урам театрҙары артистары, үҙешмәкәр коллективтар һәм башҡалар үҙҙәренең һөнәрҙәрен күрһәтә аласаҡ.

Был кистә баш ҡаланың төрлө райондарында 15-тән артыҡ майҙан эшләйәсәк. "Башавтотранс" компанияһы автобустары "Театраль маршрут" буйынса хәрәкәт итеп, тамаша күрергә теләүселәргә уңайлыҡтар тыуҙырасаҡ.

"Театр төнө" акцияһы - яңы театр миҙгелен үҙенсәлекле итеп башлап ебәрәсәк. Акцияла ҡатнашырға теләүселәр ирекле формала ғариза яҙып, info@eventufa.ru электрон адресына ебәрергә тейеш. Унда номерҙың жанры, эстәлеге, оҙайлығы, ҡатнашыусыларҙың һаны, ниндәй майҙанда сығыш яһарға теләүе тураһында яҙылһын.

Был саралар буйынса тулыраҡ мәғлүмәттәр БР Мәҙәниәт министрлығының рәсми сайтында урынлаштырылған: www.minkult-rb.ru

ҠЫҘЫҠ ТАҺА!

## ТӨШТӘР ТУРАҺЫНДА

- Кеше ғүмеренең өстән бер өлөшөн йоҡлап үткәрә. Дөрөҫөн әйткәндә, йоҡо кеше өсөн ашауға ҡарағанда ла мөһимерәк. Ашамайынса ике ай йәшәп булһа, йоҡоһоҙ ун көн дә йәшәп булмай.
- Тәүлегенә 7-8 сәғәт йоҡлау норма иҫәпләнә. Әммә балалар 10 сәғәт йоҡларға тейеш. Олоғая барған һайын был һан кәмей бара.
- Йоҡлаған саҡта кешенең тәне бөтөнләй ҡуҙғала алмай тиерлек. Был кеше төшөндә күргән хәрәкәттәрҙе ҡабатламаһын өсөн кәрәк.
- Тышҡы факторҙар төшкә тәьҫир итә. Мәҫәлән, йоҡлап ятҡан кешенең һыу эскеһе килһә, ул төшөндә мотлаҡ һыулы стакан күрәсәк. Төштә күпме генә һыуһынды ҡандырырға теләһәгеҙ ҙә, был килеп сыҡмаясаҡ һәм һеҙ уянып һыу эсмәйенсә, һыулы стаканды төштә күреп тик ятасаҡһығыҙ.
- Тәмәке тартыуҙы ташлай алған кешеләр башҡаларға ҡарағанда сағыу һәм реалистик төштәр күрә. Улар төштәрендә яңынан тарта башлағанмын икән тип, үҙен ғәйепле тоя икән.
- Төҫлө төштәрҙе бар кешеләр ҙә күрмәй. 12 процент кеше аҡлы-ҡаралы төштәр генә күрә.
- Беҙ төштә йыш ҡына таныш булмаған кешеләрҙе күрәбеҙ, әммә уларҙы беҙ ҡасандыр булһа ла күргәнбеҙ, әммә хәтеребеҙҙә ҡалдырмағанбыҙ.
- Бөтөн кешеләр ҙә төш күрә. Шулай ҙа ҡатын-ҡыҙҙарға һәм ир-егеттәргә төрлө төштәр инә. Ир-егеттәр төшөндә ирҙәрҙе күрә, ә ҡатын-ҡыҙҙарға ирҙәр һәм гүзәл заттар тигеҙ өлөштә инә.
- Беҙ төштәрҙең 90 процентын онотабыҙ. Уянғандан һуң төштә нимә күргәнебеҙҙе хәтерләмәйбеҙ.

САҠЫРАБЫҘ!

# ҠУРАЙҘЫҢ УРЫНЫ...

## һәр саҡ түрҙә



### Барыбыҙ ҙа бер йөҙлө

Этно-фестивалдә ҡатнашыусы ҡайһы бер төркөмдәр менән беҙ сит илдәрҙә бергә сығыш яһағаныбыҙ бар һәм уларҙың тамашасыға нисек тәьҫир итеүҙәрен белә инек. Улар менән сит илдәрҙә сығыш яһағанда мотлаҡ рәүештә бергәләп фотоға төшәбеҙ бит инде. Башҡортостанға ҡайтып, шул фотоларҙы ҡараһаҡ, барыбыҙҙың да бер үк йөҙлө, бер тугандар кеүек өкшаш икәнлегебеҙҙе күреп аптырайбыҙ. Был саҡта хатта Эквадорҙа йәшәүсе индеецтар ҙа Баймаҡ кешеһе һымаҡ күренә. Күп кенә төркөмдәр был акцияның тауҙы һаҡлауға бәйле булыуын белгәс, юл хаҡын ғына түләү шарты менән, гонорарҙы ҙа килергә риза булыуын белдерҙе. Беҙгә килергә теләүселәр күп булды, әммә беҙ уларҙың араһынан иң-индәрен һайлап алырға тырыштыҡ.

Ысынлап та, аҡсаға һәр кем дә сығыш яһай ала. Шуға күрә беҙҙең фестивалгә килеүселәрҙә мин ысын мәғәнәһендәге тәбиғәт һаҡсылары булған профессионалдар тип атар инем. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, беҙ этно-фестивалдә сығыш яһаусыларға гонорарҙарын түләнек.

Тәбиғәтте яратҡан, илаһилыҡты аңлаған музыканттың башҡарған көйө лә икенсерәк. Төркөмгә ҡараусылар төрлө диндәге кешеләр булыуға ҡарамаҫтан, улар илаһилыҡ юлында булғас, барыбыҙ ҙа бер Әҙәм менән бер Һауа балалары булыуыбыҙҙы Торатау янында нығыраҡ тойҙоҡ.

Беҙ күп кенә сәнғәт әһелдәренән айырмалы рәүештә, бюджеттан бер тин дә аҡса алмайбыҙ. Беҙгә халыҡ алдына сығырға мөмкинлек бирелгән икән, был оло яуаплылыҡ һәм был ғәмәлдә Аллаһ ризалығы менән башҡарһаң, һиңә бәрәкәт килә башлай. Әгәр ҙә ошондай саҡта һин халыҡ өсөн бөтөнләй кәрәк булмаған, эшкә ашмаған йырҙарың менән сығыш яһай башлаһаң, ул осраҡта мин күп кенә йырсыларҙың хатта тауыштары ҡыҫылып, сәхнәнән оятҡа ҡалып төшкәнен күргәнем бар. Фонограммаға йырлай башлауҙың да бер сәбәбе тап ошоға бәйлелер, тип уйлайым. Башҡорт халыҡ йырҙарын фонограммаға йырлап булмай, сөнки уларҙың донъяға яралыуы ла илаһилыҡҡа бәйле һәм илаһилыҡты алдау юлы менән тыуҙырып булмай. Тап шуның өсөн дә беҙҙең йырҙарҙы "фанерағa" йырларға тырышыусы йырсынан Хоҙай талантын тартып ала. Беҙҙең халыҡ йырҙары илаһилыҡта яралған һәм уларҙы башҡарып, тыңлаусының күңеләндә шул илаһи тойғоларҙы тыуҙырыр өсөн иман юлында булырға кәрәк. Тимәк, башҡорт халыҡ йырын башҡарыу, уны музыка ҡоралында уйнауҙың яуаплылығы Аллаһы Тәғәлә ҡаршыһындағы яуаплылыҡҡа тиң ғәмәл.



### Рәхмәтлебеҙ

Элек беҙ Мәскәү яғында ҙурыраҡ концерт ҡуйып, мулыраҡ аҡса эшләһәк, шул аҡсаға үҙебеҙҙә төрлө саралар ойоштора торғайныҡ. Быйыл байрамды халыҡ-ара кимәлдә үткәрергә насип булды һәм ҡайһы бер кешеләр әйтеүенсә, ул көндө Торатау янына 15-20 мең самаһы кеше килеп киткән. Ҡайһы бер кешеләр майҙанға ике тапҡыр, тәүҙә асыу тантанаһына, аҙаҡ һуңғы өлөшкә килгән. Ысынлап та, майҙанға инер өсөн машиналар көн һуҙымында сиратҡа теҙелде. Аш-һыу, аҙыҡ-түлек менән һатыу итеүселәр ҙә ул көндө мул табыш алған. Уларҙың килтергән тауарҙары, баҡтиһәң, тиҙ генә бөтә лә ҡуя икән. Был да яҡшы күрһәткес, әлбиттә. Фестивалде халыҡ-ара кимәлдә матур итеп үткәреүҙә Аллаһтан һорағайныҡ. Ул беҙгә был мөмкинлекте бирҙе. Сараны үткәреүҙә ярҙам күрһәткән өсөн "Урал", "Изгелек" хәйриә фондтарына үҙебеҙҙең рәхмәтебеҙҙе белдерәбеҙ, уларға ныҡлы һаулыҡ, эштәрендә уңыштар теләйбеҙ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Роберттың әйтеүенсә, әле үк "Ҡурайсы" төркөмөнөң электрон адресына "Торатау- 2014" халыҡ-ара этно-фестивалдә ҡатнашырға теләүселәр хаттар ебәрә башлаған икән. Шуныһы ла һөйөнөслө: Ишембай районы һәм ҡалаһы хакимиәте "Торатау" халыҡ-ара этно-фестивалде киләсәктә райондың бренд сараһына әүерелдермәксе. Бик хуп.**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ яҙып алды.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә әйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# БӘХЕТ АЛҒА БАРҒАНДА...

## мал арты менән инә, ти

Ҡатыны яҡшы кешегә бәхет кәрәкмәй, ҡатыны яман кешегә ләхет кәрәкмәй.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Ҡартлыҡтың трагедияһы бит ҡартайыуҙа түгел, ә йөрәктең йәш ҡалыуында.

**(О. Уайльд).**

Кеше ғүмере үткәндә тикшереүҙәр, хәҙергегә зарланыуҙар, киләсәктән ҡурҡыу менән үтә.

**(А. Ривароль).**

Бөтә сәйәсмәндәр ҙә бер төрлө: бөтәһе лә йылға булмаған ерҙә күпер төҙөргә ант итә.

**(Н. Хрущев).**

Кешене яратырҙан алда хөкөм итергә кәрәк, ятаҡҡас, хөкөм итә алмаҫың.

**(Марк Туллий Цицерон).**

Үҙҙәренең ҡоллоҡ менән кәмһетелгәнен аңламаған халыҡ ҡалай йәл миңә. Тимәк, улар ҡол булыр өсөн тыуған.

**(Петр Чаадаев).**

Илһам - ул ялҡауҙарҙы урап үтеүсе ҡунаҡ.

**(Петр Чайковский).**

Ҡатын-ҡыҙ берешмәнә - еңә, берешһәнеүсегә үҙ шарттарын тағa.

**(Карел Чапек).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер кешене дуҫы ҡунаҡҡа саҡыра. Ул дуҫы һонған эсемлекте эсергә тип ауыҙына яҡын килтерһә, һауыт эсендә бәләкәй генә йылан һыҙын күреп ҡала. Әммә хужаның иғтибарын йәлеп итмәҫ һәм үпкәләтмәҫ өсөн, һауыттағы эсемлекте төп күтәрә эсеп ҡуйырға мәжбүр була.**

**Өйөнә ҡайтҡас, был кешенең ашҡаҙаны бик ныҡ итеп ауырта башлай. Әллә күпме дарыуҙар эсә. Әммә бер ни ҙә ярҙам итмәй, ашҡаҙандағы ауыртыуҙар тағы ла нығыраҡ көсәйә. Кеше ысынлап та уның эсенә баяғы эсемлек менән бергә йылан инеүенә, хәҙер инде уны үлем сигенә алып барып еткермәй тукталмаясағына көндән-көн нығыраҡ ышана.**

**Дуҫы был кешенең ауырыуы тураһында ишетеп ҡала һәм уны тағы ла өйөнә саҡыра. Уны элек ултырған урынына ултыртып һәм эсемлек һалынған һауыт һона. "Эс, был - дарыу!" ти ҡаты итеп. Ауырыу эсергә тип һауытты ауыҙына яҡынайтҡанда уның эсендә тағы ла йылан һыҙын күрә. Был юлы инде ул хужаның иғтибарын ошо үҙе күргәнгә йәлеп итеүҙән тартынмай. Хужа барыһын да аңлай һәм бер һүҙ әйтмәйенсә, өйҙөң түшәменә төртөп күрһәтә. Ә түшәмдә иһә оҙон булып, йылан һымаҡ бөгәрләнеп сыбыртҡы эленеп торған була. Ауырыу һауыт эсендәге ул күргән йыландың әлеге сыбыртҡы күләгәһе булыуын аңлай. Дуҫтар бер-береһенә ҡарап, көлөп ебәрәләр. Кешенең ашҡаҙанындағы ауыртыныуҙары аҡрынлап бөтә һәм ул һауыға...**

**...Үҙ-үҙенде ышандырырға тырышыу, шикшөбһәләр менән уратып алыу бына шулай ауырыуға ла әйләндерә ала шул кешене..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:**
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Таһир ИШКИНИН,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Беҙҙең адрес:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 5 сентябрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 5006
Заказ 3259